ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 ғинуар (һыуығай) 2022

№3 (993)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Баш ҡалала... урмандар ҡалырмы? 5



Уҡырға, эшләргә килдек тә... Өфөлә бер ҡорға тупландыҡ 8-9



Ул... аяҡ аҫтында ғына 12



Һаҡланығыҙ: "омикрон" килә 13



ТВ-программа 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 1 февралдән 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Өсөнсө йыл пандемия шарттарында йәшәү беҙҙе уртаҡ теләк менән берләштерҙеме: һәр көндөң ҡәҙерен белергә өйрәттеме? Тағы ниндәй һабаҡтар бирҙе?

***Фирүзә АБДУЛЛИНА, уҡытыусы, Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы, шағирә:*** Пандемия шарттарында йәшәү осоронда беҙ бик күп нәмәгә икенсе күҙлектән ҡарарға өйрәндек. Ниндәй матур тормошта йәшәгәнбеҙ икән ошоға тиклем, белмәгәнбеҙ генә. Битлектәр кейеп, өйҙәребеҙгә инеп бикләнгәс кенә саф һауаны күкрәк тултырып һулауҙың да ҙур бәхет, кинәнес икәнлегенә төшөндөк, юғиһә бит, булғанына шөкөр ҡылыуҙар, эргәндәгенең ҡәҙерен белеүҙәр онотола башлағайны түгелме?

Кеше бәхетте, рәхәтте ҡайҙандыр ситтән эҙләй башланы, әйтерһең дә, унда әҙерләп ҡуйғандар... Ә бит уйлап ҡараһаң, ул үҙебеҙҙең һауаны һулау, үҙ еребеҙҙең ҡәҙерен белеү, үҙ йортобоҙ, ғаиләбеҙ именлеген һаҡлау; туған-тыумаса, дуҫ-иш, күрше-күлән менән татыу һәм берҙәм йәшәү - бына нимә икән ул бәхет! Эйе, һеҙҙең һорауҙағыса, бөгөнгө көн бөтә кешеләр ҙә бер теләк менән йәшәй: был ҡурҡыныс зәхмәт тиҙерәк үтеп китә күрһен дә, уны имен-аман йырып сығырға яҙһын, амин. Яҡындарыбыҙ менән бергә булайыҡ, иҫән-һау, сәләмәт йәшәйек!

Пандемияға тиклем кеше үҙенең һаулығына әллә ни иғтибар биреп еткермәй ине, сөнки һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге ойоштороу проблемалары, ҡайһы бер табиптарҙың квалификация кимәле, район, республика медицина учреждениеларына телгән һәм кәрәкле мәлдәрҙә эләгеү мөмкинлеге булмауы, төрлө медицина хеҙмәттәренә күпләп күсә барыу тәртибе сирлеләр өсөн табипҡа юлдарҙы япты. Шуға күрә хәҙер күптәр халыҡ дауалау сараларына мөрәжәғәт итә, үләндәр менән дауаланыуға күсте. Бөгөн, пандемия шарттарында был тәжрибә бик тә ярап ҡалды, тип әйтер инем. Әлеге шул тыуған еребеҙҙән һут, шифа алып үҫкән дарыу үләндәре беҙгә ярҙамға килде. Кеше үҙе генә ҡулланып ҡалмай уларҙы, ә социаль селтәрҙәр аша иммунитетты нығытыу, вирусҡа ҡаршы көрәшеү буйынса бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлаша, бербереһенән теге йәки был дауалау сараларына өйрәнә. Ҡыҫҡаһы, ошо ике йылда һаулығыбыҙҙы һаҡларға, ҡәҙерләргә өйрәндек. Һәр иртә һайын, яңы тыуған көндө шөкөр итеп ҡаршыларға, һәр имен көнгә ҡыуанырға, берберебеҙгә иғтибарлы булырға өйрәтте тажзәхмәт.

Шул уҡ ваҡытта коронавирус үҙенең ағыуы менән кешеләрҙе зарарлап ҡына ҡалманы, йәмғәтселекте берләштереү урынына уны ике лагерға бүлеп тә ҡуйҙы. Уның зәһәрлеге бына шунда ла күренде. Госпиталь һәм дауаханаларҙың сирлеләр менән тулыуына ҡарамаҫтан, вирустан һаҡланыу сараларын инҡар итеүселәр ҙә табылды: улар прививкаға ҡаршы сыҡты, өйҙә ултырырға теләмәй, ошондай хәүефле ваҡытта туристар сифатында сит илдәргә туҡтауһыҙ сәфәр ҡылыусы бошмаҫтар ҙа байтаҡ булыуы асыҡланды; ә ҡайһы берәүҙәр халыҡ күп йөрөгән урындарға, мәҫәлән, аҙыҡ-түлек магазиндарына битлек киймәй килеп инеүҙе лә батырлыҡ һанай башланы. Шулай итеп, пандемия берләштереп кенә ҡалманы шул халыҡты, ә икегә бүлде. Әлбиттә, һәр кемдең үҙ фекерендә ҡалырға хаҡы бар, ләкин был башҡаларға зыян килтерерлек рәүештә эшләнергә тейеш түгелдер, тигән уйҙамын.

## БАШ ҠАЛАМ

# БЕҘҘЕҢ БИҪТӘ



**Гәзиттә лә, интернет киңлектәрендә лә Өфө тураһындағы фекерҙәрҙе уҡып барам. Шулай ҙа әлегә тиклем үҙем тыуып үҫкән һәм әле лә шунда ғүмер иткән Шаҡша биҫтәһе хаҡында фекерҙәрҙе бик әҙ осратам. Был бигерәк тә матбуғат сараларына ҡағыла. Беҙҙең район тураһында барыһы ла онотҡандай тойола миңә. Беҙ Өфө ҡалаһы составында, ләкин шул уҡ ваҡытта уға бөтөнләй мөнәсәбәте булмаған айырым хужалыҡ кеүек. Шуға күрә үҙемде борсоған һәм шулай уҡ биҫтәлә нимә оҡшауы тураһында бер кәлимә фекеремде белдереп китәйем әле, тип ҡулыма ҡәләм алдым.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

## АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ!

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада еңеүселәре билдәләнде. Утыҙ алтынсы тапҡыр уҙғарылған олимпиадала Башҡортостандан, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән бөтәһе 218 уҡыусы ҡатнашты.**

Быйыл олимпиада ике өлөштән торған: тәүҙә ситтән тороп һайлап алыу туры уҙғарылған, һөҙөмтәлә иң-индәр Өфөгә саҡырылған. Ойоштороусылар әйтеүенсә, тәүге турҙа ике меңгә яҡын уҡыусы үҙ көсөн һынап ҡараған һәм улар араһынан 218-е артабан ҡатнашыу хоҡуғын алған. Һөҙөмтәлә олимпиаданың 9 еңеүсеһе һәм 39 призеры билдәләнгән.

**(Дауамы 6-сы биттә).**




*Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы уҡыусыһы К. Ҡыуатова.*

12+

✓ Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Етмәһә, хөкүмәт аҡсаһын түләп тора. Ә бит элек ғаилә һайын 5-10-ар бала булды. Бер-береһененең кейемен кейеп үҫһәләр ҙә, улар бер ҙә фәҡирлек тоймай, ғорур, сыныҡҡан булып үҫтеләр.



БАШ ҠАЛАМ

# БЕҘҘЕҢ БИҪТӘ

(Башы 1-се биттә).



Һуңғы ваҡытта йәмәғәт транспортына ҡағылышлы күп һорауҙар өҫкә ҡалҡып сыҡты. Халыҡ, бәлки, урынлы көйһөҙләнәләр, сөнки эшкә һәм уҡыуға барыу, башҡа йомош менән сыҡҡанда туҡталҡала оҙаҡ автобус көтөү бер кемгә лә оҡшамай. Ләкин ана ҡойолам, бына тирелəм тип йөрөгән иҫке автобустарҙы ҡулланылыштан алыу күптән кәрәк ине, тигән фекерҙәмен.

Ә хәҙер беҙҙең биҫтәгә күсәйек. Шаҡша биҫтәһендә был проблеманың барлыҡҡа килеүенә бер-ике йыл ғына түгел, ул ғүмер буйы булды. Ә баш ҡаланың үҙәгенә бала ултырған коляска менән барыу кәрәклеге ҡалҡһа, бөтөнләй эштәр харап, сөнки быға ҡулайлаштырылған автобустар бөтөнләй юҡ кимәлендә. Дауаханалар - ололарҙыҡы һәм балаларҙыҡы - бар, әлбиттә, ләкин унда башлыса терапевт һәм педиатр ғына эшләй. Башҡа белгестәргә күренер өсөн ҡала үҙәгенә сығырға кәрәк йәки коммерция дауаханаларына барырға тура килә. Ял, байрамдар ваҡытында сауҙа үҙәктәрендә уҙғарылған төрлө саралар тураһында уҡып ҡына беләбеҙ. Беҙҙең биҫтәлә лә ошондай матур, заманса, балалар өсөн тәғәйен уйын бүлмәләре булған нөктәләр барлыҡҡа килһә ине, тигән хыял менән йәшәйбеҙ. Шулай уҡ бассейн тураһында хыялланабыҙ.

Ваҡытында беҙҙең Шаҡша эшселәр ҡасабаһы ине. 1980 йылда ҡасабаны Өфөгә ҡушҡас, атай-әсәйҙәрҙең "Үәт, хәҙер, беҙҙең ҡасаба ҙурайып, үҫеп, баш ҡаланың башҡа үҙәк райондары кеүек буласаҡ", тип һөйләгәндәрен иҫләйем. Ләкин бөгөнгө Шаҡша шул ваҡыттағы ҡасабанан бер нәмәһе менән дә айырылмай тиерлек. Әлбиттә, тәүҙә ҡасаба ҙурайҙы, элекке көтөүлектәр урынына күп ҡатлы йорттар ҡалҡты, йәш ғаиләләр күсеп килде, балалар баҡсалары, мәктәптәр асылды. Тик тора-бара был энтузиазм һүрелде. Өфөгә "миллионлы ҡала" исеме алырға ярҙам иткән биҫтәбеҙ ҡағыҙҙа ғына баш ҡаланың райондары иҫәбендә, ә асылда бөгөн дә ҙур ауыл булып ҡала килә.

Иң иҫте китергәне - юлдар. Йорттар араһында балалар майҙансыҡтары төҙөп ҡуйҙылар, ләкин яҙын-көҙөн унда барып етеү өсөн һыулы-ҡойоло марш-бросок үтергә кәрәк.

Шаҡша - ҙур төҙөлөш майҙансығына дәғүә итә алырлыҡ биҫтә. Беҙҙә төҙөлөш алып барырға ярамаған урындар, архитектура һәм тарихи ҡомартҡылар юҡ, йорттар төҙөү өсөн бихисап урын, ләкин ошо өлкәләге бөтә компаниялар ҙа Өфөнөң нәҡ үҙәгендә майҙан эләктереп ҡалыу өсөн тартҡылаша.

Беҙҙә бер нисә бәләкәй күл бар. Ләкин уларҙың бөгөнгө хәл-торошо һәйбәттән түгел. Бигерәк тә Ҡасим быуаһы урындағы халыҡтың иң ҙур бәләһе. Уны таҙартып, тирә-яғын матурлап, парк йә булмаһа пляж эшләнһә ине, тигән теләктәбеҙ.

Яҙаһы ла, әйтәһе лә һүҙҙәр күп, бер мәҡәләгә генә һыйып та бөтмәй. Нисек кенә булһа ла Шаҡшала йәшәгән һәр кем уны тыныслығы өсөн ярата. Беҙ күрше-тирә менән тығыҙ аралашып йәшәйбеҙ, бында һәр кем үҙ ҡапсығына бикләнмәгән. Яҡын киләсәктә беҙ ҙә үҙебеҙҙең хаҡта Өфөнөң тулы хоҡуҡлы бер өлөшө итеп һөйләп, биҫтәлә барған үҙгәрештәрҙе күреп, шатланып ултырырбыҙ, тип өмөт итәм.

**Рафиҡ ШӘЙХЕТДИНОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Өсөнсө йыл пандемия шарттарында йәшәү беҙҙе уртаҡ теләк менән берләштерҙеме: һәр көндөң ҡәҙерен белергә өйрәттеме? Тағы ниндәй һабаҡтар бирҙе?***

***Таңһылыу ЙӘНТҮРИНА, хажиә, педагогика ветераны, Сибай ҡалаһы:*** Һеҙҙең был һорауға яуап әҙерләп ултырғанда бергә уҡыған курсташыбыҙҙың ошо афәттән китеп барғанын хәбәр иттеләр... Туҡтауһыҙ уйланырға мәжбүр итә был хәлдәр. Үҙемдең, замандаштарымдың тормош юлын күҙ алдынан үткәрәм: дөрөҫ йәшәнекме икән был фани донъяларҙа беҙ? Уйлап ҡараһаң, беҙҙең быуын бик бәхетле булған бит: һуғыш күрмәнек, аслыҡтан миктәмәнек, бала сағыбыҙ, йәшлегебеҙ шаулап-гөрләп үтте. Үкенерлек түгел, киреһенсә, һағынып иҫкә алырлыҡ хәтирәләр күп, ә ҡалғандары, хәҙерге заман менән сағыштырһаң, буш ҡына нәмәләр булған икән дә!

Беҙҙең быуын эшһеҙлектең ни икәнен дә белмәне, эшһеҙ кеше лә булманы, тиерлек. Ә инде бөгөнгөләй пандемия, куар-код, ПЦР-тест, үҙҡурсаланыу, кеше менән кеше араһында дистанция кеүек нәмәләрҙе яман төштә лә күрмәнек. Әлеге мәл донъябыҙҙа булып ятҡан хәүефле хәлдәр тикмәнән түгелдер, тейем мин. Юғарынан килгән Илаһи көс тарафынан кешелектең яңылыш юлдан китеп барыуын аңлатыр өсөн, бәндәләрҙең аңын уятыр өсөн, әле һуң булмаҫ борон уларҙы һаҡлап ҡалыр өсөн күрелгән һуңғы сараларҙың береһелер, тип аңларға кәрәктер быны. Кешелектең һәләкәт сигендә тороуын аңлағандар тәүбәгә килеп, йәшәү рәүештәрен күҙҙән үткәрергә, тормош һәм ҡылыҡтарын тейешле юҫыҡта дөрөҫ көйләргә бурыслылыр. Һәр кем үҙенең был ергә мәңгелеккә килмәгәнлеген аңлап, һәр минутының ҡәҙерен белеп, үҙ ғүмерен генә түгел, яҡындарын да ҡурсаларға ынтылһа, берҙәмлек, ҡан ҡәрҙәшлек тойғоһона тоғролоҡ һаҡлап,татыулыҡта йәшәһә, донъяла ыңғай энергетика артыуын тойор инек. Шуға бәйле аңыбыҙ яңырыу кисерер, тәбиғәт ҡанундары сиктәренә ҡайтыр ине, тип уйлауым. Ысынлап та, әҙәп-әхлаҡты онотоп, тәбиғәтебеҙҙе үҙ ҡулдарыбыҙ менән емереп, талап, бысратып, ошо рәүешле ғүмер һөрөү артабан мөмкин түгел, күрәһең. Еребеҙ тонсоға, уға яңы һулыш кәрәк - ул йәшәргә тейеш!

Пандемия күптәрҙе уйланырға, теләйме, юҡмы - тормошон икенсе юҫыҡҡа борорға, тәүбәгә килергә мәжбүр итәлер, тейем. Һәр хәлдә, планетаның бөгөнгө торошона бер кем дә битараф ҡалмағандыр, сөнки пандемия барыһына ла ҡағылышы булған ҙур ҡаза, бәлки, яҙалыр. Шуға ла һәр кем үҙенең эске аңын ыңғайға, яҡшыға көйләп, фәҡәт изге уйҙар һәм ниәттәрҙә генә булырға, яҡшы ғәмәлдәр ҡылып йәшәргә үҙен күнектерергә бурыслы. Йәшәйешебеҙҙәге үҙгәрештәрҙе яңыса ҡараштан ҡабул итергә лә өйрәнеү кәрәк, сөнки ауырлыҡтар һәм юғалтыуҙар бер кемде лә ситләп үтмәйәсәк. Бындай ваҡытта ҡаушап, юғалып ҡалмаҫ өсөн йәшәйеш ҡанундарын аңлай белеү һәм иманлы булыу - иң тәү фарыҙ. Иманы ныҡ - ҡаҡшамаҫ, ихтыяры уның ныҡ булыр. Пандемия һабаҡтарының иң мөһиме шуға ла, минеңсә, кешеләрҙең тормош асылына төшөнөп, иманһыҙ үткәргән йылдары өсөн үкенеү кисереп, тәүбәгә килеү, Аллаһу сүбхәнә Тәғәләнең барлығына, берлегенә инаныу, Унын ҡөҙрәтенә һыйыныу һәм һығыныу. Бына шул саҡта кеше үҙен яҡлауһыҙ һәм яңғыҙ итеп тоймаясаҡ, ауырлыҡтар һәм сир-зәхмәттәрҙе лә еңелерәк үткәрәсәк.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЭЛЕК ҺӘМ ХӘҘЕР



**Әхлаҡ, тәрбиә, бер-береңә мөнәсәбәт хаҡында күп һөйләйҙәр, даими яҙалар. Яҙған мәҡәләне гәзит алдырған кеше уҡый, ә күптәр гәзит тә алдырмай. Булған проблемалар тураһында гәзит биттәрендә баҫылып сыға, уҡыла һәм шунан ары китмәй. Элек "Гәзит сығыш яһаны, ниҙәр эшләнгән?" тигән яуап яҙыла ине. Әхлаҡ, тәрбиә, балалар хаҡында мәҡәлә тормоштан алып яҙыла икән, ниңә мәҡәлә яуап алыу өсөн Мәғариф министрлығына, йәштәр менән эшләү органдарына барып етмәй, йәки етәкселәр ниңә ул мәҡәләне уҡып, штурвалды шул йүнәлешкә бормай? Беҙ, ябай кешеләр, яҙырбыҙ ҙа ул, күп ыңғай һәм тиҫкәре яҡтарҙы төҙәтеү өҫтәге етәкселәрҙән тора бит.**

## Беҙҙең бала сағыбыҙ…

Мин философ та, аҡыл эйәһе лә түгел, ябай ауыл малайы, әммә үҙебеҙҙең бала саҡ менән хәҙергене сағыштырырлыҡ тәжрибәм бар. Беҙ, 50-70-се йылдар балалары, икмәк ашап, һөт-ҡатыҡ эсеп, бүрек, бишмәт, быйма кейеп үҫтек. Урам тулы бала-саға ине, ауыл мәктәбе 8 йыллыҡ булһа ла, 280-320 уҡыусы уҡый торғайны. Хатта бер-беребеҙҙе белеп тә бөтмәгәнбеҙҙер. Хәҙер мәктәп 10 йыллыҡ булһа ла, 80-90 бала белем ала. Был нилектән шулай? Сөнки йәштәрҙең күбеһе ауылда ҡалмай, ситкә сығып китә, ҡалғандары ла, фәҡирлекте арттырмайым, тип, икенән артыҡ бала тапмай. Ниндәй фәҡирлек? Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Етмәһә, хөкүмәт аҡсаһын түләп тора. Ә бит элек ғаилә һайын 5-10-ар бала булды. Бер-береһененең кейемен кейеп үҫһәләр ҙә, улар бер ҙә фәҡирлек тоймай, ғорур, сыныҡҡан булып үҫтеләр. Ата-әсә баланы аҡса өсөн түгел, беҙҙең бәхет, шатлыҡ, өмөт, тип тапты. Беҙ сандали, шаровар салбар кейеп, таш, ағас, һөйәк, тимер киҫәге менән уйнап үҫтек. Бәләкәй генә өйҙә мейес араһында быҙау, кәзә-һарыҡ бәрәстәре, һике аҫтында ҡаҙ баҫып ята, беҙ һике өҫтөндә инек.

## Әҙәпле булдыҡ

Элек беҙ уҡытыусыларҙы Алла урынына күрҙек, ололарҙы хөрмәт иттек, баш эйеп иҫәнләштек. Бер ниндәй ҙә эротика булмаған һинд киноһына ла индермәй торғайнылар, хәҙер телевизорҙа нимә генә күрһәтмәйҙәр, ейән-ейәнсәрең ҡарай шул тапшырыуҙарҙы, һин оялып сығып китәһең.

Беҙ йәш саҡта әҙәпле итеп аулаҡтарға йөрөнөк, тәҙрә аша ҡыҙҙар менән таҡмаҡтар әйтештек, улар өйгә

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Медиалогия" компанияһының 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәй төбәктәре башлыҡтары рейтингында дүртенсе урынды алды. Ике йыл рәттән ул медиарейтингта Волга буйы федераль округындағы коллегаларына алдынғылыҡты бирмәй. Дөйөм рейтингта беренсе баҫҡысты Мәскәү мэры Сергей Собянин биләй, икенселә - Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов. Өсөнсө урын Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьевта.

✓Башҡортостандың оперштабы мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала 21 ғинуарҙа 305 сир осрағы асыҡланған. Пандемия башланғандан алып бөтәһе 126 361 кешелә коронавирус табылған, 117 меңдән ашыу һауыҡҡан. Әле инфекция менән көрәшеүселәр һаны йәнә 4 меңдән ашҡан. Уларҙың 157-һе стационарҙа дауалана, 43-ө ауыр хәлдә. Тәүлек эсендә туғыҙ кеше вафат булған, бөтәһе 4620 пациент яҡты донъя менән хушлашҡан. Еңелсә ауырыған 4147 кеше өйҙә дауалана.

✓Коронавирустың тиҙ йоғошло яңы төрө - "омикрон" менән Башҡортостанда 23 кеше ауырыуы асыҡланған. Биологтар "омикрон" йоҡторғандан һуң пациентта коронавирустың башҡа төрҙәренән иммунитет барлыҡҡа килмәүен асыҡлаған. Шулай уҡ Гамалеи исемендәге үҙәк директоры Александр Гинцбург "Спутник-V"-ның яңы штамға ҡаршы тороу көсө 75 процент тәшкил итә, тип белдерҙе.

✓Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин эш биреүселәргә хеҙмәткәрҙәрҙе дистанцион эшкә күсерергә кәңәш бирҙе. "Табиптарыбыҙға ярҙам итеү һәм медицина учреждениеларына йөкләмәне кәметеү өсөн хеҙмәткәрҙәрҙе өйҙән эшләүгә күсерергә кәрәк. Был тәү сиратта өлкән йәштәгеләргә һәм хроник сирлеләргә ҡағыла", - тине ул. Мишустин шулай уҡ дистанцион эшкә күсмәгән хеҙмәткәрҙәргә тест үткәреү кәрәклеге хаҡында ла әйтте.

✓Уҙған аҙнала (10-16 ғинуарҙа) донъяла коронавирус йоҡтороуҙың яңы осраҡтары 20 процентҡа артҡан. Был осорҙа коронавирустан вафат булғандар һаны унан алдағыһы менән сағыштырғанда үҙгәрмәгән. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, үткән аҙнала донъяла COVID-19 йоҡтороуҙың 18 миллион яңы осрағы һәм коронавирус менән ауырығандар араһында 45 мең үлем теркәлгән. Хәҙерге ваҡытта ауырыуҙың кәмеүе күҙәтелгән берҙән-бер төбәк - Африка.

*✓ Пандемия беҙгә аралашыу, көрәшеп, хәл-әхүәл белешеүҙең, туғандар, дуҫтар менән осрашып, ихлас һөйләшеп ултырыуҙарҙың ниндәй ҙур шатлыҡ булыуын төшөндөрҙө.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Өсөнсө йыл пандемия шарттарында йәшәү беҙҙе уртаҡ теләк менән берләштерҙеме: һәр көндөң ҡәҙерен белергә өйрәттеме? Тағы ниндәй һабаҡтар бирҙе?***

***Рәйес НИЗАМЕТДИНОВ, бейеүсе, балетмейстер, ҡуйыусы режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Эйе, пандемия шарттарында йәшәү бик күп нәмәгә күҙҙәрҙе асты. Иң беренсе һаулыҡтың ни тиклем ҡәҙерле хазина икәнен аңғартты беҙгә. Дөрөҫ, быға тиклем дә сәләмәтлектең әһәмиәтен белә инек, ләкин әлеге "Һаулығың - байлығың" тигән ҡанатлы әйтемгә өйрәнеп, күнегеп тә кителгәйне, шул арҡала уның ысын асылын, ҡәҙерен тойоу хисе беренсел булыуҙан туҡталып та китә ине, буғай. Ғөмүмән, айырыуса ир-ат был йәһәттән ғәфү иткеһеҙ бошмаҫлыҡ күрһәтә ине: "Үтер әле аҙаҡ, бер ни ҙә булмаҫ",- тип, үҙ-үҙен тынысландырып, табипҡа барырға һис ашыҡманы, дауа-



хана юлын тапарға, сираттарҙа ултырырға теләмәне. Өҫтәүенә, тәмәке, алкоголь менән "дауаланыу", аҡса, мал табыу, ғаилә аҫрау кеүек хәстәрҙәр тотҡонда даими стресс кисереү ир-ат һаулығында етди проблемалар килтереп тыуҙырҙы. Шуға күрә лә статистика һәм демографияла "ир ғүмере - алтмышҡа еткәнсе" тигән рәсми булмаған хәүефле ҡараш барлыҡҡа килде. Һөҙөмтәлә ирҙәрҙә үпкә, йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан-бауыр һәм нервылар буйынса сир күрһәткестәре артҡандан-арта, ваҡытынан алда ғәзиз ғүмерҙәр өҙөлә барҙы.

Ә бит бөгөнгө тажзәхмәт вирустары ла тап ана шул әлеге ағзаларҙы ныҡ зарарлай, ҡатмарлыҡтар һәм өҙлөгөүҙәргә килтерә. Һөҙөмтәлә күптәр шуны аңланы: һаулыҡты нығытыу, булған сирҙәрҙе ваҡытында дауалау, сәләмәт йәшәү рәүешен тотоу пандемия шарттарын күпкә енелерәк үткәрергә йә уға бирешмәҫтәй иммунитетҡа эйә булырға ярҙам итер ине. Икенсенән, пандемия беҙгә аралашыу, күрешеп, хәл-әхүәл белешеүҙең, туғандар, дуҫтар менән осрашып, ихлас һөйләшеп ултырыуҙарҙың ниндәй ҙур шатлыҡ булыуын төшөндөрҙө. Юғиһә бит, коронавирустан алдараҡ та кешеләр үҙ ҡабырсаҡтарына йомолоп, үҙ донъяларына бикләнеп, берберенән ситләшә төшкәйне. Туған туғанға йөрөшөүҙән, ҡунаҡҡа саҡырышыуҙарҙан туҡтаны, күрше күршегә инмәй башлағайны. Бала-сағанан алып, өлкән йәштәгеләргә тиклем һәр береһенең ҡулында телефон, эргә-тирәләге кешене күрмәй-ишетмәй бөтөнөһө гаджетҡа йомолғайны.

Юғары көс был тажзәхмәт сирен ебәреп, әйтерһең дә беҙгә, ошоно теләгәйнегеҙме, бына күрегеҙ, бер-берегеҙҙән башҡа йәшәү, бер-берегеҙҙән йәшенеү бына шулай була ул, тип әйтәлер һымаҡ. Күҙгә күренмәҫ ситлектә ҡалғандай тойола кешелек донъяһы. Кемгә нисектер (ләкин бындай тормоштан бер кемгә лә яҡшы түгелленә иманым камил), ә бына миңә һәм башҡа ижад кешеләренә бындай бикле ишек һәм бикле күңелдәр бик ауыр тәьҫир итә, сөнки беҙ осрашып-күрешеп, ижади уңыштарыбыҙ, һөйөнөс һәм көйөнөстәребеҙ менән уртаҡлашып, бер-беребеҙҙе хуплап, дәртләндереп йәшәргә һәм эшләргә өйрәнгәнбеҙ. Әйткәндәй, Өфөгә күскәс, өй ҙә туйламағанбыҙ һаман, ә туғандар һәм дуҫ-иштәрҙе саҡырып алғы килә; табын ҡороп, элеккесә матур йолаларыбыҙҙы башҡарып, берберендең күңелен үҫтереү саралары, байрам тантаналары һағындырҙы. Ләкин... ярамай, яҡындарыңды хәүеф сигенә этәреүҙән һаҡ булырға кәрәк - бына нисек өйрәтә пандемия кешеләрҙе бер-береһенең ҡәҙерен белергә. Былай ҙа бит бик күптәребеҙ яҡындарын, дуҫтарын һәм башҡа яҡшы кешеләрҙе юғалттыҡ. Аңлы кеше был афәттән тейешле һабаҡ алғандыр, тип уйлайым, ләкин, ҡыҙғанысҡа, әле һаман һығымта яһарға уйламаған әҙәмдәр ҙә етерлек арабыҙҙа. Ундайҙар, сир миңә теймәҫ, тип уйлай, ахыры: бер ниндәй һаҡлыҡ саралары күрмәй, хатта элементар талап - битлек киймәйенсә, халыҡ күп йыйылған урындарҙа: магазиндарҙа, баҙарҙарҙа бик иркен йөрөйҙәр. Битлек киймәгән такси водителен дә осратҡан юҡ ошоға тиклем. Үҙҙәрен бирешмәҫлек тип иҫәпләйҙәрҙер ҙә, ә башҡалар тураһында оноталар. Был, әлбиттә, кешенең әҙәп-әхлаҡ кимәле тураһында асыҡ һөйләп торған бер күренеш. Тимәк, ундайҙарҙан алыҫыраҡ йөрөү хәйерле. Был иһә пандемия биргән тағы бер һабаҡтыр: яҡшыны ямандан айыра белеү.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

индерһәләр, уйындар уйнаныҡ, тәртипле булдыҡ. Ә хәҙер? Ҡайһы бер ҡыҙҙарыбыҙ тормошҡа сығып, 3-4 айҙан бала таба. Был әҙәпһеҙлек, тотанаҡһыҙлыҡ. Элек ундайҙарҙы ауылдан ҡыуғандар, таш менән бәргеләгәндәр. Ауылдарҙа утыҙҙы уҙған башҡорт егеттәренең өйләнмәүе, эскелектең киң таралыуы ла яҡшы түгел. Хәҙер "йәшел йылан" менән ирҙәргә ҡарағанда ҡатын-ҡыҙ күберәк дуҫлаша. Мәжлестәрҙә балалар ололар менән бер бүлмәлә, хатта бер өҫтәл артында ултыра. Балалар, ғәҙәттә, ололар ни ҡылана, шуны ҡабатлай. Бер йәшлек баланың да, 50-60 йәшлек олононң да тыуған көнө араҡыһыҙ үтмәүе хафаға һала.

Бер ниндәй тәрбиә темаһы юҡ зәңгәр экрандарҙа, эротика, боевик, реклама, йәнһүрәт, сәйәсәт кенә унда. Америка, Украина, үҙ-ара һүҙ көрәштереү һәм башҡалар. Элек беҙ кескәй ағас ауыл клубында гөрләп уйнап үҫтек, ҡайҙа ти ул эсеү, тәмәке тартыу, хәҙер дискотекаға сыҡҡан ҡыҙ-егеттәрҙең ҡулында һыра, ауыҙында сигарет...

Әхлаҡ уҡый башлаһаң, ул һеҙҙең заман, хәҙер беҙҙең заман тип кенә ебәрәләр. Хәҙер хатта егеттәрҙең армияға барырға теләктәре юҡ, ғәрлек бит. Мин үҙем 15 йәштә велосипедтың ни икәнен белдем, сөнки көн дә 12 саҡрымдағы район үҙәгенә велосипед менән йөрөп уҡыным. Хәҙер бала, яҡшы уҡыймы, юҡмы, скутер, мотоцикл даулай ата-әсәнән. 18 йәше тулһа, еңел машина һорай башлай. Ата-әсә нишләһен, бала ғәзиз бит, көсәнәләр, бахырҙар.

**(Дауамы 9-сы биттә).**

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# ИРҘӘР - ДЕКРЕТ ЯЛЫНДА




**РБК (РосБизнесКонсалтинг) компанияһы мәғлүмәттәре буйынса 2021 йылда Башҡортостанда 42144 ҡатын декрет ялында булған. Шулай уҡ был хоҡуҡ менән 612 ир-ат та файҙаланған. Декрет ялында булғандар өсөн түләнгән 3,5 миллиард һумдың 67,6 миллион һумы декрет ялындағы атайҙар өлөшөнә тура килә. Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә тиһәләр ҙә, статистика шундай. Нимә тиҙәр әле: донъяла бер ир декрет ялында ултырһа, оят, икәүҙән күберәк икән - статистика. Хәтерегеҙҙә булһа, элегерәк "Мыйыҡлы өләсәй" ("Усатый нянь") тигән комедия ҡарай торғайныҡ. Унда балалар баҡсаһында өләсәй-тәрбиәсе булып эшләүсе Кеша хаҡында һүҙ бара. Фильмы булғас, был проблема совет осоронда ла көнүҙәк булғандыр тип уйланыла. Шулай ҙа сәйер булып күренгән ошо күренештең сәбәптәре хаҡында уйланғанда:**

**А** Ирҙәр күп осраҡта "ҡатын-ҡыҙ дәүләт һәм ире елкәһендә өйҙә рәхәтләнеп бала ҡарап, бер нәмә лә эшләмәй тик ултыра" тип уйлап ныҡ хаталана. Әммә улар үҙҙәре тәүлек әйләнәһенә йүргәктәр йыуыу, үтекләү һәм туҡтауһыҙ илауҙар, көйгән бутҡалар, туҙраған уйынсыҡтар мөхитендә тороп ҡалғас, был ғәмәлдең бигүк "рәхәт" түгеллеген тәүге көндәрҙә үк аңлап өлгөрә һәм унан ҡотолоу юлдарын эҙләй башлай. Быға инанғығыҙ килһә, йүргәк балағыҙҙы алып ҡалып, ҡатынығыҙҙы көн буйына был ғәмәлдән азат иттереп, киноға йә концертҡа ебәреп ҡарағыҙ. Әйткәндәй, был ғәмәлегеҙ декрет ялындағы ҡатынығыҙға һәр төрлө сәскәләр гөлләмәләренән дә шәберәк бүләк булыр. Шуға күрә лә, РБК мәғлүмәттәре буйынса, йыл башында декрет ялына сыҡҡан 612 ир-аттан йыл аҙағына 280 генәһе тороп ҡала, ҡалғандары декрет ялын кире ҡатындарына күсереп яҙҙырып, эшенә сыға һала.

**Б** Элек, асылда, ирҙәр күпләп хеҙмәт иткән завод-фабрикаларҙың ябылыуы, көслө заттың эшһеҙ тороп ҡалыуы ла сәбәптер был күренешкә. Мәҫәлән, элек баш ҡалабыҙ Өфөлә генә ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө сәнәғәт предприятиелары эшләп, тегендәбында торбалар төтөн сығара торғайны. Ғөмүмән, республикабыҙҙың ҙур ҡалалары тап сәнәғәт үҫеше нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Әйтәйек, Салауат, Сибай, Ишембай, Туймазы, Октябрьский, Благовещенск ҡалалары һ.б. Ауыл ерендә лә колхоз-совхоздар гөрләп эшләгән саҡта ир-ат эшһеҙ ултырманы.

**В** Тәбиғәттә, йәмғиәттә, милләттә "көслө кеше" тигән вакантлы урын бар. Һуңғы ваҡытта төр булараҡ күп кенә позицияларын юғалтҡан ир-аттың урынын ҡатын-ҡыҙ яуларға мәжбүр. Сөнки йәмғиәтте, милләтте һаҡлап ҡалыу ихтыяжы нескә затты ошо юлға этәрә лә инде. Һуңғы йылдарҙа ауыл-ҡалаларҙа әүҙемләшкән ағинәйҙәр хәрәкәте тап ошо хәлдең сағылышы. "Ҡатын-ҡыҙ ир-аттың урынын баҫып алды" тигән фекер менән һис тә килешмәйем. Сөнки ир кеше ҡатыны урынына декрет ялына китә икән, бында ҡатынының һис кенә лә ғәйебе юҡтыр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓COVID-19 йоҡторғандар өсөн карантин ваҡытының ике аҙнанан бер аҙнаға тиклем ҡыҫҡартылыуы билдәле булды. Был хаҡта вице-премьер Татьяна Голикова Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Коронавирусҡа ҡаршы көрәш буйынса координация советы ултырышында иғлан итте. "Беҙ карантин ваҡытын ете көнгә тиклем ҡыҫҡартабыҙ, шулай уҡ тағы бер нисә үҙгәреш индерәбеҙ, яҡын арала улар Рәсәйҙең баш санитар табибы ҡарарҙары менән ҡабул ителергә тейеш", - тип билдәләне вице-премьер.

✓Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында үҙ-ара сауҙа 2021 йылдың 11 айында пандемияға тиклемге 2019 йылдың күрһәткесенән артҡан. 2020 йылда тышҡы сауҙа әйләнеше 296,9 миллион доллар тәшкил иткән, уҙған йылдың 11 айы йомғаҡтары буйынса - 365 миллион доллар. Республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса эшсе төркөмдөң тәүге ултырышында шундай һандар килтерҙе. Ултырыш онлайн форматта үтте.

✓Радий Хәбиров металл һыныҡтарын законһыҙ ҡулланыуға ҡаршы көрәшеү өсөн эшсе төркөм ойоштороrға ҡушты. Башҡортостан Башлығы Өфөнән башларға кәңәш бирҙе, сөнки баш ҡалала ошондай 250-нән ашыу нөктә бар. "Бындай эшмәкәрлек өсөн лицензия кәрәк, ләкин күптәре унһыҙ эшләй, - тип билдәләне республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров. - Ялған хәмер менән нисек эшләй башланыҡ, бында ла шулай хәлде "фаш итергә" кәрәк".

✓Илнур Мөхйәнов Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул Мәҙәниәт министрлығының социомәҙәни эшмәкәрлек мәсьәләләре өсөн яуап бирә. Быға тиклем ошо вазифала Рәнис Алтынбаев эшләне. Илнур Мөхйәнов 1988 йылдың 4 декабрендә Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған. Һуңғы эш урыны - 2019-2022 йылдарҙа муниципаль берәмектәр менән эш буйынса Башҡортостан Башлығы идаралығының урындағы үҙидара органдары менән эшләү бүлегендә баш кәңәшсе.

ҠЫҪҠАСА

# ЖУРНАЛИСТАР МЕНӘН...

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында булды, коллективтың эше менән танышты.** "Мин һеҙгә рәхмәт әйтергә килдем, беҙҙең идара итеү командаһы өсөн һеҙ - беҙҙең төп партнер. Ниндәйҙер яҡшы эш башҡарыу ғына аҙ, быны халыҡҡа дөрөҫ еткерә белеү мөһим. "Башинформ" - беҙҙең төп һәм иң көслө мәғлүмәт партнеры", - тине Башҡортостан Башлығы Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы коллективтары менән осрашыуҙа. Билдәләнеүенсә, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында айына 3000 яңылыҡты ни бары 15 журналист формалаштыра. 2021 йыл йомғаҡтары буйынса "Башинформ" сайттары төркөмө - "Ижтимағи электрон гәзит" менән бергә яңылыҡтар сайты - Башҡортостанда иң күп әҙәмтә килтерелә торған киң мәғлүмәт сараһы.

✓ **БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева белдереүенсә, мәктәп уҡыусыларына тажзәхмәттән вакцина ирекле нигеҙҙә, ата-әсәләрҙең берәһенең ғаризаһы булғанда ғына эшләнә.** Әлеге ваҡытта теләүселәрҙең һаны буйынса мониторинг алып барыла. Вакцина эшләтеүгә ҡаршы булыусыларҙы берәү ҙә уҡыуҙан ситләтмәйәсәк, бының өсөн бер нигеҙ ҙә юҡ. Мәғлүм булыуынса, тажзәхмәттән "Спутник М" балалар вакцинаһы былтыр 24 ноябрҙә Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан теркәлә. Ул ике компоненттан тора. Балаларҙы 12 йәштән прививкаларға мөмкин. 12-15 йәшлек балалар ата-әсәһенең рөхсәте булғанда, 15 йәштән өлкәндәр үҙҙәренең яҙма рөхсәте нигеҙендә вакцинациялanacaҡ.

✓ **Башҡортостанда муниципаль балалар баҡсаһындағы урынға дәғүә иткән ғаиләләр балаларын шәхси балалар баҡсаһына йөрөтөргә мөмкин. Бында ата-әсәләр гәҙәти балалар баҡсаһындағы кеүек үк түләй, ҡалған өлөшөн бюджет ҡаплай. Был нисек эшләй?** Муниципаль балалар баҡсаһында әлегә урыны булмаған ике айҙан өс йәшкә тиклемге балаларҙың ата-әсәһе йәки законлы вәкилдәре компенсация, йәғни шәхси балалар баҡсаһы өсөн сертификат алырға хоҡуҡлы. Сертификаттың күләме - бер балаға айына 6000 һум. Дәүләт балалар баҡсаларындағы кеүек үк, ата-әсәләр ҙә үҙ өлөшөн түләй, Өфөлә иһә көнөнә - 153 һум. Һөҙөмтәлә ата-әсәләр муниципаль балалар баҡсаһына ҡарағанда артыҡ түләмәй. Сертификат алыу өсөн ғаризаны бер нисә ысул менән бирергә мөмкин. Сертификатты аҡсалата алып булмай. Аҡса туранан-тура бала йөрөгән шәхси балалар учреждениеһы иҫәбенә күсерелә. Сертификат алыу өсөн баланың ата-әсәһенә "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында ғариза бирергә, күп функциялы үҙәккә йәки районың мәғариф бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "БЕҘ АЛЫШҠА ӘҘЕР!"



**Башҡортостан тажзәхмәттең яңы штамына ҡаршы тороуға әҙерләнә һәм йоғошло ауырыуҙар менән көрәш хеҙмәтен яңы ковид-госпиталдәр төҙөп нығыта. "Россия 24" телеканалына биргән интервьюһында республика Башлығы Радий Хәбиров әлеге ваҡытта дауаханаларға һалынған сирлеләрҙең һаны бик артмаһа ла, тиҙ арала 10 мең койка-урын булдырыу мөмкинлеген белдерҙе.**

"Әлеге ваҡытта мең ярым урын бар, шуларҙың 500-ө буш, шул уҡ ваҡытта былтыр сирҙең иң көслө ваҡытында 8,5 мең урын булдырғайныҡ, ә мөмкинлегебеҙ 10 мең урынға етә. Был йәһәттән бер ни тиклем тынысбыҙ, - тип билдәләне ул һәм ковид-госпиталдәр тураһында әйтеп үтте. - Беҙ уларҙы Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта төҙөнөк, халыҡ йәшәгән еренә яҡындараҡ дауалана алһын өсөн хәҙер тағы ике урында төҙәйбеҙ. Бөгөн иғтибар беренсел звеноға йүнәлтелергә тейешлеге менән килешәм. Ул ике мәсьәләне хәл итмәй тороп, проблеманы йырып сыға алмаясаҡ. Беренсе бурыс - табиптарҙы әҙерләү, икенсеһе - дарыуҙар. Әле бүленгән федераль аҡсаларға үҙебеҙҙән дә өҫтәнек һәм үҙебеҙҙе тейешле күләмдә дарыуҙар менән тәьмин иттек. Кеше тажзәхмәт менән сирләй, әммә дауаханаға ятмай, өйҙә дауалана икән, тимәк, беҙ уны дарыуҙар менән тәьмин итергә тейеш".

Радий Хәбиров шулай уҡ республиканың медицина өлкәһендәге кадрҙар мәсьәләһен хәл итеү тәжрибәһе менән дә бүлеште һәм төбәктең позицияһын түбәндәгесә белдерҙе: "Был осраҡта беҙ страховка вариантын әҙерләнек - поликлиникаларҙа көсәргәнешле эш башланһа, медицина университетының сығарылыш курсы студенттары уларға ярҙам итәсәк. Ниндәйҙер кимәлдә беҙ ҡулса оборонаһында һәм көтәбеҙ".

Республика Башлығы шулай уҡ Башҡортостандың тажзәхмәткә ҡаршы вакцинация яһатыуҙа ҙур күрһәткестәргә етеүен белдерҙе. "Беҙ вакцинациялау талап ителгән күләмден 91 процентына өлгәштек. 2 миллион 265 кеше прививка эшләткән. Уларҙың ревакцинация эшләтә башлауы ҡыуандыра. Йәғни кешеләр антиматдәләр көсһеҙләнгәндә ревакцинация эшләтергә кәрәклеген күрә, ишетә, аңлай. Был әлеге мәлдә иң мөһим бурыс. Шуға күрә беҙ халыҡҡа матур ғына итеп быйыл булған сикләүҙәргә ҡабат кире ҡайтыуыбыҙҙы аңлатабыҙ. Вирустың үтеп инеүенә юл ҡуймау өсөн тағы ла ике ҙур булмаған сикләү өҫтәнек. Беҙгә кешеләрҙең киң күләмле мәҙәни һәм спорт сараларында зарарланмауы мөһим, шуға уларҙы билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерҙек. Ниндәйҙер сара үткәрелмәгәнлектән бер кем дә үлмәҫ. Беҙ чиновниктарҙың граждандарҙы ҡабул итеүен онлайн режимға күсерҙек. Дөйөм алғанда, иң мөһиме - урындар булдырыу, беренсел звеноны әҙерләү һәм вакцинация", - тине Радий Фәрит улы.

# ТУҒАН ТЕЛ ХӘСТӘРЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Туған телдәр сәғәте" үткәрҙе. Фәнни йәмәғәтселек, муниципалитеттар етәкселәре, полилингваль күп профилле мәктәптәр директорҙары ҡатнашлығындағы кәңәшмәлә туған телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләләре ҡаралды.**

Кәңәшмә барышында әле эшләп килгән полилингваль белем усаҡтары директорҙары сығыш яһап, белем биреү процесын ойоштороу тураһында һөйләне. Уларҙа белем биреү 1-се кластан полилингваль нигеҙҙә алып барыла. Артабан уҡыусылар өҫтәмә рәүештә француз, немец, ә Стәрлетамаҡта ҡытай, төрөк, испан телдәрен өйрәнә. 1-се Республика күп профилле полилингваль мәктәбе директоры Булат Туҡтамышев һөйләүенсә, уларҙа уҡыусылар һаны һәм уларҙың өлгәше, шулай уҡ БДИ һөҙөмтәләре һәм мәктәп олимпиадаларында еңеүселәр һаны һиҙелерлек үҫә. Былтыр бында "Ата-әсәләр өсөн башҡорт теле" проектына старт бирелгән, ул бик ҙур һорау менән файҙаланған. 162-се "Смарт" республика күп профилле полилингваль гимназияһы директоры Наил Әминев белдереүенсә, был белем усағында уҡырға һәм уҡытырға теләүселәр бик күп. Уларҙың уҡыусылары 5-се синыфтан һөнәр һайлай һәм шул йүнәлештә шөғөлләнә ала. Нефтекамалағы "Белем" күп профилле полилингваль мәктәп-интернат былтыр мартта асыла һәм шулай уҡ ҙур ихтыяж булыуын раҫлай.

Артабан кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Башҡортостанда мари һәм сыуаш полилингваль мәктәптәрен асыу мәсьәләһе буйынса фекер алышты. Мишкә районы үҙәгендә мәктәп бинаһын капиталь ремонтлау проекты әҙерләгәндәр һәм полилингваль гимназияны уның базаһында асыуҙы планлаштыралар. Сыуаш полилингваль мәктәбе Бишбүләк йәки Бәләбәй районында буласаҡ.

Шулай уҡ "Туған телдәр сәғәте"ндә Хәйбулла, Баймаҡ, Учалы райондарында яңы полилингваль мәктәптәр төҙөү мәсьәләһе ҡаралды. Муниципалитеттар башлыҡтары төҙөләш-ремонт эштәре барышы, уҡыу йорттарын кәрәкле ҡоралмалар һәм йыһаз менән тәьмин итеүҙе финанслау планы һәм эш барышы менән таныштырҙы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына БДУ, БДПУ уҡытыусылары менән берлектә полилингваль мәктәптәрҙә уҡытыу сифатына тикшереү үткәрергә ҡушты.

# УРТАҠ БАЙРАМ



**Башҡортостан Хөкүмәтендә республика Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов Өфөгә эш сәфәре менән килгән Татарстан Премьер-министры урынбаҫары Вәсил Шәйхразиевты ҡабул итте.**

Эшлекле һөйләшеүҙәр ваҡытында Волга Болғарҙары тарафынан Ислам динен ҡабул итеүгә 1100 йыл тулыуы айҡанлы, ике республикала байрам саралары ойоштороу хаҡында һүҙ барҙы. "Төп саралар 19 - 21 майҙа Ҡазан ҡалаһында үтәсәк. Ҙур сараның планы раҫланған. Уға ярашлы, "Рәсәй - Ислам донъяһы: KazanSummit" иҡтисади форумы үтәсәк. Шулай уҡ татар дини эшмәкәрҙәренең осрашыуы һәм башҡа саралар ҡаралған. Йәнә ҙур саралар Санкт-Петербургта, Себерҙә лә буласаҡ. Ошо уңайҙан беҙгә байрам барышында ике республиканың хеҙмәттәшлек итеүе тураһында килешергә кәрәк", - тине Вәсил Шәйхразиев.

- Был мөһим датаға беҙ ҙә етди әҙерләнәбеҙ. Волга Болғарҙарының рәсми рәүештә Ислам динен ҡабул итеүе беҙҙең тамырҙарыбыҙҙы тәрәндән өйрәнеү өсөн этәргес. Был йәһәттән беҙ эш башланыҡ та инде. Ике милләттең уртаҡ бөйөк мәғрифәтселәренең тарихта тотҡан урындарын, уларҙың хеҙмәттәрен ныҡлап өйрәнеү иғтибар үҙәгендә буласаҡ. Шуныһы ҡыуанысլы, ул ваҡыттағы шәхестәребеҙ халыҡтарҙы милләттәргә бүлмәгән. Улар беҙҙең уртаҡ тарихыбыҙ, уртаҡ тамырҙарыбыҙ, - тип белдерҙе Азат Бадранов.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша иҫке күперҙе капиталь ремонтлау эштәрен башҡарыусы билдәләнде. Конкурста "Уралмостострой" компанияһы еңеүсе булды. Контракттың хаҡы - 4 миллиард һум. Эштәргә заказ биреүсе - Өфө хакимиәтенең Юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы төҙөү, ремонтлау идаралығы. Подрядсы 42 ай эсендә - 2025 йылдың 31 августына тиклем эш документацияһын әҙерләргә һәм реконструкция элементтары менән капиталь ремонт эштәргә тейеш. Ремонтты 2022 йылдың 1 мартында башлау планлаштырыла. Ике һыҙатлы күперҙең оҙонлоғо - 671,89 метр. Күпер 1956 йылда сафҡа индерелгән.

✓Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков 18 ғинуарҙа муниципалитетта үткән оператив кәңәшмәлә халыҡ һаулығын һаҡлау бүлегенең яңы етәксеһе Илдар Хәйҙәров менән таныштырҙы. "Илдар Хәки улы, һеҙ йәнә ковид таралған, өйҙән эшләүгә күскән ваҡытта эш башлайһығыҙ. Бик ҙур эш башҡарыу бурысы тора, әммә һеҙ - тәжрибәле белгес, был эште уңышлы башҡарырһығыҙ тип ышанам", - тип мөрәжәғәт итте Өфө мэры бүлек етәксеһенә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 22 һәм 29 ғинуарҙа ҡар таҙартыу өмәләре ойоштоpола. "Ошо осорҙа урамдарҙы, юлдарҙы, тротуарҙарҙы, скверҙарҙы, парктарҙы, ихата биләмәләрен ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу эштәре ойоштороla", - тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Коммуналь хеҙмәттәрҙән тыш, бөтә ойошмалар, учреждениеларҙың вәкилдәренә лә өмәгә сығырға тәҡдим итәләр.

✓Өфө аэропортынан Мәскәүгә яңы рейс асылды. 17 ғинуарҙан уны "ИрАэро" авиакомпанияһы башҡара башланы. Быңың өсөн 156 пассажир һыйҙырышлы Airbus A319 самолеттары файҙаланыла. Юлға ике сәғәт самаһы ваҡыт китә. Башҡортостандың баш ҡалаһынан Мәскәүгә тәүлегенә бөтәһе 13 рейс башҡарыла. "Азимут" авиакомпанияһы Дондағы Ростов - Волгоград - Өфө даими рейсын асты. Осоштар 18 ғинуарҙа 100 пассажир һыйҙырышлы Sukhoi Superjet 100 самолетында башлана.

✓2022 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһы аша ике ҡатлы поездар йөрөй башлауы ихтимал. Куйбышев тимер юлы башлығы һүҙҙәренсә, яңы составты, Һамар - Өфө - Санкт-Петербург маршруты буйынса асыу планлаштырыла. Әйтергә кәрәк, Рәсәй тимер юлдары 2021 йылда яңы ике ҡатлы поездар алды. Тәүге вагондар Ырымбур - Һамар - Мәскәү маршруты буйынса юлға сыҡты.

БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

***✓ Мөрәжәғәттәрҙә билдәләнеүенсә, был ҡиммәтле, файҙаһыҙ юл Өфө тау битләүенең уникаль тәбиғәтен юҡҡа сығарасаҡ, шулай уҡ ул ҡатмарлы геологик шарттарҙы һәм карст бушлыҡтарын күҙ уңынан ысҡындыра.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЭШ ХАҠТАРЫ АРТА

**Ишеттегеҙме? 1 февралдән баш ҡалала юлдағы ҡарҙы таҙартыуға йәлеп ителгән хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына өҫтәмә түләү индереләсәк. Был хаҡта ҡала округы хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Марат Ғәйфуллин белдерҙе.**

Водителдәргә, машинистарға, трактористарға тарифка - 75, юл эшселәренә 14 процент өҫтәләсәк. Шулай уҡ был категорияға айлыҡ премия 100 процентҡа тиклем күтәрелә. Йәғни 5-се разрядҡа эйә водителдәрҙең, машинистарҙың һәм трактористарҙың эш хаҡы - 40 процент самаһына, дүртенсе разрядлы юл эшселәренең эш хаҡы 25 процентҡа арта. Аҡсаға әйләндергәндә был водителдәрҙең эш хаҡы 60 меңгә етә тигән һүҙ. Ирекһеҙҙән, башҡорт теле һағында торған, тел һаҡланып ҡалһын, уны сүп-сар, ҡарҙай һалҡын башҡа терминдар баҫып китмәһен тип тырышҡан гәзит-журнал хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы ҡасан иғтибарға алыныр икән, тигән һорауҙы ла күп тәртибенә сығарғы килә. Ул һорауға яуаптар, йәғни журналистарҙың да эш хаҡын арттырабыҙ, тигән һүҙҙәр ишетелеп ҡала ул юғары тарафтарҙа. Тик ул хәбәрҙәрҙә лә, күрәһең, ҡар баҫып китте...

Ҡар тигәндән, Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ һәм төҙөләш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты ихаталарҙы, йорт ҡыйыҡтарын ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыуҙы ТСЖ, ТСН, ЖСК-лар, идара итеү ойошмалары ла башҡара ала, тип белдерә. Ә инде үҙ белдеге менән балкондарына козырек ҡуйған милекселәр уны үҙҙәре таҙартырға тейеш һәм балкон ҡыйығынан ҡар йәки боҙ төшөп, кемгәләр зыян килгәндә, яуаплылыҡ та улар өҫтөндә. Күп фатирлы йорт территорияларында төҙөкләндереү ҡағыҙәләре боҙолған осраҡта граждандарҙа ла, яуаплы кешеләргә лә административ яуаплылыҡ - штраф ҡаралған.

Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ былтыр төҙөлгән торлаҡ, социаль һәм транспорт инфраструктураһы объекттары буйынса ла отчет тыңланды. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Кирилл Чистяков һөйләне. Уҙған йылда ҡала тарихында беренсе тапҡыр 1240 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән. Быға торлаҡҡа һорауҙың ҙур булыуы һәм уларҙың тиҙ арала һатылыуы, льготалы ипотека программаһының тормошҡа ашырылыуы һ.б. саралар йоғонто яһай. Торлаҡтан тыш белем биреү һәм мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары тапшырылған. Воровский урамы сатындағы күпер төҙөлөшө лә ҙур әһәмиәткә эйә. Төҙөлөш эштәре менән бер үк ваҡытта төрлө етешһеҙлектәр менән бирелгән рөхсәт ҡағыҙҙарын асыҡлау буйынса ла етди, төҙөүселәр менән ҡала төҙөлөшө сәйәсәте буйынса анлатыу эштәре алып барылған.

- Төҙөлөш барышында коммерция файҙаһын түгел, ә тәү сиратта бында йәшәйәсәк кешеләрҙең уңайлылығын уйларға кәрәк: улар балаларын ниндәй балалар баҡсаһына, ҡайһы мәктәпкә алып бара, машиналарын ҡайҙа ҡуя, ҡайҙа ял итә һәм спорт менән шөғөлләнә. Төҙөүселәрҙең хакимиәттең фекерен уртаҡлашыуы мөһим, - ти Кирилл Чистяков.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ХАЛЫҠ ТАУЫШЫ*

# БАШ ҠАЛАЛА...
## урмандар ҡалырмы?



**Өфөнөң 2042 йылға тиклем яңы Генпланы буйынса йәмәғәт фекер алышыуҙары барышында халыҡты бигерәк тә урман зоналарын һаҡлау һәм үҫтереү перспективалары борсоуы асыҡланды. Рекреацион зоналар (парктар, скверҙар, йәйәү йөрөү урындары) темаһы буйынса ҡала хакимиәтенә тәҡдимдәр һәм иҫкәрмәләр менән 823 мөрәжәғәт килгән (транспорт инфраструктураһына ҡағылышлы тәҡдимдәр - 344).**

Мөрәжәғәттәрҙең күбеһе Өфөнөң Баш архитектура идаралығы һәм яңы планды эшләүсе Мәскәүҙең Генплан институты ғәйебе буйынса ебәрелгән хаталар менән бәйле. Мәҫәлән, уникаль тәбиғәт һәйкәле булған Непейцевск дендропаркы территорияһының бер өлөшө презентация материалдарында төҙөлөш территорияһы тип күрһәтелеүе ҙур ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра. Өфөнөң Баш архитектура начальнигы урынбаҫары Ольга Сарапулова быны башҡарыусының техник хатаһы булыуы ихтималлығын һәм төҙәтеләсәген белдерҙе.

Ҡала халҡы яңы генпландағы йәшел зоналарға етди зыян килтереүе ихтимал булған башҡа мәлдәргә лә иғтибар йүнәлтте. Мәҫәлән, буласаҡ ҡала электричкаһының Воронки станцияһы туҡталышына ике һыҙатлы автоюлды "Сәләмәтлек һүкмағы" булған Ғафури паркы артындағы урман эсенән үткәреү. Халыҡты Аҡ Йорт комплексы артындағы территорияһының, Калинин паркының бер өлөшөн, Ботаника баҡсаһы артындағы урманды, Блюхер урамындағы йәшел зонаны йәмәғәт-эшлекле зонаға, шулай уҡ медицина колледжы артындағы урманға терәлеп торған гараж кооперативы майҙанын һәм Урман юлы урамы буйын төҙөлөш майҙансығына әйләндереү ихтималлығы борсой.

Ҡала халҡы фекеренсә, Өфө экосистемаһына иң ҙур зыянды яңы генпланға һалынған Затон күперенән башланып, хәҙерге тимер юлына параллель рәүештә Дежнев юл сиселешенә тиклем үтәсәк Көнбайыш шоссе төҙөлөшө килтерәсәк. Мөрәжәғәттәрҙә билдәләнеүенсә, был ҡиммәтле, файҙаһыҙ юл Өфө тау битләүенең уникаль тәбиғәтен юҡҡа сығарасаҡ, шулай уҡ ул ҡатмарлы геологик шарттарҙы һәм карст бушлыҡтарын күҙ уңынан ысҡындыра.

Ошо һәм башҡа иҫкәртеүҙәргә ҡарамаҫтан, рәсми һөҙөмтәләргә ярашлы, фекер белдереүселәрҙең күпселеге генераль пландың яңы вариантын хуплай. Граждандарҙан барлығы 16910 мөрәжәғәт килһә, уларҙың 12843-ө - проект яҡлы, 1135-е - ҡаршы. Өфө ҡала советы депутаты Павел Васильев аныҡлауынса, килгән мөрәжәғәттәрҙе ҡарау һөҙөмтәһе буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үткән тип таныла. Йомғаҡлау протоколы әҙерләнеп, һығымта ҡала советы сайтына ҡуйылды. Раҫланған генплан йәйгә әҙер буласаҡ.

**Сергей НИКОЛАЕВ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ИНОРС ТӨҘӨКЛӘНӘ

✓ **Йыл һайын республика ҡалаларындағы парктарҙы реконструкциялау өсөн республика бюджетынан бер миллиард һум бүленәсәк.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Инорс биҫтәһе халҡы менән осрашыу һәм Йылы күле тирәләй биләмәне төҙөкләндереү проектын тикшереү барышында ошо хаҡта әйтте. "Быйыл Затонда "Тулҡын" паркын төҙөкләндереүҙе тамамлайбыҙ, Орджоникидзе районында Нефтехимиктар паркын, "Дим" мәҙәниәт һәм ял паркына инәбеҙ, йәйгеһен бөтәһен дә Сипайлово биҫтәһендәге "Ҡашҡаҙан" паркына саҡырам", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Биҫтәлә йәшәүселәр республика етәксеһенә Инорс яңы поликлиникаға ла мохтаж булыуы тураһында белдерҙе. "Был мәсьәләне республиканың һаулыҡ һаҡлау министры менән тикшерермен, биҫтәлә йәшәүселәрҙең үтенесен яңы наказ тип баһалайым", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Өфөнөң 450 йыллығына Йылы күле эргәһендә күп функциялы ишеү слаломы комплексы төҙөлә.** Хаҡы 396,1 миллион һумлыҡ спорт объекты Республика адреслы инвестиция программаһына индерелде. "Был ҙур һәм техник ҡоролманы 2023 йылда асырға йыйынабыҙ, - тине Радий Хәбиров Инорс биҫтәһе халҡы менән аралашыу барышында. - Эште быйыл уҡ башлайбыҙ. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн аҡса һалынған да инде".Күсмә кәңәшмәлә Башҡортостандың байдаркала һәм каноэла ишеү буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе спортсылары һәм тренерҙары республика етәкселегенә комплекс өсөн рәхмәт белдерҙе, командалар әҙерләү, төрлө ярыштар үткәреү өсөн был объекттың мөһим булыуын билдәләне. Баш ҡаланың тоньяҡ өлөшөндә 450 йыллыҡ юбилей уңайынан бер нисә ҙур спорт объекты - көрәш һәм волейбол үҙәктәре барлыҡҡа килә, тип өҫтәне Башҡортостан Башлығы. Бынан тыш, 2022 йылда Инорс биҫтәһендә 1 650 урынлыҡ яңы мәктәп асылла.

✓ **Өфөлә Кәрим Хәкимов һәйкәленең иң яҡшы проекты конкурсы оҙайтылды. Ғаризалар 2022 йылдың 4 апреленә тиклем ҡабул ителә.** Һәйкәлде В.И.Ленин исемендәге парк, Совет һәм Туҡай урамдары киҫелеше янында ҡуйыу планлаштырыла. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн ғаризалар, проекттар 2022 йылдың 4 апреленә тиклем "Рәсәйҙең рәссамдар союзы" Бөтә Рәсәй ижади йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһендә ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 148. Телефон: 8 (347) 284-42-47. Положение менән Башҡортостан Республикаһының "Рәсәй Рәссамдар союзы" төбәк ойошмаһы сайтында танышырға мөмкин.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Бауырҙы таҙартыу

❖ Бауырҙы һаҡ ҡына таҙартыу өсөн халыҡ ысулы бар. 1-се состав: ҙур эмалле кәстрүлгә 3 стакан йыуылған ҡабыҡлы һоло һалырға. Шунан 2 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле япрағы һәм 3 ҡалаҡ ваҡланған ҡайын бөрөләре өҫтәргә. Шуларҙың өҫтөнә 4 литр һыуыҡ һыу ҡойорға. Һалҡын урынға ҡуйып 1 тәүлек тоньтергә. 2-се состав: бер үк ваҡытта икенсе һауытта 1 литр һыу ҡайнатырға. Ҡайнап ултырған һыуға 1 стакан йыуылған, йомшартылған гөлйемеш һалырға. 10 минут талғын утта ҡайнатырға. Шунан алып, 1 тәүлек төнәтергә.

Бер тәүлек үткәс, 1-се төнәтмәне утҡа ҡуйып, ауыҙын ныҡлы ябырға һәм 15 минут ҡайнатырға. Шунан болғатаболғата 3 ҡалаҡ күгүлендең үләнен (спорыш) һәм 2 ҡалаҡ кукуруҙның емешлек ауыҙын ҡушырға. Тағы ла 15 минут ҡайнатырға, уттан алып 45 минут төнәтергә. Шунан ике төнәтмәне лә марля аша һөҙөргә, бергә ҡушырға. Ҡара быялалы шешәләргә ҡойоп һыуытҡысҡа ҡуйырға. Төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр 150-шәр мл итеп ашарҙан 30 минут алда эсергә.

**Иҫкәрмә:** бауырҙы таҙартырҙан алда һәм аҙаҡ 5-7 көн дауамында махсус туҡланыу режимын тоторға кәрәк. Көн һайын иртән торғас 1 стакан һут, үлән сәйе йәки минераль һыу эсергә. Шунан 1 кәсә тирәһе ҡырылған кишергә 1-әр ҡалаҡ зәйтүн майы һәм лимон һуты ҡушып ашарға. Көн дауамында һыуға бешерелгән һәм май йәки йөҙөм ҡушылған төрлө бутҡалар, салаттар, йәшелсә-емеш, шыттырылған ҡыяҡлылар менән туҡланырға. 3 көнгә бер тапҡыр аҙ ғына майлы булмаған ит тәғәмләргә мөмкин. Барлыҡ майлы, татлы, һөт һәм һөт ризыҡтары, сүпрәле икмәктән тыйылырға.

## Кизеү

❖ 1-әр ҡалаҡ йүкә сәскәһе һәм ҡурай еләге емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға, бешкәнсе төнәтергә һәм һөҙөргә. Шунан 2 ҡалаҡ бал ҡушырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Бөрйән районында һандыҡ аяғын һырлап эшләгәндәр. Был төбәктә семәрле ҡыҫанлы таҡталы боронғо асыҡ һандыҡ аяҡтары һаҡланып ҡалған. Уның аҫҡы ҡырҙары һырлап ҡырҡылған, таҡта йөҙөнә мөйөштәр, ҡыя дүртмөйөштәр, түңәрәктәр, дүрт йәки алты тажлы оя сәскә биҙәктәр рәүешендәге батырыбыраҡ эшләнгән орнаменттар һалынған. Ҡайһы бер осраҡтарҙа тояҡтары һырланған. Һүрәтләнгән һандыҡ аяҡтары сағыштырмаса ҡыҫҡа булған. Ғәҙәттә улар ҙур булмаған һандыҡ ҙурлығына тап килгән. Ҡыҫанды һандыҡ уға инеп ултырырлыҡ итеп эшләгәндәр.

Бөрйән районындағы башҡа һандыҡ аяҡтары тәпәш өҫтәлдәрҙе хәтерләткән һәм таҡта менән ҡапланған булған. Таҡта алғы яҡтан тояҡтары араһындағы асыҡ урынды тотош ҡаплап ҡағылған. Иҫке Собханғол ауылындағы шундай бер һандыҡ аяғының береһендә ҡыя шаҡмаҡтар теҙмәһе ҡыҫан таҡтаһы һәм тояҡтары буйлап үтә. Урта өлөшөн уратып алған нәҙек кенә арауыҡта кәкерсәк эшләнгән.

В.С. Сыромятников 30-сы йылдарҙа Яңы Монасип ауылында һүрәткә төшөрөп алған ике һандыҡ аяғының алғы өлөшө баш түбән әйләндерелгән тотош ҡаплы трапеция формаһында. Ҡабырғаларындағы ҙур булмаған мөйөштәре өҫкө таҡтаның ҡыя киҫемендә дауам итә. Бер һандыҡ аяғының алғы яғында бөтә деталдәрҙең сите уйым биҙәк менән семәрләнгән, В.С. Сыромятников һүҙҙәренсә был "быҫҡы биҙәк" була. Икенсе һандыҡ аяғының ситтәре киртләсле - был семәрле кәрниз. Был әйберҙәрҙең йөҙлөгөнә төшөрөлгән төп биҙәк - уртаһында төртөгө булған түңәрәктәр, улар ҡыҫан буйына, ҡанатмөйөштәр һәм урта өлөштөң ҡап уртаһына эшләнгән. Улар араһында векторлы түңәрәктәр һәм өс өлөшкә бүленгән түңәрәктәр ҙә бар.

Әбйәлил районы Әхмәт ауылындағы урын аяғы бигерәк зауыҡлы булыуы менән айырылып тора. Уны экспедициялары барышында С.И. Руденко, В.С. Сыромятников, Б.Г. Кәлимуллин күргән һәм һүрәттәргә, фотоларға төшөрөп алған. Уның алғы яғы ентекле рәүештә ваҡ ҡына семәр биҙәк менән ҡапланыуы үҙенсәлекле, деталдәре ҡатмарлы орнаменталь композицияға берләштерелгән. Биҙәк элементтары: кәкерсәктәр хасил иткән мөйөштәр, параллель һыҙаттар, диагоналдәр ярҙамында айырымланған тура дүртмөйөштәр һ.б. Геометрик фигуралар араһында һигеҙ өлөшкә бүленгән түңәрәктәр (урын аяғының ҡанаттарында) һәм ике ҡатлы ҡусҡар мотивтары (урталағы тура дүртмөйөштәр эсендә эшләнгән) айырылып тора. Семәр йоҡа ғына буяу менән ҡапланған.



*Боронғо урын аяғы. Әбйәлил районы, XX б. 50-се йылдары. Б.Г. Кәлимуллин фотоһы*

Башҡортостандың иң көньяҡ өлөшөндә һәм Урал аръяғының көньяҡ-көнсығышында һандыҡ аяҡтарын биҙәгәндә башлыса буяу ҡулланылған. Әйберҙе ағас оҫтаһы үҙе буяп биргән.

Түшәк аҫтына ҡуйыла торған биҙәкле аяҡтар эшләү Баймаҡ районында киң таралған күренеш булып оҙаҡ һаҡланып килгән. Быйың менән кәсеп итеүселәр Һаҡмар йылғаһы буйында урынлашҡан ауылдарҙан булған: 1-се Этҡол, Буранбай, Ғәҙелбай һәм башҡа ауылдарҙа һандыҡ аяҡтары эшләгәндәр. XX быуаттың 50-60-сы йылдарында был әйберҙәр һәр өйҙә тиерлек булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ!

**(Башы 1-се биттә).**

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған белем усаҡтары араһында Өфө ҡалаһының Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының 11 синыф уҡыусыһы Камила Ҡыуатова (уҡытыусыһы Л. Бикбаева) еңеүсе тип табылды. Шулай уҡ Ишембай ҡалаһының Ә.-З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 10 синыф уҡыусыһы Ғәлиә Шәрипова (уҡытыусыһы Ф. Әмирханова) менән Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының 9 синыф уҡыусыһы Сәлимә Яҡупова (уҡытыусыһы Ф. Миһранова) иң юғары баһаға лайыҡ булды.

Еңеүселәр шулай уҡ башҡорт телен туған һәм дәүләт телдәре булараҡ өйрәнеүселәр араһында ла билдәләнде. Был номинацияларҙа 11 синыф уҡыусылары араһында Әбйәлил районы Асҡар ауылының Т. Кусимов исемендәге гимназияһынан Светлана Килмөхәмәтова һәм Өфө ҡалаһының 160-сы лицейынан Рина Хәсәнова беренсе урын алды. Башҡортостандан ситтә йәшәп тә, туған теле һәм мәҙәниәтен, тамырҙарын онотмаған йәш милләттәштәребеҙ - Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Аҡбаш мәктәбе уҡыусыһы Радик Кирәев һәм ошо уҡ районның Яраҡкол мәктәбенән Айлина Шәмсетдинова, Ырымбур өлкәһе Төйләгән районы Аллабирҙе мәктәбенән Рамаҙан Ҡасҡынов, Красногвардейский районы Д.Юлтый исемендәге мәктәп уҡыусыһы Адель Төркмәнова ла юғары баһаланды.

Быйыл олимпиадала ҡатнашыусылар тексты анализлауҙан тыш, Башҡортостан мәҙәниәтенә ҡағылышлы викторина һорауҙарына яуап бирҙе һәм тәҡдим ителгән темаларға фекер алышты. "Быйыл бигерәк тә уҡыусыларҙың үҙ-ара аралашыу мәҙәниәтенә иғтибар иттек. Сөнки бөгөн мәктәптәрҙең көнүҙәк бурыстарының береһе - баланы һөйләшергә өйрәтеү", - ти Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы, баһалама ағзаһы Илшат Янбаев.

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала 8 синыфтан алып йыл да ҡатнашам, әммә быға тиклем призерҙар йә еңеүселәр рәтенә ингәнем юҡ ине. Ҡайһы берҙә бер генә балл етмәй төшөп ҡала торғайным. Быйыл еңеү яулауым минең өсөн көтөлмәгән оло ҡыуаныс булды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡытыусым Лилиә Ғилметдин ҡыҙы Бикбаеваға сикһеҙ рәхмәтлемен. Был юлы олимпиада һынауҙары ярайһы уҡ ҡатмарлы ғына ине. Тәүҙә Башҡортостан мәҙәниәтенә ҡағылышлы 20 викторина һорауына яуап бирҙек, һуңынан бирелгән тексты анализланыҡ һәм үҙ фекеребеҙҙе жюри ағзаларына телдән белдерҙек. Миңә Илгизәр Бураҡаевтың "Туғанлыҡ көсө" тигән матур ғына тексы эләкте. Шуны әйтергә кәрәк, элек олимпиаданың был өлөшөндә шиғыр һөйләтә торғайнылар бит, былтыр түңәрәк ҡор рәүешендә үткәйне, быйылғыһы иң отошлоһо булды, минеңсә. Олимпиадала ҡатнашыусылар бик күп булды һәм араларында башҡорт телен бик яратҡан, киләсәктә һөнәре итергә уйниәте булған тиҫтерҙәрем бихисап ине. Әммә уларҙың барыһы ла призер урынына үтә алмай, илашып та бөтөүҙәрен күреүе күңелгә ауыр тәьҫир итте. Еңеүҙе уларҙан тартып алған кеүек булды хатта. Бәлки, киләсәктә ойоштороусылар призер урындары һанын арттырыр, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының 11 синыф уҡыусыһы Камила Ҡыуатова.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Өфөнөң 64-се гимназияһында телде дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе 9-сы синыф уҡыусыһы Кирилл Васильев башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала ҡатнашып, призер тип танылды. Бындай ҙур еңеүгә өлгәшкән рус милләтле малай менән әңгәмә ҡормай үтеп китеп булманы.**

➔ **Кирилл, һиндә, рус егетендә, Башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу нисек барлыҡҡа килде?**

- Эйе, минең атайым рус милләтенән, әсәйем - татар ҡыҙы. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ 2 кластан уҡыйым. Ә ныҡлап ҡыҙыҡһыныуым 3 класта башланды. Ошо осорҙа мин "Һаумы, һаумы, әкиәт" исемле конкурс тураһында ишеткәйнем, уҡытыусым ҡатнашып ҡарарға тәҡдим иткәс, ике лә уйлап тормай ризалаштым. Башҡорт халыҡ әкиәтен өйрәнеү, ятлау барышында башҡорт теленең йомшаҡ, наҙлы булыуын, ҡолаҡҡа яғымлы ғына булып ятыуын аңланым. Шул ваҡыттан алып башҡорт телен төплөрәк өйрәнә башланым. Башҡорт теле өйрәнеү өсөн ғәйәт ҡыҙыҡлы. Беҙ Башҡортостан Республикаһында йәшәйбеҙ, тимәк, үҙебеҙҙең тыуған төйәктең ерле халҡының телен, мәҙәниәтен, тарихын белергә, өйрәнергә тейешбеҙ. Ниндәй милләт вәкиле булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда йәшәгәс, уның төп телен әҙ генә булһа ла белергә бурыслыбыҙ. Был республикаға, уның теленә, мәҙәниәтенә ҡарата хөрмәт сағылышы.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса шундай мәртәбәле олимпиадала икенсе йыл рәттән ҡатнашыуыма, телде яҡшы белгән тиҫтерҙәрем менән аралашыуыма һәм танышыуыма ифрат шатмын. Үҙемдең мәктәбемде һәм Өфө ҡалаһын был сарала лайыҡлы күрһәтә алдым, тип уйлайым. Мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте минең иң яратҡан предметтарымдың береһе. Шулай уҡ математиканы һәм биологияны яратам. Был предметтарҙан олимпиадаларҙа, төрлө конкурстарҙа ҡатнашам. Былтыр ҙа башҡорт теле һәм математика фәндәре буйынса республика олимпиадаларында ҡатнашып, шулай уҡ призер булдым.

➔ **Бындай тырыш егеттең шөғөлдәре лә күптер, моғайын?**

- Мин йөҙөргә яратам һәм бассейнға бик теләп йөрөйөм. Шулай уҡ бейеү һәм программалау буйынса түңәрәктәрҙе үҙ итәм. Бейеү коллективы менән Башҡортостандың, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында сығыш яһарға тура килде. Бындай ижади сәйәхәттәр миңә бик оҡшай, сөнки уларҙан һуң тағы ла дәртләнеп, ихласыраҡ уҡыуға сумам һәм түңәрәктәргә йөрөй башлайым. Тағы ла компьютерҙа төрлө программалар яҙырға, уйындар һәм проекттар эшләргә өйрәндем. Беҙ интернетҡа ҙур урын бирелгән йәмғиәттә йәшәйбеҙ, шуға күрә был өлкәне яҡшы белергә кәрәк, тип уйлайым.

➔ **Йәштәштәреңә ниндәй теләктәрең бар?**

- Уҡыуға ҙур иғтибар бүлһендәр, тип әйтер инем. Башҡорт халыҡ мәҡәле "Көслө - берҙе, белемле меңде еңер", ти. Тормошта ҙур уңышҡа өлгәшеү өсөн мәғлүмәтле, белемле, зирәк, уҡымышлы һәм тәрбиәле булыу мөһим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кирилдың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡытыусыһы, уны олимпиадаға әҙерләүсе Гүзәлиә Рәсих ҡыҙы Һамарбаева әйтеүенсә, егет телде бик теләп өйрәнә һәм яҡшы уңыштарға өлгәшә. Ул шулай уҡ тырыш егеттең ата-әсәһе тарафынан да телгә төплө иғтибар бүленеүен, уларҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә ҡағылышлы һәр башланғысты хуплап тороуын белдерҙе. Кирилдың ҡустыһы ла телгә битараф түгел, шулай уҡ төрлө конкурс һәм бәйгеләрҙә ҡатнашырға теләүен еткерҙе, ти Гүзәлиә Рәсих ҡыҙы. Ысынлап та, өйҙәге һәр һөйләшеү, фекер һәм күренеш балала сағыла. Васильевтар ғаиләһендәге Башҡортостанға, ерле халыҡҡа, уның теленә һәм мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү, ихтирам тәрбиәләнеүе уларҙың улдарында асыҡ сағыла. Шулай уҡ телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, уны өйрәнеүгә ҙур этәргес көс биреү уҡытыусыға ныҡ бәйле. Уның бала күңеленә ошо осҡондо һалырлыҡ, уны артабан дөрләтеп ебәрерлек һәләткә һәм оҫталыҡҡа эйә булыуы ғына ҙур уңыштарға килтерергә мөмкин. Гүзәлиә Рәсих ҡыҙының, һис шикһеҙ, был һәләткә эйә педагог булыуына шик юҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА,**
**Гөлназ САФУАНОВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАРТТАР: УРТА АЗИЯ БАШҠОРТТАРЫБЫҘ



Шул уҡ ваҡытта, Р.Ғ. Кузеев яҙғанса, "һарт" атамаһының мәғәнәһе, заманына һәм географик киңлеккә бәйле, үҙгәреп торған". Әммә һарттарҙың боронғо башҡорт халҡының айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп ҡабул ителеүе, башҡорт шәжәрәләрендә һәм риүәйәттәрендә башҡа башҡорт бабалары менән бер рәткә ҡуйылып, уларҙың да төп башҡорт бабаһы Иштәк тоҡомдарынан булыуын раҫлау менән дәлилләнә. Күренекле башҡорт яҙыусыһы, арҙаҡлы дин әһеле Таджетдин Ялсығол (1768 - 1838) үҙенең "Тарих намә-и Болғар" әҫәрендә, барса башҡорт ырыуҙарының бер этник төптән сығыуын нигеҙ итеп алып, Әйеләр шәжәрәһе миҫалында боронғо башҡорт ҡәрҙәшлеген иҫбатлау маҡсатын ғәмәлгә ашыра.

Заманында ҙур ғына күләмле булған ошо әҫәрҙең тулы варианты табылмаған, әммә ҡулдан күсерелеп алынған, билдәле кимәлдә ҡыҫҡартылған варианттары һаҡланып ҡалған. Әлбиттә, XIX быуат тарихи әҙәбиәтенә һәм унан алдағы осорҙарға хас традицияға ярашлы, башҡорт-болғар тарихы ла бик боронғо риүәйәттәргә нигеҙләнеп, мифологик шәхестәр тормошо менән бәйләп бирелгән. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт халҡының килеп сығышын өйрәнеүҙә, башҡорт ырыу берләшмәләре бәйләнештәренең тарихи тамырҙарын барлауҙа "Тарих намә-и Болғар" кеүек әҫәрҙәр оло әһәмиәткә эйә. Таджетдин Ялсығол әл Башҡорди үҙе лә ул заманда билдәле булған, ҡасандыр Төркиә тарафтарынан алып ҡайтҡан байтаҡ ҡына китаптарҙы ҡулланыуы хаҡында хәбәр итә. Ошоларҙы иҫтә тотоп, "Тарих намә-и Болғар" әҫәренән (боронғо төрки-башҡорт яҙма телендә) ҙур булмаған өҙөктө уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Текст күренекле башҡорт филологы Ишмөхәмәт Ғилметдин улы Ғәләүетдинов транскрипцияһында бирелә (Унын авторлығындағы "Тарих нама-и Булгар" Таджетдина Ялсыгулова" китабынан).

"27. Бу Тағланыш Төркистанны бина әйләде. Ҡәберләрә астанә ҡупармаҡ (ҡәбер төбөнөң бер ҡырыйынан соҡоп алына торған уйым, йәки ләхет. - **Авт. иҫк.**), уғланлара сабаҡ үгрәтмәк вә бадж (пошлина. - **Авт. иҫк.**) алмаҡ андан ҡалды. Йүздә үч йыл ғүмер сүрүб, Төркистанда вафат булды. Әммә дине Муса ғәм динендә йәһүди ирде. Әл-көллө мәнҡулун мин әт-тауарих әл-хамса әлләти вә ҡағна фи әүүәл әрруб ләмма йәәти бәйәнуһу вә ҡала фил-Ҡасфарани әннә Әфләх ҡәд вулидә мин Тағланыш (Быларҙың барыһы ла "Тауарих-и әл-хамса"нан алынған, беҙ уларҙы беренсе сиреккә ҡуйған инек... Әл-Ҡасфараниҙә Әфлах Тағланыштан тыуҙы, тип әйтелгән. - **Авт. тәржемәһе**). Йәғни Тағланышдан Әфлах туғды.

28. Бу Әфлах ҡырғыз халҡының (ҡаҙаҡ. - **Авт. иҫк.**) аслы вә бәнйадылур (асылы һәм нигеҙен ҡороусылыр. - **Авт. иҫк.**). Мәрғыдан мәрғайа (бер көтөүлектән икенсеһенә. - **Авт. иҫк.**) күчүб йүрмәк андан ҡалды, йүз ун йыл ғүмер сүрде. Сыр-Дарйасында ғарыҡ улды (батып үлде. - **Авт.иҫк.**). Кафыры вә мосолманы мәғлүм дәгелдүр. Андан Мард (Марә) туғды.

29. Бу Мард төркмән халҡының атасыдыр. Аннан чуҡ уғыллар туғды. Олуғ уғлы Төркмән, андан кечесе Ҡуңғрат, андан кече Бөрджан, андан кече Манғыт, андан кече Кәрдже, андан кеше Ҡыпчаҡ, андан кече Йурматы, андан кече Ҡараҡалпаҡ. Бу заманларда хәлайыҡлардың әймәге (аймағы. - **Авт. иҫк.**) бунлардың нәселендәндүр. Мардның ғүмере вә милләте (бында: ниндәй дин тотоуы. - Авт. иҫк.) мәғлүм дәгелдүр.

30. Төркмәндән Кәнджә туғды. Әммә бу Кәнджә Ғайса динендә иде. Бохараны ул бина әйләде. Ғүмере туҡсан йылдур. Бохарада дәфен улынды (ерләнде. **- Авт. иҫк.**). Бу Кәнджәдән чуҡ уғыллар туғды. Олуғ уғлы Татардур, анда кечесе Мишардур, андан кече Иштәкдүр, андан кечесе Нуғайдур. Бунлар һәр бере шах улуб, атраф ғаләмдә (төрлө тарафтарҙа. - **Авт. иҫк.**) урдалар бина әйләделәр. Хәла (хәҙергә. - **Авт. иҫк.**) хәлайыҡларның әймәге анлардың нәселендән хәбәр бирмәкдүр (билдәлелер. - **Авт.иҫк.**). Бу Кәнджәнең уғланларындан безгә нәсел баба Иштәкдүр.

31. Әммә бу Иштәк камил ир ҡубды, ҡәғбәйә варды, чуҡ-чуҡ тәүәләр (дөйәләр. - **Авт. иҫк.**) ҡорбан әйләде. Тәүрат вә Инджилне камил белүр ирде. Ғилмлектә назиры (уға тиңе. - **Авт. иҫк.**) йуҡ ирде. Бу Иштәктән чуҡ уғландар улды. Түб йорты Аму-Дарйасында ирде. Олуғ улы Тамйан, андан кечесе Үсәргәндүр, андан кечесе Күбәләк, андан кече Бәкатун, андан кечесе Сарт, андан кечесе Тырнаҡлы, андан кечесе Түбәләс, андан кече Дувандур. Бу хәлайыҡларның хәбәр бирмәге (билдәле булғандары. - **Авт. иҫк.**) анларның нәселенәндүр. Әммә бу Иштәк уғланларындан безгә баба Бәкатундур.

32. Әммә бу Бәкатун ғайәт үфкәлү адәм ирде. Йерне ташлап бәләд шимал (төньяҡ иле. - **Авт. иҫк.**) тарафына баруб, Миач дарйасына килде. Анда мәҡам (урын. - **Авт. иҫк.**) әйләб, туҡсан йыл ғүмер әйләде. Анун уғланлары чуҡ улды. Олуғ улы Әйледүр, андан кечесе Йурми, андан кечесе Байлар, андан кечесе Байҡы, андан кечесе Ирәктә, андан кечесе Салджут. Бунлар һәр бересе шаһ улуб, атраф ғаләмә йәйелделәр. Хәлайыҡларның хәбәр бирмәге анлар нәселенәндүр. Безгә түб баба олуғ уғлы Әйледүр. Әммә Бәкатун нәсрани динендә иде".

Таджетдин Ялсығолдың ошо әҫәрендәге Иштәктең (йәғни байтаҡ ҡына башҡорт ырыуҙарының төп бабаһының) үҙ заманында Урта Азия тарафтарында йәшәп, төп йортоноң Аму-Дарья буйында булыуына иғтибар итеү фарыз. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы, Иштәктән таралып киткән яҡын, ҡәрҙәш ырыу-ҡәүемдәр араһында һуңынан Көньяҡ Уралдың төрлө тарафтарында яңы төйәктәрен тапҡан тамъян, үҫәргән, күбәләк, бәкәтун (мәкәтин), һарт, тырнаҡлы, түбәләҫ һәм дыуандар аталып үтелә. Әйеләр бабаһы Бәкәтундың Һарт баба менән ҡәрҙәш булыуы ошо ике ырыуҙың Урта Азияла көн иткән замандарҙа уҡ тығыҙ этник бәйләнештә булыуына ишара ул. Ә әйле ҡәүеменә иң яҡындары - юрми, байлар, байҡы, ирәкте, салйоғот ырыуҙары булып сыға.

Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған этногенетик тикшеренеүҙәр боронғо башҡорт ырыуҙары ҡәрҙәшлеген раҫланы. Шуныһы мөһим, ираттар (ата-бабалар) линияһы буйынса ғына быуындан-быуынға күсә килгән игрек-хромосома мутацияларын билдәләү аша боронғо ҡәрҙәшлекте объектив рәүештә асыҡлап була. Генетик тикшеренеүҙәр боронғо бер атанан таралып китеп, нәҫелдәшлектәрен күптән онотҡан кешеләрҙең уртаҡ генетик маркерҙарын - гаплотөркөмдәрен билдәләй. Әйле ырыуы башҡорттарының төп гаплотөркөмө генетик классификацияға ярашлы, R1a - M198, тип билдәләнә, унын төрлө тармаҡтары - субкладтары ла асыҡланған. Һарт-әйле һәм төп әйеләрҙең гаплотиптары, субкладтары бик яҡын. R1a - M198 генетик маркерына ҡараған субкладтар шулай уҡ табын, унлар, балыҡсы, танып, ҡатай, ҡошсо, көҙәй, дыуан, һыҙғы, өпәй, күбәләк, ҡыуаҡан, тиләү ырыуҙары башҡорттарына ла хас. Ошо гаплотөркөм һинд-европа ҡәүемдәренең генетик линияһына ҡарай, улар беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡ аҙаҡтарында - б.э. тәүге быуаттарында Бөйөк Даланың, Урта Азияның ғәйәт киң территорияһына тарала бара. Шуныһы ҡыҙыҡлы, Тарихи Башҡортостан территорияһындағы археологик ҡаҙылма ҡомартҡылары (һынташты, андрон, бура мәҙәниәттәре) ерлегендә табылған боронғо кешеләрҙең һөйәктәренә генетик анализ эшләгәс, уларҙың ошо уҡ гаплотөркөмгә ҡарауы асыҡлана. Был хәҙерге заман этнологияһы өсөн үтә мөһим асыштыр, тип уйлайым. Бәғзе бер замандаштарыбыҙға ошо генетик тап килеш ғәжәп хәл булып тойолалыр. Һынташты, андрон, бура мәҙәниәттәрен хасил иткән кешеләр бронза быуатында - беҙҙең эраға тиклем 2 мең йылдан да алдараҡ йәшәгән бит. Ошо факттан бер генә һығымта эшләргә булалыр - Көньяҡ Урал һәм уға яҡын географик ареал тәү кешелек (цивилизация) барлыҡҡа килгән үҙәктәрҙең береһе булған. Быуаттар үтә килә ошо кешеләрҙең яңынан-яңы быуындары Евразия киңлектәренә күсә-тарала барған. Тимәк, хәҙерге Ҡытай - Монголия - Алтай - Урта Азия тарафтарында көн иткән боронғо ата-бабаларыбыҙҙың вариҫтары, күп быуаттар үтһә лә, төрлө сәбәптәр арҡаһында боронғо ватандарына кире ҡайтҡан.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 2-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Бында тағы ла бер нәмәгә иғтибар итеү фарыз: рейдта саҡта комкор иң хәүефле, иң үлемесле, хәл иткес алыш көтөләсәк позицияларға тап шайморатывсыларҙы ебәрә. Сөнки тап Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары фронтта иң ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ, ышаныслы һуғышсылар булып танылa. Был юлы ла шулай була. Авангардта - М.М. Шайморатов гвардеецтары, улар артынан ғына полковник Иван Терентьевич Чаленоның 15-се гв. дивизияһы бара.

М.М. Шайморатов фронтта һәр бер осраҡта ла, яугирҙарына бойороҡ бирерҙән алда разведка эшләп, алда ниндәй дошман көстәре булыуын барлай торған була. Ул үҙе лә Ҡыҙыл Армияның Генераль штабында разведка бүлексәһен етәкләгән, ваҡытында Төркиәлә, Ҡытайҙа разведка хеҙмәтендә булып ҡайтҡан тәжрибәле боевой офицер була. 22 февралдә төнгә ҡаршы ул шулай уҡ үҙ разведчиктарын алға ебәрә. Дивизия разведчиктарына корпус артиллерияһы командиры, гв. полковнигы Р.И. Головановский етәкселегендәге корпус разведкаһы төркөмө лә ҡушыла. Әммә беҙҙең яугирҙарға разведканың кире ҡайтыуын көтөп ятыу мөмкинлеге булмай. Төн ҡараңғылығын файҙаланып, яугирҙар разведчиктар эҙенән алға хәрәкәт итә. Тирә-яҡта ниндәй генә хутор, ауыл йә поселок булмаһын - барыһы ла фашистар менән шығырым тулы.

Беҙҙең разведчиктар, ҙур һаҡлыҡ менән билдәләнгән маршрут буйынса барып, төн уртаһында Артемовск ҡасабаһына килеп инә. Ә бында немецтарҙың танк батальоны урынлашҡан була: уларға 23 февралдә иртә менән бынан бер нисә саҡрымда ғына хәрәкәт иткән 16-сы гвардия дивизияһына һөжүм итеп, тулыһынса юҡ итеү бурысы ҡуйылған була. Дошман танкистары, оҙайлы маршта арып килеп, ҡасабаның йылы өйҙәрендә ҡаты йоҡоға тала. Разведчиктар, өйҙән-өйгә йөрөп, тауыш-тынһыҙ ғына, бер ниндәй хәүеф-хәтәр барлығын тоймаған немецтарҙы юҡ итергә ҡарар итә. Был план уңышлы хәл ителә: бер нисә сәғәт эсендә дошмандың 148 һалдаты һәм офицеры юҡ ителә, уларҙың 35 танкыһы стройҙан сығарыла.

Әммә разведчиктар ҙа арттараҡ ҡалған төп көстәргә әйләнеп ҡайтмай. Уларҙың яҙмышы билдәһеҙ: күрәһең, немецтарҙың засадаһына эләгеп, үҙҙәре лә һәләк була. Ә беҙҙең яугирҙарыбыҙ разведчиктар эҙенән алға табан барыуын дауам итә. Ошо иң хәтәр мәл хаҡында 16-сы гв. атлы дивизияһы политбүлеге начальнигы урынбаҫары Сабир Рәхим улы Ҡадиров үҙенең "Урал бөркөтө" исемле хәтирәләр китабында бына ниҙәр яҙа: "23 февралдә сәғәт 5-кә приказда күрһәтелгән Юлино (Юлино-II. - **Ред. иҫк.**) утары ҡаршыһындағы ағаслыҡҡа килеп сыҡтыҡ. Һыҙылып таң атып килә. Арманһыҙ булып талған һуғышсылар туҡталған бер урында бер ни белмәй ғырлап йоҡлап китәләр. Ысынлап та, аслы-туҡлы, өс тәүлектән ары ҡар йырып тәрән соҡорҙарҙан, урмандарҙан үтеү, дошман менән өҙлөкһөҙ һуғышып килеү һәр кемде йонсотҡайны, хәлһеҙләндергәйне. Шуның өсөн дә аяғөҫтө йоҡлап ергә ауыусылар һаны күбәйә барҙы, был беҙгә, командир һәм политработниктарға, тағы ла бер ғәм өҫтәне.

Тап ошо көндә дивизия һәм корпус тарихында мәңге онотолмаҫ ваҡиғалар булып үтте.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Хәҙер йәштәр алдында иҫ киткес мөмкинлектәр асылған, ниндәй өлкәлә булһа ла үҙеңдә һынап ҡарарға, төрлө проекттар менән ил, донъя кимәлендә сығыш яһарға, гранттар оторға була - бары тик теләгең генә булһын.*

# УҠЫРҒА, ЭШЛӘРГӘ КИЛДЕК ТӘ...

## Өфөлә бер ҡорға тупландыҡ

**Һәр заманда ла илдәрҙең киләсәге йәштәр ҡулында булған һәм буласаҡ. Нәҡ йөрәктәре дөрләп янған, һәр яңылыҡҡа асыҡ булған, төрлө өлкәлә үҙҙәрен һынап ҡараусы, еңеүҙәргә ынтылыусы йәштәр заманды алға этәреүсе, үҫештең төп көсө. Бөгөнгө Башҡортостан йәштәре лә һәр йәһәттән әүҙемдәр, ғәйрәтлеләр һәм маҡсатҡа ынтылыусандар. Ә баш ҡалала уларҙы бер ҡорға туплап, уларға һәр яҡтан ярҙам иткән, йәштәрҙең бөтә башланғысын күтәрмәләп тороусы ойошма - Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһының уңышлы эшләп килеүе уларға тағы ла ышаныс өҫтәй. Бөгөнгө әңгәмәлә ассоциация етәксеһе Ғәйнислам АТАНҒОЛОВ һәм берлек ағзаһы Камил АБДУЛЛИН менән ойошманың эшмәкәрлеге, бөгөнгө көн йәштәренең тел, милләткә ҡағылышлы уй-фекерҙәре тураһында һөйләшәбеҙ.**

**Ғәйнислам:** Беҙҙең Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһы 2008 йылдан эшләй. Бөгөнгө көндә ойошма составында республиканың төрлө төбәгенән егермәнән ашыу берлек иҫәпләнә. Ассоциацияла төрлө йүнәлеш буйынса эшләгән бүлектәр бар. Ойошманың үҙәгендә 9 кешебеҙ, ә берләшмәгә ингәндәрҙең дөйөм һаны 200-ҙән ашыу.

**Камил:** Билдәле булыуынса, Өфөлә уҙған быуаттың 70-се йылдарынан алып Урал арьяғы районларының йәштәре берләшеп, ошондай ойошмалар булдырған һәм әүҙем эшмәкәрлек алып барған. Ләкин уларҙың һәр береһе үҙаллы эшләгән. 2008 йылда иһә бөтә ошондай ойошмаларҙы бер ассоциацияға туплап, уның эшен тағы ла киңерәк йәйелдергәндәр. Берләшкән яҡташтар ассоциацияһын ул ваҡыттарҙа Тимур Лоҡманов, Азат Бадранов, Илнур Ҡотләхмәтов, Даян Сиражетдиновтар етәкләгән.

**Ғәйнислам:** Берлектең маҡсаты - республиканың төрлө район һәм ҡалаларынан килгән йәштәрҙе Өфөлә бер урынға туплау, бер береһе менән таныштырыу, уларға ҡала мөхитенә инеп китергә ярҙам итеү. Шулай уҡ йәмғиәткә файҙалы булған төрлө проекттарҙы тормошҡа ашырыу, уларға йәштәрҙе ылыҡтырыу, туған телдең ҡулланылышын әүҙемләштереү, милли мәҙәниәт үҫешенә үҙ өлөшөбөҙҙө индереү, фәнни-ғәмәли өлкәлә йәштәрҙе үҫтереү, спортҡа бағышланған һәм башҡа эштәр беҙҙең алдыбыҙҙа торған бурыстар. Улар араһында, мәҫәлән "Аҫылташ", "Урал мирасы" һәм башҡа форумдарҙы билдәләргә була. Бындай эшмәкәрлек баш ҡалаға килгән йәштәргә юғалып ҡалмаҫҡа, төрлө өлкәлә үҙҙәрен табырға булышлыҡ итә.

**Камил:** Төрлө район берлектәренең әүҙем эшмәкәрлеген билдәләп үткем килә. Улар районлаштарын бергә туплай, Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһына ҡушыла. Эште был рәүешле алып барыу һәр йәш кешене айырым туплауға ҡарағанда, күпкә отошлораҡ, бер райондан булғандар үҙ ойошмаларына ауылдаштарын, класташтарын саҡыра, улары иһә үҙҙәренең таныштарын ылыҡтара һәм район яҡташтар ойошмаһы киңәйә бара. Бында айырыуса район ойошмалары рәйестәренең эшен билдәләп үтергә кәрәк, сөнки нәҡ уларҙың ныҡышмалығы, тырышлығы, әүҙемлеге үҙ районлаштарын бер урынға туплларға һәм улар менән бергәләп эшләргә мөмкинлек бирә.

**‣ Бынан 20 йылдар элек Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Учалы, Белорет йәштәре берлеге әүҙем эшләне. Төрлө спорт һәм мәҙәни саралар уҙҙы, һабантуйҙар үтә ине. Ә бөгөнгө көндә был исемлеккә тағы ла кемдәр тулыландырҙы?**

**Ғәйнислам:** Урал арьяғы райондары бөгөнгө көндә лә Өфөлә иң әүҙем эшләгән берлектәр. Шулай уҡ уларға иш булып Краснокама, Йылайыр, Балаҡатай, Илеш, Федоровка райондары йәштәре лә үҙ берләшмәләрен булдырып, актив эшмәкәрлек алып бара.

**Камил:** Ысынында, Ғәйнислам һанап үткән районларҙың йәштәре берләшеп, беҙҙең менән тығыҙ бәйләнештә эшләй башлауҙары ҡыуаныслы күренеш. Ни өсөн тигәндә, әлегә тиклем баш ҡала уҙған төрлө сараларҙа ул райондарҙан сыҡҡан йәштәр һирәк ҡатнашты. Ни тиһәң дә, Башҡортостан тик Урал арьяғы райондарынан ғына тормай. Шуға күрә беҙгә башҡа район йәштәрен дә үҙебеҙҙең проекттарға ылыҡтырып, бергә төрлө саралар уҙғарып, аралашып йәшәргә тырышырға кәрәк. Башҡортостан ҙур биләмәле төбәк һәм уның йәштәре бер төптән булып, һәр яңы башланғысты әүҙем күтәреп алып, бөтә сараларға ла үҙ делегаттарын ебәреп торһа, ҙур уңыштарға өлгәшеүебеҙгә шик юҡ.

**‣ Даими уҙғарған төрлө форум, спорт, мәҙәни сараларҙан тыш, бөгөнгө көндә берлек тағы ниндәй мөһим проекттар өҫтөндә эшләй?**

**Ғәйнислам:** Хәҙер йәштәр алдында иҫ киткес мөмкинлектәр асылған, ниндәй өлкәлә булһа ла үҙеңдә һынап ҡарарға, төрлө проекттар менән ил, донъя кимәлендә сығыш яһарға, гранттар оторға була - бары тик теләгең генә булһын. Гранттарға килгәндә, беҙҙең Башҡортостан йәштәре үҙҙәренең идеяһын төрлө проекттарға һалып, әллә күпме сараларҙа ҡатнашып, финанс ярҙам алыуға өлгәште. Беҙ уларҙың һаны тағы ла күберәк булһын һәм республикала йәштәребеҙ тарафынан ойошторолған төрлө саралар артһын, тиген уй-фекерҙә өҫкә күтәрәбеҙ. Шул уҡ туризм өлкәһендә әллә күпме эштәр атҡарырға була, фермерлыҡ, фәнни эштәр менән шөғөлләнергә мөмкин, һәм башҡалар. Ә форумда ҡатнашырға һәм грантҡа дәғүә итерлек проекттар яҙыу еңелдән түгел. Ошоно күҙ уңында тотоп, беҙ әлеге мәлдә "Проекттар мәктәбе" эшмәкәрлеген әүҙемләштерәбеҙ. Уның сиктәрендә төрлө өлкәлә уңышлы эшмәкәрлек алып барған һәм үҙ проекттарына гранттар алыуға өлгәшкән кешеләр йәштәргә теге йәки был программа тураһында һөйләйәсәк. Шулай уҡ нисек итеп проект яҙырға, комиссия алдында уны нисек яҡларға, грант алғас, эште нимәнән башларға, проектты тормошҡа ашырыу уңышлы булһын өсөн ниндәй аҙымдар яһарға һәм башҡа күп төрлө һорауҙарға яуап бирәсәк мәктәп.

**Камил:** Башҡортостан федераль кимәлдә грантлар алыу буйынса тәүге 5 урында тора. Был беҙҙең йәштәрҙең ни тиклем сәмле, үҙ идеяһын, хыялын ысынбарлыҡ итеү өсөн тырышыусы, маҡсатлы, дәртле булыуы тураһында һөйләй. Ошондай йәштәр һаны тағы ла артһын һәм беҙҙең төбәк тағы ла күберәк һәм ҙурыраҡ гранттар отһон, тиген уйҙы алға һөрөп, әлеге мәктәп эшмәкәрлеген алып барыу тураһында килештек.

**Ғәйнислам:** Мәҫәлән беҙҙең ассоциация "Яҡташтар көсө" исемле проектты тәҡдим итеп, 3 миллион һум күләмдә грант алды. Башҡортостанда Радий Хәбиров инициативаһы менән "Атайсал" программаһы уңышлы эшләп килә. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, ошо проектта ҡатнашҡан һәм үҙенең тыуған ерендә ниндәйҙер эште атҡарып сыҡҡан шәхесте шул район биләмәһе йәштәре менән осраштырып, аралаштырып, уларҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар табырға булышлыҡ итәбеҙ. Йәштәргә үҫер, дөрөҫ юлдан барыр өсөн матур өлгөләр кәрәк. Ә үҙенең тыуған ере өсөн тырышҡан кеше нәҡ ошондай өлгөлө шәхестәрҙең береһе лә инде. Беҙҙең проект быуындар бәйләнешен нығытыуға, улар араһындағы аралашыуҙы әүҙемләштерергә, ололарҙың йәштәр менән тәжрибә бүлешеүенә йүнәлтелгән. Бындай осрашыуҙар барышында беҙ шулай уҡ баш ҡалалағы йәшәйеш менән таныштырабыҙ, төрлө уҡыу йорттары тураһында мәғлүмәт бирәбеҙ.

**Камил:** Йыл да үткәрелеп килгән "Аҫылташ" форумы шулай уҡ беҙҙең мөһим проекттарыбыҙҙың береһе. Ул башҡорт йәштәренең йыйылышып аралашыу, фекер уртаҡлашыу, үҙ идеялары менән бүлешеү, спорт һәм мәҙәни саралар майҙаны. "Аҫылташ"-тың төп һәм мөһим проекты - башҡорт телендә ойошторолған дебаттар.

Бындай уйындар 2017 йылдан башлап үткәрелә. Төрлө мәсьәләләр, тема һәм һорауҙарҙы үҙ эсенә алған парламент дебат уйындары бөтә республика йәштәре араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Декабрҙә уҙған дебат уйындары еңеүселәре итеп Илһам Килмәтов һәм Камила Бикбаеванан торған Көйөргәҙе районы командаһы билдәләнде.

Шулай уҡ бөгөнгө көндә милләткә, милли үҙаңға ҙур иғтибар бирелеүен күҙ уңында тотоп, декабрь башында онлайн форматта "Урал мирасы" тип аталған ғилми йәштәр этнофорумын үткәрҙек. Сарала милләтең (этно) йәшәйешебеҙгә нисек һәм ниндәй



***Туған телеңдә яратыу тәү ҡарашҡа бәләкәй генә булған аҙымдарҙа, эштәрҙә сағыла. Әллә ҡасан инде телефонда ҡулланыу өсөн башҡортса клавиатура эшләнеләр, уны телефоныңа ҡуйып, хәбәрҙәрҙе башҡортса яҙыуың да ошо йүнәлештәге ҙур аҙым булып тора. Шулай уҡ республикала сыҡҡан гәзит-журналдарҙы уҡыу, спектакль-концерттарға йөрөү ҙә милли баҫманы, мәҙәниәтте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк бит. Барыһы ла ябай һәм бөтәһе лә үҙебеҙҙән тора.***

кимәлдә тәьҫир итеүен, шулай уҡ уның үҙтәрбиәлә һәм рухи үҫештә ниндәй роль уйнауын асыҡларға тырыштыҡ. Форумда билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәре, сәйәсмәндәр һәм башҡа төрлө өлкәлә эшләүсе шәхестәр спикер булараҡ сығыш яһаны һәм ҡатнашыусыларҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар бирҙе.

**Егеттәр, тел тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, был темаға тәпләрәк туҡтайыҡ. Глобализация заманында йәшәйбеҙ һәм ошондай ваҡытта туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу һәм уны үҫтереү өсөн ниндәй эштәр башҡара алабыҙ?**

**Ғәйнислам:** Туған тел, мәҙәниәт, ғөмүмән, милләтлек һәр кем өсөн иң ҙур рухи сығанаҡ. Уларҙы яҡлау, һаҡлау, киләсәк быуынға тапшырыу бөтә милләт алдында торған иң ҙур бурыстарҙың береһе. Туған телендә яратыу тәү ҡарашҡа бәләкәй генә булған аҙымдарҙа, эштәрҙә сағыла. Әллә ҡасан инде телефонда ҡулланыу өсөн башҡортса клавиатура эшләнеләр, уны телефонына ҡуйып, хәбәрҙәрҙе башҡортса яҙыуың да ошо йүнәлештәге ҙур аҙым булып тора. Шулай уҡ республикала сыҡҡан гәзит-журналдарҙы уҡыу, спектакль-концерттарға йөрөү ҙә милли баҫманы, мәҙәниәтте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк бит. Барыһы ла ябай һәм бөтәһе лә үҙебеҙҙән тора. Көндәлек тормошобоҙҙа сағыла телебеҙгә һәм башҡа өлкәләргә миллилеккә булған ҡарашыбыҙ.

**Камил:** Күптән түгел халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы тамамланды. Ябай ғына иҫәп ҡағыҙындағы һәр яуап тотош милләттең артабанғы яҙмышына йоғонто яһаясаҡ. Шуға күрә һәр кем бөтә яуаплылығын һалып, туған милләтенең киләсәгенә күҙ унында тотоп эш иткәндәр, тип ышанғы килә. Был өлкәлә йәштәр ҙур эштәр атҡара. Ғәйнислам билдәләп үткән башҡортса клавиатураны күптәр ҡуллана, һүҙҙәрҙе урыҫсанан башҡортсаға әйләндергән һүҙлектәр эшләнеләр, балаларға башҡорт телендә һөйләшкән, йырлаған уйынсыҡтар етештерәләр. Шулай уҡ телевизорҙа уныңлы тапшырыуҙарҙың береһе булған "Әлләсе" уйынын виртуалләштереү өҫтөндә эшләй егеттәр. Интернет селтәрендә лә миллилеккә ҙур иғтибар биргән егеттәр һәм ҡыҙҙар үҙ биттәрен әүҙем алып бара. Башҡорт телле блогерҙарыбыҙ бар. Быларҙың барыһы ла телде, мәҙәниәтте, тарихыбыҙҙы, дөйөмләштереп әйткәндә, башҡорт булмышыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индерә.

**Ғәйнислам:** Халыҡ иҫәбен алыуға килгәндә, саранын мөһимлеген һәм кәрәклеген инҡар итеп булмай. Милләт булараҡ бөгөнгө хәлебеҙ ниндәй, туған телебеҙҙең артабанғы яҙмышы һәм башҡалар - быларҙың бөтәһе лә сағылыш таба бит инде. Ләкин быны барыһы ла аңлап эш итәме, быны мәсьәлә нимәлә. Минең фекеремсә, йәштәр араһында халыҡ иҫәбен алыуҙың бөтә мөһимлеген төптән аңламағандар ҙа бихисап. Һәм ололар тарафынан ошо йүнәлештә аңлатыу эштәре алып барыуҙы яңы кимәлгә күтәреү мөһим. Был эшмәкәрлек йәштәр араһында ғына түгел, ә киләсәктә үҙҙәре айырым шәхес булараҡ иҫәп алыуҙа ҡатнашасаҡ мәктәп уҡыусылары араһында ла киң йәйелдерелергә тейеш, тип иҫәпләйем. Һәм, иң мөһиме, аңлатыу эше иҫәп алыу процесы башланыр алдынан ғына түгел, ә даими рәүештә алып барылһа ине, тигән теләктә ҡалам.

Шулай уҡ иҫәптә бар, һанда юҡ, тигән һымаҡ булмайыҡ. Башҡорт булараҡ теркәлергә һәм үҙебеҙҙең матур йәшәйешебеҙ, эшмәкәрлегебеҙ менән иҫбатлайыҡ. Милләт, республика һәм тотош ил өсөн файҙалы булырлыҡ маҡсаттарыбыҙҙы донъяға ашырыу өҫтөндә әүҙем эшләйек. Конкурентлыҡ һәм компетентлы булыу кимәлен үҫтерәйек.

**Йәш яҡташтар берләшмәһенең эшен тағы ла әүҙемләштереүҙе нимәлә күрәһегеҙ?**

**Ғәйнислам:** Ассоциацияға килгән, беҙгә ҡушылған һәр кешене, район берлектәрен шатланып ҡаршы алабыҙ. Сөнки уларҙың һәр кеме үҙе менән яңы идея, яңы ҡараш алып килә, ойошманы тулыландыра. Берләшмәлә тик башҡорт йәштәре генә бар һәм буласаҡ, тиеү хата, сөнки ойошмаға теләге булған һәр милләттең йәш вәкиле килеп ҡушыла ала, беҙ һәр кемгә асыҡбыҙ. Киләсәктә берләшмәлә Башҡортостандың бөтә төбәгенән дә йәштәр тупланыр һәм улар бер төптән булып ҙур эштәр атҡарыр, тип ышанам. Ойошмала рәхим итегеҙ. Бөгөнгө көндә йәштәр алдында бөтә ишектәр ҙә асыҡ, тырышлыҡ ҡына кәрәк, ә ойошма һәр йәш кешенең маҡсаты ысынбарлыҡ булһын өсөн ярҙам итергә тырыша.

**Камил:** Берләшмә үҙе алдына Башҡортостан йәштәрен генә түгел, ә беҙҙең төбәктә тыуып үҫеп, бөгөнгө көндә Рәсәйҙең төрлө төбәгендә уҡыған, эшләгән йәштәрен дә берләштереү маҡсаты ҡуйған. Әлеге ваҡытта Мәскәү, Санкт-Петербург, Ырымбурҙағы Башҡортостан йәштәре берлектәре менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Үҙ эшен, шөғөлөн мөкиббән китеп башҡарыусыларҙың ихласлығы, маҡсатлығы күҙҙәрендә сағыла. Әңгәмә барышында Ғәйнислам менән Камилда нәҡ ошо осҡондо күрҙем, үҙҙәренең эшмәкәрлеге тураһында яңып-ярһып һөйләүҙәрен ишетеүем улар етәкләгән ойошманың киләсәге ышаныслы булыуына асыҡ ишаралары. Нәҡ ошондай әүҙем йәштәребеҙ үҙҙәре лә алға бара һәм арттарынан башҡаларҙы ла әйәртә. Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһына эштәренең уңышлы булыуын, маҡсаттарының тормошҡа ашыуын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# ЭЛЕК ҺӘМ ХӘҘЕР

(Башы 2-3-сө биттәрҙә).

## Беҙҙең уйындар

Тау башы асылыу менән унда төрлө уйындар уйнай инек, ҡышын тау бите сағыу-сана эҙенән сып-сыбар була торғайны. Ҡышын ҡар киҫәктәренән окоп, төртмәк һәм башҡа уйындар, йәйен шашка, лапта, футбол, волейбол, бүрек бәреш уйындары уйнаныҡ. Шул уйындарҙың береһен дә белмәй хәҙерге балалар, компьютерҙан, телефондан айырыла алмайҙар. Хәҙер ниндәй генә спорт инвентарҙары юҡ. Беҙҙең һирәгебеҙҙә быймаға ҡайыш менән бәйләй торған йомро башлы коньки, тал сыбыҡтан яһалған сәкән, шайба урынына консерва банкаһы, ағас сана, саңғылар булды, улар һынһа, консерва ҡалайын киҫеп, ваҡ ҡаҙаҡ менән ҡағып ҡоршап ҡуя инек.

## Хеҙмәт һөйҙөк

14 йәштән комбайнер ярҙамсылары, тракторҙа прицепщик булып ер һөрҙө тиҫтерҙәрем. Шул йәштә бейек бортлы машинала силос тигеҙләй, ауыр валакуша һөйрәй инек. Уҡығанда йәйен ял иткәндә лә хәтерләмәйем, каникулда урман киҫә инек, сөнки мәктәптә класс һайын кирбес мейес булды. Киҫкән ағастарҙы машина, трактор арбаһына тейәп, урмандан сығара һәм хеҙмәт дәресе һайын шул ағастарҙы ҡул бысҡыһы менән бысып, балта менән ярып, ҡаралтыларға тултыра инек. Ҡыҙҙар ҙа малайҙар ыңғайына эшләнә, ә бит беҙгә 14-15 йәш кенә ине. Ата-әсәләр беҙҙең өсөн борсолманы, балама берәй хәл булып ҡуйыр тип ҡурҡманы, уҡытыусыларға һуҡранманы. Кластағы кирбес мейестәргә техничкалар таңдан килеп утын яға торғайнылар, башҡа еҫ тейгән саҡтар ҙа булды.

Урмандан тыш, элек колхоз күп итеп картуф сәсә, сөгөлдөр үҫтерә торғайны, унда ла беҙ алғы һыҙыҡта булдыҡ. Өҫтәүенә, иген урғанда ырҙын табағында эшләү, бортлы машиналарҙан иген бушатыу эштәре лә беҙҙән ситтә ҡалманы. Икешәр смена уҡыныҡ. Сумкала бер телем икмәк. Ҡайҙа ул хәҙерге мәктәп балаларына эләккән хан һыйы. Күрше 3-4 саҡрымдағы ауылдарҙан балалар йәйәү йөрөп уҡыны, бер кем дә зарланманы.

Хәҙер уҡыусыларға яҙыу таҡтаһын һөртөргә лә рөхсәт итмәйҙәр, имеш. Ҡайҙа ти ул өҫтә һөйләп үткән беҙ эшләгән эштәрҙе эшләтеү балаларҙан. Хеҙмәт кешене тәрбиәләүен аңламаған алмаш үҫтерәбеҙ бит хәҙер. Мәктәптә балаларға бер һүҙ әйтеп ҡара, ҡайҙа ти ул эшләтеү. Ата-әсәһе мәктәпкә килеп, оло ғауға ҡуптара. Беҙҙең башҡа указка эләккән саҡта ла, ғәйепте таныш, өндәшмәнек. Уҡытыусыларыбыҙ юғары белемле булмаһа ла, тормош тәжрибәһен, тәбиғи талантарын туплап, белем бирергә тырышты. Хәҙер мәктәптәр яҡты, йылы, бар йыһаздар бар, хатта баланың күҙен боҙа, тип, электр лампочкаларынан да сәбәп таба тикшереү органдары. Артыҡ иркәләмәйбеҙме икән киләсәк быуынды? Ә көн-төн компьютер баланың күҙен боҙмаймы, билен бөксәйтмәйме?

Ни эшләп хәҙер мәктәптәрҙә хеҙмәт дәресе юҡ, ә ул бит балаға ҙур тәрбиә бирә. Элек беҙҙә, малайҙарҙы, хеҙмәт уҡытыусыһы ағас ултырғыс, кәрәк, балта, сүкеш һабы, сыйырсыҡ ояһы яһарға, лобзик менән фигуралар киҫергә, һепертке бәйләргә өйрәтә торғайны. Сүкеш, балта тота белмәгән ниндәй малай, егет һәм атай булһын! Ҡыҙҙар сигеү сигергә, ойоҡбаш бәйләргә, тегенергә өйрәнә ине. Балаһына ойоҡбаш та бәйләй белмәгән ниндәй буласаҡ әсә, егетенә ҡулъяулыҡ та сигеп бирә белмәгән ниндәй ҡыҙ һуң?

## Туған телдә һөйләштек

Хәҙер башҡорт балалар баҡсаһына йөрөгән бала ла русса ғына һөйләшә, үҙ телен белмәй. Бөйөк рус телен бала белһен, һүҙ юҡ, ләкин әсә теленә лә тоғро булһын, беҙ бит ике телдә лә белеп үҫтек һәм беләбеҙ. 80-90-сы йылдарҙан башланды балаларҙың рус теленә күсеүе. Ярай, ҡала балаһы телен боҙа икән, ти, хәҙер ауылдарҙа ла шул уҡ хәл. Бында ҡарауыл ҡысҡырырға кәрәк. Милләт кәмеүенә башҡорттоң үҙ телен һатырға әҙер тороуы ла тәьҫир итмәй ҡалмайҙыр.

## Кейемебеҙ...

Уҡыусыларҙың кейеменә байҡау яһайыҡ. Элек беҙҙең уҡыусы малайҙарҙың башында армиялағы кеүек фуражка, билдә - ҡайыш, өҫтө-аҫты менән матур форма, ҡыҙҙарҙа - аҡ яғалы күрән күлдәк, аҡ алъяпҡыс ине. Әле сығарылыш класс ҡыҙҙары ғына шундай күлдәк кейә. Мәктәптә балаларҙың бер төҫлө, бер төрлө кейемдә булыуы яҡшы түгелме ни һуң? Уйлап ҡарағыҙ, байыраҡ ата-әсәнең балаһы яҡшы кейенә, хәлһеҙенеке ярлыраҡ. Был алама кейенгән баланың психикаһына, уҡыуына тәьҫир итмәй ҡалмай, ул бала үҙен меҫкен итеп тоя һәм ситләшә башлай. Бында клан барлыҡҡа килә түгелме? Әле мәктәп формаһы тип шотландтар кейеме кеүек бер кейем сығарғандар ҙа ул, формамы ни инде ул?

## Тәрбиәләүсе ойошмалар

СССР бөттө, коммунистарҙың исеме генә ҡалды, ниңә комсомол, пионер, октябрятты бөтөрөргә инде, бына тигән тәрбиәүи ойошмалар ине балаларға, ғорурлыҡ ине. Комсомолдар һуғышта коммунистар менән алғы һыҙыҡта булған, ниндәй генә төҙөлөштәр төҙөмәгән, шул ойошмаларҙы бөтөрөү ил етәкселегенең ҙур хатаһы. Шул ойошмаларҙы тергеҙмәй тороп, балаларҙы хеҙмәткә йәлеп итмәй тороп, илгә, туған телгә һөйөү уятмай тороп, зәңгәр экрандарҙа, интернетта мәғәнә булмай тороп, ауылға хет икешәр мәсет һал, йәштәргә иман кермәйәсәк.

## Ни булды һеҙгә?

Хәҙер ата-әсәләр Себер тарафтарында бил бөгөп йәки артыҡ малын һатып, балаларына юғары белем бирергә тырыша. Был һәйбәт, әлбиттә, балам кеше булһын, үҙебеҙгә ундай мөмкинлек булманы, тип уйлай улар. Тик баланың уҡырға һәләте бармы, тәүҙә шуны уйларға кәрәктер, аҡса түгеп диплом алып ҡына бала барыбер үҙ һөнәре буйынса эшләмәйәсәк, ата-әсәнең көсө юҡҡа сығасаҡ. Бар кеше лә юғары белемле булһа, ябай эште кем эшләр, илгә токарь, сварщик, механизатор, машина йөрөтөүсе, һауынсылар ҙа кәрәк. Шуға ла ГПТУ, СПТУ-ларҙы ябырға түгел, уларға ярҙам итергә кәрәк ине ил етәкселәренә.

Элек ауылда берәйһе өй күтәрһә, бар ауыл халҡы ярҙамға килә ине. Хәҙер ниңә кеше шул тиклем яуызланды? Туған туғандың, күрше күршенең хәлен белмәй. Берәү тырышып донъя көтһә, төҙөһә, уны нисек кенә һөйләмәйҙәр, ғәйбәткә тығалар.

Шул да ҡыҙғаныс: хәҙер ауылдарҙа гармун тауыштары юҡ, туйҙар кафе-ресторандарҙа үтә, ҡоҙа ҡоҙаһын танымай ҙа ҡала. Нужа күрмәгән, ата-әсәһе тапҡан малдың ҡәҙерен белмәгән йәштәр оҙаҡ та йәшәмәй айырылыша. Һүҙ юҡ, яҡшы йәшәп, ата-әсәһенә терәк булып, уларҙы һөйөндөрөп йәшәүсе йәштәр ҙә күп, тик статистика буйынса ҡауышыуҙың теүәл яртыһы - айырылышыу. Был тормошҡа еңел ҡараштан килә бит.

Нәмә булды һеҙгә, кешеләр? Эсеп, күпме милләттәштәребеҙ ҡырыла, тәбиғәт, экология, эсер һыуҙарыбыҙ бысрана. Ошо етешһеҙлектәргә ҡаршы көрәшеү өсөн дуҫ-туған булып берләшергә кәрәк беҙгә. Быны өсөн уҡытмайҙар, аң, йөрәк ҡушыуы буйынса эшләргә, йәшәргә генә кәрәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мин беҙ күргәнде хәҙерге балалар ҙа күрһен тимәйем, әммә үткәнде белмәгәндең киләсәге юҡ, тиҙәр бит. Яҙыуымдың асылы шул: йәштәр беҙгә бына тигән алмаш булып үҫһендәр, тәүфиҡлы, иманлы, миһырбанлы булып, яҡшы-яманды айыра белеп, ололарҙы хөрмәт итеп, илебеҙгә тыныслыҡ биргән оло олатай, оло өләсәйҙәрен һуңғы көндәрендә һөйөндөрөп йәшәһендәр һәм хәҙерге матур тормоштоң ҡәҙерен белһендәр ине.**

**Фәүкәт ҠОТЛОШИН.**
**Стәрлебаш районы.**

✓ **"Оҡшатып кеше һынын эшләйем, натюрморт та, пейзаж да башҡаларҙыҡынан кәм сыҡмай, тик һүрәттәрең тере түгел, йән өрә белмәйһең, тиҙәр ҙә ләүкелдәйҙәр, быуынға төшөп. Умниктар", - тип йәне көйҙө.**





## АВТОР ТУРАҺЫНДА

*Рәсүл Байгилдин ижад донъяһына күптәребеҙ һымаҡ юғары уҡыу йортоноң филология факультеты аша түгел, ә урау-урау юлдар аша килә. 1962 йылдың 17 ғинуарында Йылайыр районының Матрай ауылында тыуа. Баймаҡ интернат-мәктәбен тамамлағандан һуң әрме хеҙмәтен үтә, шунан һуң Силәбе өлкәһенең Мейәс ҡалаһындағы геология-разведкалау техникумында уҡый. Уҡыған осорҙа Якутияла практика үтһә, һуңынан алған һөнәре буйынса эшләргә Чукоткаға юллана. Артабан Хәйбулла районы үҙәге Аҡъярҙағы төҙөлөштә ташсы, Баймаҡ районы гәзитендә хәбәрсе, Сибайҙа сыҡҡан "Атайсал" гәзитендә баш мөхәррир, Сибай ҡалаһы хакимиәтендә бүлек мөдире булып хеҙмәт итә. Бөгөн эшләгән урыны - "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррир урынбаҫары. Ике китап авторы, Башҡортостан, Рәсәй Яҙыусылар союздары ағзаһы.*

*Күп һанлы хикәйәләре, повестары менән танышҡандан һуң Рәсүлдең тик үҙенә генә хас сифатын билдәләр инем: ул да булһа, яҙыр материалының, фараздарға ҡоролмайынса, анығ, үҙ тәжрибәһе аша һыналған булыуы, уйҙырмаларға ҡоролмауы, икенсеһе - тел-стиль маһирлығы. Күрәһең, донъялар ҙур үҙгәреш кисергән үткән быуаттың 80-се йылдарының аҙағынан алып бөгөнгә тиклем ижадсының йәшәйешебеҙҙең башҡа тармаҡтарында хеҙмәт итеп, асылда, халыҡ араһында булыуы, донъя гиҙеүе, тормоштоң үҙәгендә ҡайнауы ошо рәүешле ижадында сағылыш табалыр. Тап был йылдарҙа беҙ, мәҫәлән, баш ҡалала, матбуғат, яҙыусылар, журналистар мөхитендә үҙебеҙсә "ҡайнаныҡ". Яҙыусы әле яҙған, күп өлөштәре айырым повестар рәүешендә "Ағиҙел"дә донъя күргән "Ғаилә" романы менән танышҡандан һуң унын киләсәктә лә беҙҙе яңынан-яңы әҫәрҙәр менән ҡыуандырасағына өмөт-ышанысыбыҙ ҙур. Нимә генә тиһәк тә, Рәсүл тормошто эстән яҡшы белә.*

*Шәхси планға килгәндә, Рәсүл дуҫлыҡҡа үтә лә тоғро зат. Баймаҡ интернат-мәктәбендә ул Әбйәлил районының Ишҡол ауылында тыуып үҫкән мәшһүр егет, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Мәүлит Мөхәмәҙиев менән бергә уҡыған, уның айырылмаҫ дуҫы булған. Яҙмыш мине лә Мәүлит менән дуҫлыҡ һуҡмағы буйлап бергә атлатты. Мәүлит үҙ-ара һөйләшкәндә ике һүҙҙең береһендә Рәсүлдең исемен телгә алыр булды. Үкенескә күрә, уның ғүмере бик иртә өҙөлөп ҡалды. Унын ҡарауы, Мәүлит менән дуҫлығыбыҙ эстафетаһын Рәсүл үҙ ҡулына алды һәм миңә дуҫлыҡ ҡулдарын һуҙҙы. Шундай тоғро дуҫым барлығына үтә лә шатмын. Рәсүл дуҫымды ғүмеренең 60 үренә артылыуы менән ҡотлап, оҙон ижади ғүмер, ейән-ейәнсәрҙәр ҡыуанысы теләйем!*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**




### 1

Хөбөтдинов Идеал Салют улын коллегалары үҙ-ара Хис тип йөрөттө. Ҡушаматҡа бер ниндәй ҙә хилаф мәғәнә һалмайҙар ине - уның ҡарауы ул, есеменә тап килгән кеүек, ғүмерлеккә йәбеште лә ҡуйҙы кешегә. Ҡайҙа эшләһә лә, ниндәй генә юғары вазифаларға үрләһә лә, артынан ҡалманы. Әйтерһең, барыһына ла күренерлек итеп маңлайына яҙылған. Быға тиклем күреп-белмәгән кешеләр араһына инеп эшләй башлауына күп тә үтмәй, Хөбөтдиновтың тапҡыр был ҡушаматы, аяҡланғандай, хеҙмәткәрҙән хеҙмәткәргә, кабинеттан кабинетҡа йөрөй башлай, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә барыһына ла үҙен танытып өлгөрә.

Ғәжәп хәл.

Идеал Салют улы үҙен утыҙ йәшенән һуң ғына ярата башланы. Ғүмеренең тәүге өлөшөн иҫләгеһе лә килмәй, кемдеңдер иҫенә төшөрөүен дә теләмәй. Үткән эшкә - салауат, биғәйбә. Ул - министр урынбаҫары! Өлкән синыф малайҙары дөрөп алып барып, шкафҡа бикләп ҡуйған рәсем һәм һыҙма фәне уҡытыусыһы түгел.

Һәр кемдең карьера үҫеше, кем әйтмешләй, үтә лә шәхсән һәм башҡалар миҫалында һирәк ҡабатлана. Хөбөтдинов, үҙе лә аңғармай, уға - карьераһына - нигеҙҙе уңыштары һәм ҡаҙаныштарынан торған тос ҡына тупланма ярҙамында һалды. Ташты ташҡа теҙеп диуар күтәргән, өҫкә - ҡояшҡа - яҡыныраҡ үрләгән ише. Маҡталып һыуһыны ҡанманы, саманы белмәй баһаламанамә йыйҙы, дан-ҡөҙрәткә туя белмәүе ауырыуға тартым төҫ алды хатта. Хәйер, был зәхмәт геройыбыҙға һуңыраҡ ҡағыласаҡ. Әле эскерһеҙ бала сағы, торомошоноң башы ғына...

- Һин - Идеал, улым! Идеал! Аңлайһыңмы? Гел беренсе булырға тейешһең! - Әсәһе улына иҫ белгәндән шулай нотоҡ уҡыны.

Тик Идеалға идеал булыу ауыр бирелде. Бәләкәй буйлы сибек малайға бер генә лә шөғөл уңыш алып килмәне. Күпме генә тырышмаһын, уҡыуҙан да алдыра алманы - өслөгә өлгәшмәһә лә, синыфтан-синыфҡа һуҙып-тартып "ударник"ка саҡ сыға килде. Урамда тиҫтерҙәре араһында ла алдан йөрөү бәхете теймәне уға. Беләктәре бушағыраҡ ине шул.

Тәүге маҡтау ҡағыҙын беренсе синыфта алды. Егерме өсөнсө февралгә атайҙарға бағышлап эшләгән һүрәттәр конкурсында Идеалдың танкыһы башҡаларҙың килбәтһеҙ һалдат һындары, танк-самолеттары араһында ҡупшылығы һәм ҡеүәтле пушкаһы көбәге менән айырылып торҙо. Шунан ул мәктәп ярышында үҙ тиҫтерҙәре араһында йүгереүҙән өсөнсө урынға сыҡты. Директор, ҡулын ҡыҫып тороп, үҙе тапшырҙы сираттағы ҡиммәтле ҡағыҙҙы. Былар тәүге мая булды.

Йүгереүҙән башҡаса уңыштарға өлгәшеү бәхете теймәне Идеалға. Уның ҡарауы, һүрәт төшөрөүгә һәләте асылып, был тәңгәлдә ярайһы үрҙәр яуланы. Мәктәп йылдарына ҡағылышлы ҡаҙаныштарының туҡһан проценты йәш рәссамдың ҡул оҫталығын дәлилләй ине.

Дүртенсе синыфтан алып, уҡыуҙы тамамлағансы, ул стена гәзите сығарҙы. Тәүҙә үҙҙәренең класында, аҙаҡ - мәктәп кимәлендә. Мөхәррире, әлбиттә, иң әүҙем, иң алдынғы уҡыусылар араһынан ҡуйылды. Ә биҙәүсе гел Идеал булды. Оҫтараҡ һүрәт төшөрөүселәр күренгеләһә лә, ул йәмәғәт эшен ҡаршылашмай ғына иңенә артмаҡлауы менән алдырҙы. Мәктәп тормошонда Идеал шулай үҙ урынын тапты. Күҙгә-башҡа салынып бармаһа ла, уны һәр уҡыусы, һәр уҡытыусы белеп торҙо. Һуң, берен-бере алмаштырып, йыл әйләнәһенә иң түрҙә эленеп торған стена гәзитендә уның исем-шәрифе фәҡәт яҙыла килде лә баһа: "Гәзитте биҙәүсе, һүрәттәрҙе төшөрөүсе - рәссам Хөбөтдинов Идеал".

Рәссам Идеал!

Гәзиттең яңы һанын, ғәҙәттә, дәрестәрҙән һуң, мәктәп коридорҙары һилләнә биргәс элә торғайнылар. Иртәгеһенә Идеал алдараҡ килә лә төшөргән карикатураһын башҡалар нисек ҡабул итеүен ситтән күҙәтеп тора. Тәүҙә берәү килеп баҫа, шунан тамашасылар икәү-өсәү булып китә. Ә бер мәл: "Кемде яҙғандар? Кемде төшөргәндәр, тием?" - тип этеш-төртөш, стенд эргәһендә урын өсөн талаш ҡуба. Идеал кинәнес кисерә шул мәлдә.

Гәзит сығарыуға бәйле йәмәғәт эшенән оҫта файҙаланырға ла өйрәнеп алды ул. Дәрескә әҙерлекһеҙ килһә: "Кисә һуңға тиклем гәзит сығарҙыҡ", - тип, "икеле"нән ҡотолоп ҡала. Мәктәп тирәһен һепереү, сәскә түтәлдәре ҡаҙыу, дөйөм өмәләрҙән дә шул сәбәп менән ситләшә килде.

Был шөғөлөнөң зыянын күргән осраҡтары ла булды, әлбиттә. Бер-ике тапҡыр уны хулиган малайҙар мөйөшкә ҡыҫты:

- Ә-һә, художник, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа, - тине мәктәптәге иң уҫал, боҙоҡ һәм көслө Мирсәйет-Мишка. - Хәҙер үҙеңдең һүрәтең стенала мәңгегә ҡаласаҡ. Минең йөҙрөктө ҙур итеп төшөргәнһең, татып ҡарарға тура килер уны, ысын тослоғон белер өсөн. Әйт һүҙеңде!

- Мин, ней, нимә, ҡушҡандарын эшләйем... Әлфиә әйтеп тора, шулай кәрәк, ошолайтып эшлә, тип... Мин эшләйем, үҙенән һора, - Идеал шыр ебәргәйне. Бәләне үҙенән ситкә борор өсөн барыһына ла әҙер ине.

- Иҫкәртәм, тағы миңә ҡағылһаң бынан ары, мейеңде күсерә һуғам, - йоҙроғон ғына еҫкәтте хулиган, ҡыйнаманы.

Ә уңыштары шөһрәтнамәләре тупламаһы мәнфәғәтен уҡырға ингәндә тәүге тапҡыр күрҙе Идеал. Бер фәндән дә алдыра алмағас, оҙаҡ уйлап торманы - документтарын сәнғәт училищеһына тапшырҙы. Аттестатында "өслө"һө булмағанға күрә, тик рәсем төшөрөү оҫталығы буйынса ғына һынау тотто. Элекке эштәрен алып килде, маҡтау ҡағыҙҙарын да комиссия алдына теҙеп һалды.

- Конкурс эшең ҡайтышыраҡ килеп сыҡҡан, абитуриент иптәш. Әллә ҡаушаныңмы? Улай ҙа булғылай. Тырышлығың күренә былай. Коллегалар менән кәңәшләштек тә, һуҙып "дүртле" ҡуябыҙ. Мәктәптәге ҡаҙаныштарыңды иҫәпкә алып, бер балл өҫтәйбеҙ. Конкурстан үтһәң, уҡырға рәхим ит, - тине комиссия рәйесе.

Уҡырға инде ул. "Мәктәптәге ҡаҙаныштарыңды иҫәпкә алып", тиеүе рәйестең, стена гәзитен биҙәүҙә уңыштарын дәлилләгән маҡтау ҡағыҙҙары ине.

Юҡҡа ғына "сәнғәт училищеһы" тип атамағандар икән уҡыу йортон. Бында һыҙмаҡлай белеү генә аҙ, ижади фекерләү ҡеүәһе лә талап ителә, имеш. Идеал өс йыл буйы килештереп һүрәт төшөрөүҙән тыш, унан тағы нимә талап итеүҙәрен аңлай алманы: "Оҡшатып кеше һынын эшләйем, натюрморт та, пейзаж да башҡаларҙыҡынан кәм сыҡмай, тик һүрәттәрең тере түгел, йән өрә белмәйһең, тиҙәр ҙә ләүкелдәйҙәр, быуынға төшөп. Умниктар", - тип йәне көйҙө.

Ҡаҙаныштары коллекцияһы училищела уҡыу дәүерендә тик өс данаға ғына артты. Баш ҡала күләмендә күргәҙмәлә ҡатнашҡаны өсөн ике тапҡыр диплом алды, ә өсөнсөһө - уҡыуҙы тамамлағанда, ғәҙәттә, һәммәһенә бирелә торған маҡтау ҡағыҙы ине. "Уҡыуҙа күрһәткән яуаплылығы өсөн", тип яҙылғайны унда. Күрәһең, оҙаҡ баш ватҡандарҙыр лайыҡлы сифатын эҙләп. Тапҡандар бит барыбер. Яҙғандар кеше ышандырырлыҡ итеп. Ярай, шуныһына ла рәхмәт.

* * *

Ҡулына диплом алып, яңы ғына эш башлаған йәш белгесте армияға саҡырҙылар. Идеал теләп, ашҡынып китте әрме сафына.

Күрше өлкәнең район үҙәге мәктәптәренең береһенә эшкә йүнәлтмә биргәйнеләр уға. Беренсе сентябрҙе тулҡынланып ҡаршы алды, тиһәк, артыҡ яңылышлыҡ булмаҫ. Тик шуны аныҡларға кәрәк: тулҡынланыуы ҡурҡыуҙан ине. Эске һиҙемләүе был юлы ла уны алдаманы. Тәүге дәрестән алып ике айға һуҙылған мөғәллимлек буйынса тәүге тәжрибәһе тамуҡҡа тиң булды. Идеал үҙе шулай уйланы, тамуҡтың ни икәнен белмәгән башы менән.

- Мин һыҙма фәне буйынса һеҙҙең уҡытыусығыҙ булам - Хөбөтдинов Идеал Салютович исем-шәрифем, - парта рәттәре буйлап хихилдашҡан, "пырх" итеп көлгән тауыштар йүгереп үтте. - Тәүҙә танышып үтәйек. Акимов. Әллә юҡмы ул? Аксенов. Ул да юҡмы ни? Борисова... Басырова... Сапарбаев... Ярбулов... Якименко... - класс журналындағы исемлекте баштан аҙағынаса уҡып сыҡты, тик бер кем дә тауыш бирмәне, "мин" тип аяғүрә лә баҫманы.

Исемлектең урта тошона еткәндә тамағы ҡарлығып, тауышы сыйнанҡырап сыға башлағайны, аҙаҡҡы фамилияларҙы саҡ әйтеп ҡуйҙы. "Якименко", - тине лә журналдан йөҙөн күтәрмәй, берауыҡ тын торҙо. Ҡылт иткән дә тауыш ишетмәне. "Бәлки, класта бер кем дә юҡтыр. Әллә һаташам инде... Нишләп тын алған да тауыш килмәй? Хәҙер күтәрелеп ҡарайым. Ысынлап та, булмаһа ине алдымда бер генә лә тере йән эйәһе... Эй, Раббым, ҡылсы изгелегеңде..." - Идеал мөғжизә көттө. Тик ул ғына ҡотҡара ала йәш уҡытыусыны сетерекле был хәлдән.

Мөғжизәне насип ҡылыусы булманы. Уға егерме йән күҙҙәрен тултырып текләп ултыра ине. Ҡыҙҙар һәм малайҙар. Унынсы синыф уҡыусылары.

- Эһ-һ-һем, - тамағын ҡырҙы уҡытыусы. - Әллә мин башҡа класҡа яңылыш ингәнменме, дуҫтар?

Яуап булманы.

**(Дауамы бар).**

ӘЙТЕШ

**Былтырғы йыл аҙағында Баймаҡ районының әҙәби көстәрен бер ҡорға ойошторған Рәйес Түләк исемендәге "Йәнгүҙәй" әҙәби-ижад берекмәһе ағзаларының "Бәйләнештә"ге төркөмөнә әйтеш башлап һүҙ генә өндәшеүем булды, шиғри романға торошло яҙмалар барлыҡҡа килде. Шуларҙың бер нисә көлиһмен "Киске Өфө" уҡыусыларына тәҡдим итергә булдым.**

# АС БУЛҺАҠ ТА АСЫҠМАНЫҠ,

## Өшөмәнек туңһаҡ та...

*Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:*
Салғыларҙы ашлайыҡ,
Әйҙә, әйтеш башлайыҡ,-
Ҡый-ғыпырҙы сабайыҡ,
Һарай башын ябайыҡ:
Нинә илебеҙ бай булһа ла,
Насар йәшәй халайыҡ?
Шуға яуап табайыҡ?

*Рәйсә Иҫәнбаева:*
"Ҡый - ғыпырҙы сабайыҡ",
Ҡыйлыҡҡа ауҙарайыҡ.
Тәңкит утына тотоп
Шулай юлын табайыҡ.
Уттан көслә һүҙ булһын,
Салғынан үткер булһын:
Ауыҙ йомоп тормайыҡ
Әйтер һүҙ аныҡ булһын,
Уйланырлыҡ һүҙ булһын,
Ғәмләнерлек һүҙ булһын.
Ҡурҡып, кәртә артынан
Әйтә торған булмаһын.

*Әкрәм Ҡәйепҡолов:*
Сәүит ваҡытындағынан
Йәшәйештәр меңәртыҡ.
Булған һайын ҡомһоҙлана
Шөкөр тип әйтмәй халыҡ.

*Рәмил Хәсәнов:*
Сәүит заманы яҡшы тип,
Хәҙер беҙ һағынабыҙ.
Ә барыбер күңел менән,
Аллаһҡа табынабыҙ.
Салғымды ашлаған инем дә,
Һабы ҡураған, кипкән.
Тормозыма нык баҫҡанмын,
Колодкаһы йәбешкән.
Әйтер һүҙем күп ине лә,
Хәтерҙән сығып бөткән.
Хәҙер йыйып булыр микән,
Сығып оскан фекерҙе.
Мынау ҡороғор вирусы,
Зиһенемде бөтөрҙө.
Әхмәр ҡусты үҙе әйткәс,
Тырыштырып ҡарармын.
Салғымды елкәмә һалып
Өмәһенә барырмын.

*Мансур Рәхимғолов:*
Әкрәм ҡустыға һүҙем бар,
Ней үпкәң бар СССР-ға,
Әллә күршең булып коммунист
Ыҙалаттымы шул осорҙа?
Мин аңлайым нисек итеп
Тәҙәлгәнен СССР,
Тауыҡ һымаҡ тибенмәйек -
Үткән инде ул осор.
Урман ҡырҡһаң табы оса,
Рак та бөтмәй ҡырҡмайса,
Бөтә нәмә бушлай булды,
Йәшәнек беҙ ҡурҡмайса.
Көл һибеүгә барып еткәс,
Һинең хәлең ҡатмарлы.
Пенсионерҙар сүплек соҡой,
Сығып ҡара хаҡтарҙы...

*Рәмил Хәсәнов:*
Совет заманын хурларға,
Барыбер күңел тартмай.
Заманаһы һүгеү менән,
Минең бит бәсем артмай.
Әҙәм шундай, яҡшылыҡты
Ниңәләр тиҙ онота.
Шайтан күреп бәгзеләрҙе,
Үҙ юлына ҡоторта.

*Мансур Рәхимғолов:*
Әйт, тигәстен, әйтәйем,
Һүҙ йомғағын сисәйем,
Дуҫтар менән сәйәсәтте
Тикшереүгә күсәйем.
Ахры заман килер, тиеп,
Әйтәләр ине бер саҡ,
Әммә уны кем уйлаған
Үҙен тиеп күрәсәк?
Ҡайҙан тотоп башларға ла,
Уйланып, ауырһынам,
Ҡайҙа ҡарама тоҙаҡ,-
Һыҙлана бауыр ғынам.
СССР-ҙы ҡолаттылар,
Бар ябырын яптылар,
Үҙҙәренең арҡаһына
Һарыҡ тунын ҡаптылар...
... Ҡот осҡос ҡырылыш бара:
Ҡырылалар кешеләр,
Урман-ҡырға үләт һала,-
Эшләй беҙҙең ишеләр.
Яндырып бар тирә-яҡты,
Малды итеп аҙыҡһыҙ,
Үҙебеҙ ҙә мал хәлендә,
Бөгөн тороп ҡалдыҡ беҙ.

*Әкрәм Ҡәйепҡолов:*
Мансур,
Сәүиттәрҙе һағынһаң да
Кире теләмәҫ инең.
Үҙең түгел, балаларың да
Колхозға инмәҫ ине.
Туҡһанынсы йылдарҙа уҡ
Буштың атаһы үлде.
Ялҡауҙарға юл ябылды,
Йүнселгә ваҡыт килде.
Нимә булды һинә буш?
Буш булды бары кукиш.
Эш хаҡынан халыҡтың
Белдермәйсә тоттолар,
Йомшаҡ йәйеп оттолар.
Иген сәстем яҙ көнө,
Һуктым уны көҙ көнө.
Фуфайка, кирза итек,
Башҡаһы беҙгә киртек.

*Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:*
Һүҙем дауам итәйем,
Фекер юллап китәйем:
Был бит, дуҫтар, эш түгел,
Хәҙер ҡыштар ҡыш түгел,
Тота ла ямғыр яуа,
Ҡыйыҡтан тамсы тама;
Яҙы яҙмы, әйтәгүр,
Йәйҙәре лә йәй түгел.
Ҡайҙа табан барабыҙ,
Бармы һуң бер сарабыҙ?

*Мансур Рәхимғолов:*
Иң енел сара шунда-
Һарыҡ булыу яранда,
Ҡуар-тамға һуктырып,
Әйтеп - Хоҙай ҡулында!

*Рәмил Хәсәнов:*
Ярай, тием улай булғас,
Мин дә әйтеп ҡалайым.
Янғыҙ башым ҡаңғырғансы,
Һеҙҙең менән булайым.
Һарыҡҡа уҡ тинләшмәйек,
Аллаһҡа инанайыҡ.
Шөкөр итеп, һәр көнөнә,
Күңелдән ҡыуанайыҡ.

*Әкрәм Ҡәйепҡолов:*
Үткәндәрҙе һағынмайым ,
Көл һипкәнмен артынан.
Һағынырлыҡ әҙәмдәргә
Ҡарайым гел аптырап.

*Рәйсә Иҫәнбаева:*
Ир-аттарҙың алдарынан
Сығып һөйләү оҡшамаҫ.
Ә шулай ҙа булғандарҙан
Әйтер һүҙ әйтмәй булмаҫ.
Сәүит ҡолап, утыҙ йыллап
Йәшәгәс һағынабыҙ,
Ностальгия менән, дуҫтар,
Ҡанатһыҙ ҡағынабыҙ.
Күпме баҫыу әрем менән
Ҡылған менән баҫылған.
Алыпһатарҙар күпмеһен
Аҡсаға алып ҡалған.
Шөкөр, тибеҙ, пай ерена
Бирәләр икән ҡырлыҡ.
Вакцина эшләткәндәргә
Бирелә таҙа ашлыҡ.
Шул ерҙә сәүит менән
Бөгөнгө көн араһын
Шөкөр менән тигеҙләйбеҙ,
Аҙаҡ ҡайҙа бараһың.

*Нурия Мортазина:*
Әхмәр ағай йомаҡ ҡойҙо
Ник насар йәшәй халыҡ?
Насар йәшәмәҫкә халыҡ-
Түрәләр китте байып.
Һәр түрәгә ер кәрәк,
Барына алтын кәрәк.
Ялан-ҡырҙар ҡазыла
Көтөүлектәр һөрөлә.
Иген сәсһә, халҡымдың
Ҡоролоҡ ала алҡымдан;
Күтәрелһә мал көтөп-
Ауырыу сыға ҡалҡып.
Әле спид, рак һәм грипп
Хәҙер ковид, дерматит.
Ҡайҙан хәлләнһен халыҡ
Ауырыуҙан баш йырып?
Газын, нефтен иркенләп
Тотона алмай, хаҡ ҡыйбат!
Хәләл итен һәм һөтөн
Һата йәшереп, боҫоп.
Ҡайҙан байыһын халыҡ,
Торғастар бушҡа алып.
Хәләл көс менән тапҡандан
Булмағас файҙа күреп?

*Рәйсә Иҫәнбаева:*
Зарланабыҙ нинә ярлы
Йәшәй икән был халыҡ.
Байыуы юлдарын бары
Булмаймы һуң бер табып.
Зарланмайыҡ, зарланыуға
Ҡалған тиеп уйларҙар.
Үҙ туҡһаны барына ла,
Туҡһан булып тойолмаҫ.
Күпме ирҙәр Себер китә
Биштәр аҫып иңенә.
Киткән хата сәйәсәттә,
Өндәшмәгән берәү ҙә.
Янғыҙ ҡарға яҙ килтермәй,
Хаталандыҡ шул уйҙа.
Кәрәк булған берләшеүҙәр,
Фекер туплап бар ерҙә.
Хәҙер инде беҙ терәлдек
Ярыҡ ҡына ялғашҡа.
Яу үткәс, ҡорал күтәрҙек,
Яраланғас яҙмыштар.
Колхоз бөттө, совхоз бөттө,
Күпме ҡул эшһеҙ ҡалды.
Эш табыуҙан тәңөлөп,
Себергә тип юлланды.
Сәүит заманы барына
Туләүһеҙ уҡыу бирҙе.
Хәҙер инде уҡыт бына,
Булһа аҡса кеҫәңдә.
Ни тиһәң дә һағыныуҙар
Беҙҙе ташлап киталмай.
Ул барыбер өмөт ҡуя,
Бәлки яҡшырыр, малай...

*Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:*
Артабан да китәйек,
Һүҙҙе дауам итәйек:
Буранбайҙа тыуҙым да,
Һаҡмар һыуын эстем мин;
Ун бер бала араһында
Урта тошта үҫтем мин.
Беләһегеҙ, ул заманда
Ризыҡ булманы артыҡ:
Ит тә, ҡорот, май һәм икмәк
Шәкәр, үҙринйә, картуф...
Әммә һис тә сытыйманыҡ,
Алмаш кейҙек кейемде.
Алма алып ҡайтһа әсәй,
Ат менгәндәй һөйөндөк.
Һорауым шул: нинә хәҙер
Ризыҡ өҫкә ауһа ла,
Рәхәтлектәр өҫтөбөҙгә
Ямғыр булып яуһа ла,--
Һәр ғаиләлә ике бала,
Ошо түгелме бәлә?
Ярты миллиондан ашыу
Капитал әсәләргә.
Әммә тыуым һис тә артмай,
Беҙгә һуң ни эшләргә?

*Насип һаҡмаров:*
Мин дә күнәкләп алманы
Ашай инем кинәнеп.
Урыҫҡа бер тауыҡ биреп,
Ала инек инәлеп.
Һуғанын да сәсмәй инек ,
Сәсмәнек ҡыярын да.
Ит, картуфҡа алыштырып
Йәшәнек ҡыя ғына.
Ә күңелдәр нык көр ине,
Йырланыҡ, бейенек тә.
Киләсәк йылмайып торҙо,
Хыял - иң-иң бейектә.
Балалар ҙа тыуып торҙо,
Берәү түгел, ун бишләп.
Ағай үсһә, миңә күсте
Ямаулы тұҙмаҫ бишмәт.
Утын быстыҡ, утын ярҙыҡ,
Саптыҡ шул бесәнен дә.
60 һумын етә ине,
Һәммәһе, бөтәһенә.
Әле балалар тауышы
Шымды шул ауылдарҙа.
Һирәк-һаяҡ ишетелә
Иҫерек ғауылдауҙар.
Сөнки һунғы сыраҡ һүндө
Өмөт тигән шәмдәлдә.
Нисек көн итергә, тиеп
Уйлайҙар һәр ғаиләлә.
Кешене өмөт йәшәтә.
Хыял күтәрә күккә.
Бөгөн өҫкә тун кейһәк тә,
Күренеп тора үпкә.
Кредит һура, һалымдары,
ЖКХ һәм сүп-сары.
Эше лә юҡ, бете лә юҡ,
Кемдер бай, кемдер ярлы.
Байҙарға бала кәрәкмәй,
Ярлыға - артыҡ ауыҙ.
Яуап бирҙем кеүек тә бит,
Туҡталып булмай, яуыҙ,
Һөйләй ҙә һөйләй ауыҙ.

*Рәйсә Иҫәнбаева:*
Ә шулай ҙа үткәнде
Һағынабыҙ, егеттәр.
Һеҙҙең кеүек һағынғандар
Һанап бөткөһөҙ куптәр.
Ас булһаҡ та асыҡманыҡ,
Өшөмәнек туңһаҡ та.
Бер ерҙә булманыҡ артыҡ,
Кәрәк булдыҡ һәр саҡта.
Шулай йәшәнегеҙ һеҙ ҙә,
Шулай йәшәнек беҙ ҙә.
Зарланыу булманы һеҙҙә,
Булманы ул беҙҙә лә.
Клуб ишектәре асып,
Саҡырып торҙо кисен.
Йәштәр йәрөй кинәт асып,
Түгәлер гармун хисен.
Үткән тормош бит, егеттәр,
Йәшлекте һағындыра.
Булһа ла ул ниндәй генә
Күңелде һыҙландыра.
Хәҙерге заман бизмәне
Аҡсала иҫәпләнә.
Аҡсалы бай - балаһыҙ бай,
Ярлыға бала һыймай.

*Рәмил Хәсәнов:*
Буранбайҙа тыумаһам да,
Һаҡмар һыуын мин дә эстем.
Беҙҙең өҫтән "сәптергәнде",
Эскәнһең икән, ҡустым.
Һеҙҙә лә 11 бала,
Беҙҙә лә 11 бала.
Ике футбол командаһы,
Иҫәбенә бит тула.
Әхмәр, һин дә һағынаһың,
Насип дуҫ та һағына.
Яланаяҡ ҡайтыр инем,
Мин дә бала сағыма.
Әкрәм ағай СССР-ҙың,
Тетмәһен генә тетте.
Илебеҙ башлыҡтарының,
Арт яҡтарына типте.
Төҫтәрҙең була ҡараһы,
Була унын ағы ла.
Гел насарҙан тормай тормош,
Була яҡшы яғы ла.
Совет мәктәбенә йөрөп,
Уҡырға беҙ өйрәндек.
Тыуған илем, ерем тигән,
Төшөнсәләрҙе белдек.
Насар булды микән әллә,
Илһөйәрлек тигән һүҙ.
Былар кемгә оҡшамайҙыр,
Әйтһәң һүҙ ҙә, төртһәң күҙ.
Насарлыҡты ғына күрә,
Күңеле зәғиф әҙәм.
Матур һүҙҙәр яҙғым килә,
Ҡулыма алһам ҡәләм.
Матурлыҡ доньяны ҡотҡарыр,
Тиеп әйткән бит берәү.
Күңеленән матурлығы,
Үҙенә ныҡлы терәү.

*Рәйсә Иҫәнбаева:*
Егеттәр, сәсән телдәр,
Төймәләрҙе тотоғоҙ,
Интернетта тел хаҡында
Матур әйтеш ҡороғоҙ.
Кем башҡорт була икән,
Кем телен белә икән
Кем туған теленең
Ҡәҙерен һиҙә икән?
Нинә кәмей милләтебеҙ,
Сәбәбе низә икән?
Нинә башҡорт теленең
Хаҡ бәҫе төшә икән?
Беҙ һуң кемдәрҙән кәмбеҙ,
Кем сөйәлен иҙгәнбеҙ,
Кемдең ерен тартып алып
Беҙҙеке ул тигәнбеҙ?
Башҡортса йыр йырлаған,
Ҡурай тотоп моң һуҙған,
Тик үҙ илен ташлаған,
Тик үҙ ерен ташлаған,
Башҡортмон тип атаған
Башҡорт була аламы?
Бишек йырын онотҡан,
Әкиәт телен онотҡан,
Башҡорт ашын ашаған,
Тик бит төмен онотҡан
Башҡорт була аламы?
Ниндәй ярҙы үтһәң дә,
Ниндәй үргә менһәң дә,
Барыһынан түбәнгә
Төшөрәләр кешеләр.
Аҙаҡ таҡтаһын ҡаплап
Доға уҡып ҡуялар.
Һин кем генә булһаң да
Тегендә тик бер баһа.
Нинә ҡыҙҙар ситкә китә
Сит милләтте үҙ итә,
Сит милләт балаһы үҫә.
Ҡолаҡ ярыр һүҙ әйтә:
Атай- әсәйҙәр нинә
Пап-мамаға әйләнә?
Бабуля -өләсәйҙәр,
Дедуля- ҡартатайҙар,
Бына шуға тыныс нинә
Әсәй-атай ҡарайҙар?

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ИНТЕРНЕТТАН



# НИНДӘЙ ТӨҪТӨ ЯРАТАҺЫҢ?

■ Кешенең холҡон уның ятҡан төҫөнә ҡарап билдәләү психологияла күптән ҡулланыла. Әммә уның классификацияһы дөрөҫ түгел, тип билдәләй Ульрих университеты ғалимдары. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, мәҫәлән, аҡ төҫ паклыҡты, яҡшы холоҡто түгел, ә кешенең консерваторлығын билдәләй. Ҡара төҫтө тиҙ генә асылып бармаған кешеләр һайлай. Ҡыҙыл төҫ эгоизм тураһында һөйләй. Үҙен тулыһынса гармонияла тойған кеше зәңгәр төҫтө һайлауҫан. Һары төҫтө йомшаҡ күңелле кешеләр һайлай, улар менән идара итеүе лә еңел. Алһыу төҫ елбәҙәклек тураһында белдерә.

■ Үҫмерҙәр араһында үткәрелгән һорау алыуҙар белгестәргә балаларға әсәләре менән мөнәсәбәттәрендә нимә мөһимерәк икәнлеген асыҡларға мөмкинлек биргән. АҠШ ғалимдарының Иҡтисади һәм социаль тикшеренеүҙәр буйынса милли совет ярҙамында үткәргән тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, яҡшы әсәй менән тәүлектең бөтә ваҡытында ла һөйләшергә була, ул улының йәки ҡыҙының фекерен ихтирам итә, уның менән ғәҙел һәм балаһы хаталанһа ла, уны ятатыуҙан туҡтамай.

■ Һеҙ үҙ-үҙегеҙ менән һөйләшәһегеҙме? Торонто психологтары әйтеүенсә, үҙүҙең менән эске диалог алып барыу хатта файҙалы ла икән. Был эмоцияларҙы контролдә тоторға һәм дөрөҫ булмаған ҡарар ҡабул итеүҙән һаҡлай. Тикшеренеү үткәреүселәрҙең фекеренсә, кеше үҙен контролдә тоторға тырышып, үҙ-үҙе менән аралаша башлай. Эске тауыш бигерәк тә тиҙ ҡыҙып һәм тәьсирләнеп барыусан кешеләргә ҙур ярҙам күрһәтә.

■ Ғалимдар корица майлы аҙыҡтың кеше организмына кире тәьсирен кәметеү һәләтенә эйә булыуын асыҡлаған. Табиптар әйтеүенсә, төрлө тәмләткестәр нигеҙендә төҙөлгән диеталар күпкә тәьсирлерәк һәм файҙалыраҡ. Пенсильвания университеты (АҠШ) хеҙмәткәре Шейла Вест белдереүенсә, майлы ризыҡ ҡанда триглицеридтар кимәленең күтәрелеүенә килтерә. Был йыш ҡабатланып торһа, йөрәк ауырыуҙары барлыҡҡа килеүе ихтимал. Быны булдырмау өсөн майлы аҙыҡҡа традицион һинд кухняһына ҡараған тәмләткестәр, мәҫәлән, куркума йәки корица өҫтәргә кәрәк, ти белгестәр.

■ Яңыраҡ үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-береһе менән бәйле булыуы быға тиклем иҫбатланған булған. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стресс һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был һөҙөмтә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ водителдәрҙә күберәк күҙәтелә. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Скотт-Паркер.

ШУНДАЙ СИР БАР!

# УЛ... АЯҠ АҪТЫНДА ҒЫНА

**Элегерәк, мин бала саҡта, халыҡта ошондай бер ырым йөрөгәне хәтеремдә. Сысҡан кимергән берәй аҙыҡты ашаһаң, тештәрең ныҡ була, имеш... Шундай-былдай юрауҙарға беҙ, ысынлап та, ышана торғайныҡ. Хәҙерге көн ана шуны иҫләһәм, тәндәрем эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Ни өсөн? Юҡ, сысҡандан ерәнгәндән түгел, ә ифрат ҡурҡыныс, хатта үлемесле сир йоҡтороу ихтималлығы булыуҙан! Боронғо замандарҙа аҙыҡ-түлек наҡыҫ булғанлыҡтан да килеп сыҡҡандыр инде был юрау...**



Ҡуйбышев хәрби медицина факультетында уҡыған осорҙа сығышы Әбйәлил районынан булған бер курсташым ана шул сир менән ауырып китте. Йәйге каникул мәлендә ауылында йоҡтороп алып килгән тинеләр. Бик ауыр хәлдә округ госпиталенең реанимация бүлегендә дауаланып (хатта "яһалма бөйөр" аппараты ҡулландылар уға), көскә төҙәлеп китте. Был инфекциянан үлем осрағы йышлығын белгән булараҡ, беҙ, курсанттар (буласаҡ хәрби табиптар), хатта был иптәшебеҙҙе юғалтып ҡуйыуҙан нығ ҡына ҡурҡҡайныҡ та...

Сысҡан биҙгәге тип аталған әлеге йоғошло сир иң тәүҙә 1913 йылда Алыҫ Көнсығышта табылған. Был ауырыу, әлбиттә, электән, башҡа ерҙәрҙә лә булған инде, тик шул осор табиптар тарафынан ул айырым сир тип билдәләнгән. Һуңынан был инфекцияны Төньяҡ Ҡытайҙа, Урал, Волга буйында ла тапҡандар. Бөгөнгө көндә Башҡортостанда, айырыуса, Урал аръяғы райондарында киң таралған тип һанала (башта иҫкә алған дуҫым йәшәгән Әбйәлил районы ла тап ана шул зонаға тап килә).

Сысҡан биҙгәге (мышиная лихорадка) медицинала "Геморрагическая лихорадка с почечным синдромом" (ГЛПС) тип йөрөтөлә. Ҡан тамырҙары, бөйөр капиллярҙары стенкаһының ҡуҙғынәктәренә зыян килтергән был сирҙең вирус этиологиялы (сәбәпле) булыуы 1940 йылдарҙа Совет ғалимдары тарафынан асылған. Ә 1976 йыл лаборатория шарттарында вирусты ҡыр сысҡанының үпкәһендә табалар. Был сир ҡыр сысҡанынан ғына түгел, башҡа төр кимереүселәр аша таралыуы ла мөмкин.

Ауырыуҙы йоҡтороусылар ауыл ерендә күпкә күберәк (ни өсөндер, ир кешеләр йышыраҡ ауырый). Инфекция йоҡтороу осраҡтарының иң көсәйгән сағы - йәй башында һәм көҙҙөң октябрь айҙарына тура килә, әммә әй шарттарында йыл әйләнәһенә лә булыуы мөмкин. Эпидемик миҙгелдең йәй башында кешеләр ҡырҙа эшләй башлауы һәм көҙ уныш йыйыу осорона тап килгәнлеге аңлашылып тора. Шулай уҡ көндәр һыуына башлау менән, сысҡан-маҙар йылы урын эҙләп, кеше торлағына килеп оялауҫан. Шуға күрәләр ҙә, көҙ урталарында бындай ауырыуҙың йышайыуы күҙәтелә. Сысҡандарҙың шайығы тейгән (әлеге кимерелгән аҙыҡ) ашамлыҡты ҡулланыу, уларҙың оло һәм кесе ярауы һеңгән туҙан менән һулау аша йоға был сир.

Кеше организмына вирус килеп эләккәс, инкубация осоро (йоҡторғандан алып, сирҙең беленә башлауына тиклем булған ваҡыт аралығы) бер аҙнанан 35 көнгә тиклем барыуы мөмкин. Кеше организмының иммун системаһы бында ҙур ғына роль уйнай. Иммунитеты көсһөҙ булғандар, әлбиттә, тиҙ генә бирешә һала. Ауырыу киҫкен рәүештә башлана (унан алда бер-ике көн тиҙ арыусанлыҡ, тән иттәре һыҙлауы, берәр градуска температура күтәрелеүе һымаҡ продромаль осор булыуы ла мөмкин). Тән температураһының кинәт кенә 38-40 градуска етеүе, шул уҡ ваҡытта өшөп ҡалтыраныу, баш, арҡа, бил ауыртыуҙар, күҙҙәрҙең күреүе насарайып көңгөртләнеүе, яҡтылыҡтан ҡурҡыу (светобоязнь), күҙ алдында "селтәр" булыуы һымаҡ симптомдар кешене ошо ҡурҡыныс сир хаҡында уйланыуға этәрергә тейеш. Уҡшытыу, йыш (хатта ҡан ҡатыш) ҡоҫтороуҙар, танау ҡанауы, эсәк буйына ҡан әләгеү сәбәпле оло ярауҙың дегет төҫөнә инеп ҡарайыуы лә күҙәтелә шул осорҙа. Сысҡан тейгән әйбер йә аҙыҡ менән контактта булған кешегә иң беренсе нәүбәттә быны ошо сир хаҡында иҫләү мотлаҡ. Ғәҙәттә, табиптар "Сысҡан-маҙар менән контактта булманығыҙмы?" йә иһә "Өйөгөҙҙә, баҡсағыҙҙа сысҡан бармы?" тигән һымағыраҡ һорауҙар биреүсән ул. Әммә, табипҡа ҡаралырға килгән ауырыу, шундай һорау бирелгәнен көтөп тә тормаҫтан, үҙенең бер-ике аҙна элек, әйтәйек, баҡса өйөн сысҡан ояһынан таҙартыуы йә иһә сысҡан тейгән аҙыҡты ашауы хаҡында әйтергә тартынмаҫҡа тейеш.

Бит остары, муйын, күкрәк ситлегенең өҫкө өлөшө алһыуланып тороуы, күҙ алмалары ҡыҙарыуы ла быны ошо хаҡта уйланыуға этәрергә тейеш. Ә инде тәндә, айырыуса, ҡултыҡ аҫтарында ҡан һауған нөктәләрҙең күренә башлауы, бил ауыртыуҙар был сирҙең артабанғы көсәйә барыуына ишара. Башланғыс ошо осор бер нисә көнгә һуҙылыуы мөмкин. Шунан бер аҙ ғына ауырыуҙың хәле еңеләйеп ҡалған һымаҡ та булыуы ихтимал. Әммә, был сирҙең киләһе (олигурия) стадияһына күсеүе генә. Олигурия - һейҙек әҙәйеүе. Уның хатта бөтөнләйгә туҡталыуы (анурия) ла мөмкин. Бөйөр капиллярҙары стенкаһы зарарланыу сәбәпле һейҙек бүленеп сығыу процесы боҙолоуы - ифрат та етди симптом! Киләһе стадияһында (полиурия) һейҙектең күпләп бүленеп сыға башлауы күҙәтелә (тәүлегенә 5-8 литрға барып етеүе мөмкин). Күҙәнәктәрҙең эшмәкәрлеген сафта тотоусы һыу-электролит балансы боҙолоу, бөйөр капиллярҙарының емерелеүе сәбәпле, тәнгә кәрәкле матдәләр - аҡһымдар, азот, һәр төрлө микроэлементтар һейҙек менән сығарып ташлана. Шулай уҡ, ағзаларҙың ваҡ ҡан тамырҙары зарарланыуы йыш ҡына мейегә, йөрәккә, бөйөрҙәргә һәм башҡа ойгандарға ҡан һауыуға килтерә. Ошо стадияла сирленең хәле ифрат та ауырлаша. Ике-өс аҙнанан әкрен генә йүнәлеү процесы башлана. Әммә, башта иҫкәртеүебеҙсә, сирҙең һәр саҡ һауығыу менән тамамланмауы ла бар. Медицина теле менән әйткәндә, прогноз - ифрат та етди...

Грипп, КОВИДтар менән бер рәттән, телевидениеның "бегущая строка"һында ла йыш ҡына "быйыл фәләнсә кеше сысҡан биҙгәге менән сирләгән" тип юҡҡа ғына яҙмайҙар бит. Дауаханаға бармай, өй шарттарында ауырығандарҙың үлем осрағы кимәле - 15 процентҡа барып етеүе хаҡында статистик мәғлүмәттәр бар. Шунлыҡтан, сирләп китеү менән мөмкин тиклем иртәрәк табип ярҙамына мөрәжәғәт итеү мотлаҡ. Бәйғәмбәребеҙҙән Аллаһ Тәғәләнең бер ауырыуҙы ла дауаһыҙ барлыҡҡа килтермәгәне (үлемдән башҡа) хаҡында риүәйәт бар. Тик әҙәм балаһы әмәлләү серҙәренең күптәрен белеп етмәй. Раббыбыҙ ихтыяры менән был сирҙе дауалау йәһәтенән бөгөнгө медицина һәүетемсә алға киткән. Бөйөр эшмәкәрлеге насарайған (йә бөтөнләйгә туҡталған) осраҡта стационар шарттарында гемодиализ ("яһалма бөйөр" аппараты ярҙамында ҡанды таҙартыу), һәр төрлө инфузион терапия (вена тамырына кәрәкле матдәләр ҡойоу) ысулдары ҡулланып, кешене тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыу мөмкинлеге бар.

Баҡсала, ауыл өйҙәрендә кимереүселәргә ҡаршы көрәш (дератизация), шәхси гигиена талаптарын үтәү (аҙыҡ-түлекте сысҡан инмәслек герметик һауыттарҙа һаҡлау, кимереүселәр йөрөгән урындарҙа дезинфекция үткәреү, улар тейгән ашамлыҡтарҙы ташлау йә иһә ҡайнар һыу менән сайыу һ.б.) бына ошо ҡурҡыныс ауырыуҙан ҡотолорға булышлыҡ итер. Был мәсәләләр буйынса санитар-эпидемиология хеҙмәткәрҙәренә барып, консультация алыу хәйерле.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺАҠЛАНЫҒЫҘ: "ОМИКРОН" КИЛӘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе.**

Документтың яңы редакцияһына ярашлы, һуңыраҡ ваҡытҡа һәм махсус күрһәтмәгә тиклем күмәк физкультура һәм мәҙәни саралар (фестивалдәр, смотрҙар, конкурстар) уҙғарыу күсерелә. 30-ҙан ашыу хеҙмәткәр эшләгән йәки саҡырылған хеҙмәткәрҙәр ҡатнашлығында хеҙмәт коллективтары йыйылыштарын һәм башҡа күмәк саралар уҙғарыу тыйыла. Дәүләт һәм муниципаль власть органдары етәкселәре граждандарҙы шәхси ҡабул итеү ойоштороуҙан һәм үткәреүҙән тыйылырға тейеш (уларҙың ризалығы буйынса). Шулай уҡ кәңәшмәләр ҙә онлайн үткәрелергә тейеш. 17 ғинуарҙа Башҡортостан уҡыусылары ҡышҡы каникулдан сыҡты. Республика етәксеһе Радий Хәбиров шулай уҡ белем биреү учреждениеларында коронавирусҡа ҡаршы сараларҙы үтәүҙе көсәйтергә ҡушты. "Ковидҡа ҡаршы инспекторҙар эшкә сыҡты, шулай уҡ методик тәҡдимдәрҙе яңырттыҡ, ата-әсәләргә температураһы булған баланы уҡырға ебәреү тыйыла", - тип аңлатты республиканың Мәғариф министрлығы вәкиле. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, сир сығанаҡтары теркәлгән мәктәптәр ябылырға тейеш.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 12 ғинуарҙа Рәсәй Президенты Владимир Путин федераль Хөкүмәт ағзалары менән кәңәшмәлә һаулыҡ һаҡлау системаһының "омикрон" штамы менән көрәшкә әҙерлеген тәьмин итергә ҡушҡайны. **Ошо көндәрҙә Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко тажвәхмәттең яңы штамының билдәләрен атаны.** Сирҙең башҡаларҙан айырмаһы бар: баш ауыртa, сөсөртә, хәлһеҙлек һәм тымау күҙәтелә. Һирәк кенә енел сирләү билдәләре лә булыуы мөмкин, йәғни аныҡ билдәләр юҡ, әммә кеше үҙен сирле кеүек тоя. Был бигерәк тә иммунитеты булған пациенттарҙа йыш күҙәтелә. Диагностиканың өҫтәмә ысулы булып температура үлсәү, тестар тора. "Диагнозды медицина хеҙмәткәре ҡуйырға тейеш", - ти Мурашко. Уның һүҙҙәренсә, сирҙең йәшерен үтеү осоро ҡыҫҡарған. Ул ике-биш көн тәшкил итә. Һуңынан 3-4 көн эҙемтәләр барлыҡҡа килеүе, сирҙең киҫкен ваҡытында тын алыуы ауырлашыуы ихтимал. "Ғәҙәттә, организмыбыҙ минутына 21-22 тапҡыр тын алыу хәрәкәте яһай, унан күберәк булһа, тын быуылыу тип атала. Был хәүефле, сирҙең көсәйеүен, хәл-торошто насарланыуын күрһәткән симптом. Температураның оҙаҡ ваҡыт булыуы ла насар билдә. Шуға күрә, хәл насарайғанда өҫтәмә медицина консультацияһы мотлаҡ", - ти Мурашко.

Әлеге ваҡыттағы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, республикала төбәктән ситкә сыҡмаһалар ҙа тажвәхмәттең яңы "омикрон" штамын эләктергән бер нисә кеше асыҡланған. **"Омикрон штамы быға тиклем булғандарынан ҡурҡынысыраҡмы?" тигән һорауға Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры Нәүфәл Зәһиҙуллин яуап бирә:** "Яңы штамдың йоғошлолоғо 7-10 тапҡырға юғарыраҡ, шуға күрә был сир менән күптәр ауырыясаҡ. Сирләүселәрҙә мускулдар көсһеҙләнеүе, йүткереү (шул иҫәптән еүеш йүтәл), тымау, хәлһеҙлек күҙәтелә. Омикрон менән балалар ҙа сирләүе ихтимал. Бик йыш тын юлдары зарарлана, ҡурылдай һәм трахея зыян күрә. Яңы штамм тажвәхмәткә ҡарағанда ла тиҙерәк тарала. Шуға күрә ябай битлектәр һәр саҡ ҡотҡарып ҡала алмай. Бигерәк тә ул йөрәк, үпкә, бөйөрҙәре сирлеләр өсөн хәүефле. Ә вакцинация, һис шикһеҙ, битлек кейеү һәм социаль дистанция һаҡлау кеүек үк, сирҙең ауыр үтеүенән һәм үлем осраҡтарынан ҡотҡарып ҡала. Кеше күп йыйылған урындар, бигерәк тә битлекһеҙ, хәүеф тыуҙыра. Әгәр 10 кеше бергә йыйылып, уларҙың береһе генә сирле булһа, ул башҡаларға йоҡтора. Шуға күрә ни тиклем бәйләнештәр әҙерәк, шул тиклем яҡшыраҡ. Сирләүселәр һаны ике-өс аҙнанан арта башлаясаҡ, тип көтөлә".

**Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш эпидемиологы, Республика клиник йоғошло ауырыуҙар дауаханаһының баш табибы Азат Мөхәмәтйәнов һүҙҙәренсә,** "омикрон" менән сирләгәндә хәлһеҙлек, баш ауыртыу, һирәгерәк осраҡта еҫ һәм тәм һиҙеү һәләтен юғалтыу кеүек билдәләр күҙәтелә. "Коронавирустың яңы штамы киҫкен респиратор вирус инфекцияһы билдәләренә оҡшаш: температура 38 градусҡаса күтәрелә, тән һыҙлай, тымау башлана, тамаҡ ҡыҫыта, аппетит юғала. Балаларҙың тәненә тимгелдәр сығыуы ихтимал. Күптәр ауырыуҙы еңел формала үткәрә, әммә "омикрон" тиҙ тарала, ҡурылдайҙы, үпкәне тиҙ зарарлай. Халыҡ күп йыйылған урындарҙа сир йоҡтороу ихтималлығы арта, сөнки омикрон биш тапҡырға тиҙерәк тарала", - тип белдерҙе Азат Мөхәмәтйәнов.

ХӘТЕРКИТАП

## Тишек шөмән

Беҙ бәләкәй саҡта тау шыуырға хәҙерге ваҡыттағы кеүек саналар юҡ ине. Миңә Риф ағайым тишек шөмән яһап бирә торғайны. Уны яһау өсөн боҙ туңғас, декабрь айҙарында, Күндерәк йылғаһынан ҙур киҫәк боҙ алып ҡайталар ине. Шул боҙҙо тәүҙә матур итеп тигеҙләйҙәр. Уртаһын саҡ ҡына соҡорлайҙар. Боҙҙоң ошо соҡор урынына һыйырҙың йылы ғына тиҙәген һылап, өҫтөнә таҙа ғына һалам һалалар. Ул матур ғына булып туңа. Ағайым осло тимерҙе мейестә ҡыҙҙыра ла, теге боҙҙо тишеп, бау үткәрә. Бына һиңә тишек шөмән. Ошо тишек шөмәндә һөйрәп, тауға барабыҙ. Шөмән бик шәп шыуа торғайны. Тишек шөмән ауылдағы бөтә балаларҙа ла булды. Ләкин уның ғүмере бик ҡыҫҡа: тиҙ генә ярыла. Шуға күрә уның атамаһы ла тишек шөмәндәр инде. Ә шулай ҙа беҙ күңелле йөшәнек. Хәҙер ул тишек шөмәндә оноттолар инде...

## Йөн туп

Яҙ етеү менән беҙ, балалар, асылып килгән түмәләскә туп менән уйнарға барабыҙ. Уның менән "Кем тиҙерәк", "Өйрәк атыш", "Кем зирәк", "Лапта" һәм башҡа төрлө уйындар уйнайбыҙ. Иң яратҡан уйыныбыҙ лапта ине. Бәләкәй генә түмәләстә өлкәндәр ҙә, балалар ҙа бар. Өлкәндәр кисен тағы ошо түмәләскә уйынға сыға.

Был уйындарҙы уйнар өсөн туп кәрәк, тик уны ҡайҙан алаһың инде. Ағайым миңә апрель айҙарында һыйырҙың баҡтаһы ҡойола башлағас, туп яһап бирә. Һыйырҙың өҫтөн йылы ғына һыу менән еүешләп ышҡый ине. Шуны йомарлап әүәләй торғас, туп килеп сыға. Был туп ныҡ була. Һуғып ебәрһәң, йыраҡҡа осоп китә. Ләкин ул бик ҙур түгел һәм бик үк юғарыға һикермәй ине.

Бына шулай әмәлен табып, бик күңелле йәшәй белгәнбеҙ. Шул осорҙар - иң-иң матур иҫтәлектәр. Атайәсәйҙәргә лә ярҙам иттек, уйнарға ла ваҡыт таптыҡ.

## Көпө

Беҙ бала саҡта өҫкә кейергә йүнле кейем дә юҡ ине. Ағайым үҫә төшкәс, атайым уға көпө тектереп алды. Табылды ауылында минең өләсәйем менән бер туған Ғөбәйҙулла бабайым бар ине. Скрипкала бик оҫта уйнай торғайны, был оҫталыҡҡа атайымды ла өйрәткән, ә ул үҙ сиратында - оло ағайыма. Ошо бабайым оҫта тегеүсе лә ине. Көпөнө йыл әйләнәһенә тегә торғайны. Көпө тигәнем, хәҙерге заманда кейгән яғаһыҙ пальтоға оҡшаш, ул шул тиклем йылы, үҙе еңел. Көпөгә һарыҡ йөнөн һалалар. Йөндө йыуалар, унан ҡаҙанда ҡайнаталар, киптереп тетәләр. Шул тиклем йомшаҡ килеп сыға. Тышлыҡын һатып алалар инде. Ғөбәйҙулла бабайым тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәүселәрҙең бөтәһенә лә оҙон көпө, ҡыҫҡа көпө, салбар, күлдәк, кемгә нимә кәрәк - шуны тегеп бирә ине. Бына беҙ шул көпөләрҙе кейеп үҫтек.

Шулай, эй, бала саҡ, бала саҡ, мәңге иҫтә ҡаласаҡ.

**Люциә БАЙНАЗАРОВА, Стәрлебаш районы Шәкәр ауылы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Һеҙҙе тотҡарлаусы хәүефтән һәм фобиянан арыныу

Бер ни тиклем асыҡлыҡҡа эйә булғас, тормошоғоҙ көндән-көн яҡшыра барасаҡ. Теләктәрегеҙ шул тиклем тиҙ тормошҡа ашасаҡ, хатта һеҙ быны тоймаясаҡһығыҙ ҙа. Һуңғы хәл-торошоғоҙ элекке алама ғәҙәттәрҙе икенсе төрлө программалаштырыуға бәйле буласаҡ. Насар ғәҙәттәр йоғонтоһонан арынығыҙ һәм шунда уҡ алға китәсәкһегеҙ. Һеҙҙе нимә шикләнеүсән, тыныһыҙ итә, шулар алға китешегеҙҙе, асылышығыҙҙы тотҡарлай.

Бына һеҙҙең көндәлек хәл-тороштар. Уларҙың ҡайһыһылыр башҡаларына ҡарағанда әҙерәк оҡшай икән, уны билдәләгеҙ йәки үҙегеҙгә хас булғандарын исемлектә ҡалдырығыҙ.

- Һеҙ самолетта осаһығыҙ
- Һеҙ бик бейектән ҡарайһығыҙ
- Һеҙ бәләкәй генә бүлмәләһегеҙ
- Һеҙ аудиторияға мөрәжәғәт итәһегеҙ.
- Һеҙ кем менәндер мөхәббәт мөнәсәбәттәренә инәһегеҙ
- Һеҙ үҙегеҙгә ниндәйҙер йөкләмә алаһығыҙ
- Һеҙ аҡса туҙҙыраһығыҙ
- Һеҙ яңы кешеләр менән осрашаһығыҙ.

Был хәл-тороштоң бер нисәһе генә, әммә тормошта улар йөҙҙәрсә булыуы мөмкин. Әгәр атап үтелгәндәр һеҙҙә кире тойғолар тыуҙырмай икән, яҡшылап уйлағыҙ, нимә һеҙҙең уйҙарығыҙҙа тәртипһеҙлек тыуҙырыуы мөмкин. Бындай ҡурҡыуҙың сәбәптәре нимәлә һуң?

1. Һеҙ күңелле булмаған ваҡиға кисергәнһегеҙ.
2. Кемдер насар хәлгә тарыған.
3. Һеҙгә бындай хәлдең үҙегеҙ менән дә булыу ихтималлығын әйткәндәр.

Әгәр был сәбәптәрҙе үҙегеҙҙең башығыҙҙа эҙләһәгеҙ, тиҙҙән табырһығыҙ ҙа, сөнки улар төпкә анда - "өйөгөҙҙә" (соланда, подвалда) һаҡланыуы мөмкин. Шундай урынды табығыҙ, юҡ икән, уны бар тип күҙ алдына килтерегеҙ. Хәҙер инде һеҙгә ни бары тулы ҡанлы тормош менән шатланырға, Илаһ менән бәйләнешкә инергә ҡамасаулаған барлыҡ ҡурҡыу һәм фобия сәбәптәрен һепереп түгергә генә кәрәк буласаҡ.

Көсөргәнештән арынып һәм "өйөгөҙҙәге" ҡурҡыу тойғоһон иҫкә төшөрөп тороусы бер генә сүпте лә ҡалдырмайынса таҙартҡанһығыҙ икән тип күҙаллағыҙ. Түбәндәге инструкцияны яҡшылап уҡығыҙ, нимә эшләргә кәрәклеген иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Ҡурҡыуҙы һәм фобияны бөтөрөү өсөн күнекмә:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙе соланығыҙҙа йәки подвалығыҙҙа икәнмен һәм унда сүп-сар таҙалайым тип уйлағыҙ. Һеҙ таҙартҡан сүп-сар үҙендә нимәнән ҡурҡаһығыҙ, шуның эҙен һаҡлай. Башҡа сүп-сарҙы ла шулайтып таҙалағыҙ.
- Таҙалап бөткәс, эшегеҙ менән һоҡланығыҙ. Сүп-сарҙан ҡотолоу күңелгә рәхәтлек, еңеллек килтергәнен тойоғоҙ.
- "Хәҙер ҡурҡыу тойғом кәмегәндән-кәмей. Мин һәр көндө тыныс һәм хәүефһеҙ үткәрә алам. Мин үҙемә тулыһынса ышанам. Һәм был ысынлап та шулай", - тип үҙ алдығыҙға ҡабатлағыҙ. Был һүҙҙәргә изге тойғолар һалығыҙ.
- Ҡурҡыуығыҙ кәмегәненә ышаныс тойоп күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Күнекмәне бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Хәҙер тормошоғоҙ яҡтыраҡ була башлар. Һеҙ тағы ла асығыраҡ булдығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 24 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**10.45, 17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00, 5.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Белль и Себастьян". [6+]**
**3.00 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**

## 25 ЯНВАРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**10.45, 17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Белль и Себастьян: Приключения продолжаются". [6+]**
**3.00 Спектакль "Зятек". [12+]**
**4.30 "Автограф". [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**

## 26 ЯНВАРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**10.45, 17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Х/ф "За пять минут до января". [12+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Белль и Себастьян: Друзья навек". [6+]**
**3.00 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 27 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**10.45, 17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Изменой не считается". [16+]**
**3.00 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 28 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30, 23.40 Т/с "Склифосовский". [16+]
0.45 XX Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орел". Прямая трансляция.
4.10 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 "Легенды музыки". [12+]**
**10.45, 14.15, 17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жених на двоих". [16+]**
**2.15 Спектакль "Люди на том берегу..." [12+]**
**4.00 "Бай". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 29 ЯНВАРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время.Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.35 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.50 Доктор Мясников. [12+]
14.00 Х/ф "Подари мне воскресенье". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Мой любимый друг". [12+]
1.25 Х/ф "Счастье есть". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт народного ансамбля бального танца "Вираж". [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Юлдаш-хит-2021. [12+]**
**2.00 Х/ф "Моя собака Робопес". [12+]**
**3.30 Спектакль "Любовница. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 30 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.25, 4.20 Х/ф "Подруги".
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.35 Парад юмора. [16+]
14.00 Х/ф "Подари мне воскресенье". [16+]
17.50 Танцы со звездами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
21.30 Х/ф "Человек, который знал все".

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Творческий вечер народной артистки РФ и РБ Флюры Кильдияровой. [12+]**
**19.45 Д/ф "Акмулла". [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.15 Х/ф "Новая жизнь". [16+]**
**1.00 "Морозное дыхание метели". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

### *ИҒЛАН*

Утерянный аттестат об основном общем образовании на имя Гареевой Гульшат Ульфатовны, выданный МБОУ школа №41 городского округа г. Уфа РБ, считать недействительным.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 ғинуар "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+
**26 ғинуар "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), музыкаль комедия. 12+
**28 ғинуар "Мираликундия"** (И. Кичанова, В. Лившиц), әкиәт. 12.00 6+
**"Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+
**29 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**30 ғинуар "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), провинциаль проза. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 ғинуар "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 16+
**29 ғинуар "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**30 ғинуар "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 12.00, 14.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**29 ғинуар "Знаменитый Незнайка"** (Н. Носов). 11.00, 13.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+
**30 ғинуар "Знаменитый Незнайка"** (Н. Носов). 11.00, 13.00 0+
**"Ямаҡай бәпкә"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 ғинуар "Йырҙарымды йөрәгемдән сығарам"** А. Туҡтағоловтың юбилей кисәһе. 6+
**28 ғинуар "Музыкаль династиялар"** Таһир һәм Айрат Кәримовтар. 6+
**29 ғинуар Тимофей Владимиров,** фортепьяно. 18.00 6+
**29 ғинуар "Ғүмерҙең йәмле сағы"** Сәйҙә Ильясова концерты. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 ғинуар Премьера! "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһынан күренештәр. 16+
**27 ғинуар "Game over. Конец игры"** (З. Сөләймәнов), йәштәр өсөн социаль драма. 12.00, 16.00 12+
**28 ғинуар "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 16+
**29 ғинуар "Волшебная лампа Аладдина"** (Д. Голубецкий), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 ғинуар "Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 12+
**28 ғинуар Премьера! "Энергия. Музыка. Душа"** В. Турченконың юбилей кисәһе. 6+
**29 ғинуар "Ләсәй"** (Ю. Тупикина), трагикомедия. 18.00 12+
**30 ғинуар "Царевны" "Сәрби"** сыуаш эстрада-фольклор ансамбле. 12.00 6+
**"Килдең, киттең - хуш, байғош..."** (М. Задорнов), лирик комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**Гастролдәр. Учалы филармонияһы сәхнәһендә:**
**24 ғинуар "Урал бөркөтө"** (Н. Ғәйетбай), драма фараз. 12+
**25 ғинуар "Йәнкиҫәк"** (Т. Килмөхәмәтов). 12+
**26 ғинуар "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.), хикәйәт. 12+
**27 ғинуар "Их, йәшәүҙәре рәхәт! Йәки Айғырыңдың ҡабырғаһы"** (Б. Ҡаһарманова), комедия. 12+
**28 ғинуар "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+
**28 ғинуар - 5 февраль Учалы районы буйлап гастролдәрҙә "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (21) дүшәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 15:48 | 17:35 | 19:05 |
| 25 (22) шишәмбе | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 15:50 | 17:37 | 19:07 |
| 26 (23) шаршамбы | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 15:51 | 17:39 | 19:09 |
| 27 (24) кесе йома | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 15:53 | 17:41 | 19:11 |
| 28 (25) йома | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 15:55 | 17:43 | 19:13 |
| 29 (26) шәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:57 | 17:45 | 19:15 |
| 30 (27) йәкшәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 15:59 | 17:47 | 19:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ПРЕМИЯҺЫ БУЛДЫРЫЛЫУҒА - 55 ЙЫЛ

## Беренсе лауреаттар




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Атака. Шәрипов. Нептун. Ғәфү. Баған. Ауыҙ. Зирә. Иртә. Ышаныс. Ул. Анод. Ел. Тула. Лобзик. Ҡыуал. Уйым. Ржев. Нуҡта. Оран. Ағай.

**Вертикаль буйынса:** Батыршин. Ноғоманов. Нарыҫтау. Шарт. Йәйғор. Ураҡ. Тархан. Аҡман. Иле. Урна. Баҙар. Уҫаҡ. Айова. Тана. Ғиззәтуллина. Аҙбар. Үксә. Һөйөндөков.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЯҠТЫЛЫҠ КӘРӘК!



**Ни өсөн күп кеше ҡышын күңел төшөнкөлөгөнә бирелә тип уйлайһығыҙ? Уның сәбәбе - көндәр ҡыҫҡа, төндәр оҙон булған саҡта беҙгә бары тик ҡояш нурҙары тәьҫирендә генә бүленеп сыҡҡан D витамины етешмәй башлай.**

Статистика буйынса, төрлө илдәрҙә йәшәүселәрҙең 20 проценты тирәһе миҙгел депрессияһына бирешеп бара икән. Был витамин аҡ майҙа, бауырҙа, диңгеҙ аҙыҡтарында, һөт продукттарында, сырҙа бар. Белгестәр файҙаһынан зыяны күп тип тыйһа ла, бик булмаһа, солярийға барып килегеҙ. Шулай уҡ хәҙер күп клиникалар яҡтылыҡ терапияһы тигән хеҙмәт тәҡдим итә. Бындай сеансты өйҙә, ҡеүәтле лампа аҫтында үҙегеҙ ҙә үткәрә алаһығыҙ. Бының өсөн электрҙы һаҡлаусы лампалар ярамай, йылы, һары-ҡыҙғылт-һары төҫ кәрәк.

Күңел төшөнкөлөгөнән шулай уҡ йөн әйберҙәр кейеү ҡотҡара. Улар сағыу төҫтә булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Йылы ойоҡбаш, төрлө төҫтәге шарф, свитер, бейәләй йәки баш кейеме йылытып ҡына ҡалмай, кәйефте лә күтәрә, ти психологтар.

Хәлегеҙ бөтөнләй бөтөп йөрөгәндә эфир майҙары өҫтәлгән йылытыусы ванналар инегеҙ. Мәҫәлән, ярты стакан һөткә 5 тамсы ҡара борос майын тамыҙығыҙ һәм ванналағы йылы һыуға өҫтәгеҙ. Аҙна дауамында көн һайын ошондай ваннала 10-15 минут ҡына ятып торһағыҙ ҙа өшөмәй башлаясаҡһығыҙ, йоҡоғоҙ ҙа яҡшырасаҡ, үҙегеҙҙе күпкә һауыраҡ тоясаҡһығыҙ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# "ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫ"...

## алышҡа сыға

**Бөгөн мәктәп үҙидаралығы, мәктәп ҡоролтайҙары, мәктәп парламенттары менән бер кемде лә аптыратып булмай. Эйе, беҙ, йәштәр, заман менән бергә атлайбыҙ һәм барлыҡ яңылыҡтарҙы тиҙ арала эләктереп алабыҙ, үҙебеҙҙең "үлсәмгә" һалабыҙ.**

Республикала әүҙемләшкән урындағы инициативаларҙы хуплау программаһы кеүек үк, беҙҙең мәктәптә лә муниципаль белем биреү ойошмалары уҡыусыларының тәҡдимдәренә нигеҙләнгән инициативалы проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы күҙаллаған проекттар конкурсы үтте. Унда биш команда ҡатнашып, беҙҙең "Төньяҡ амурҙары" проекты еңеп сыҡты. Еңеүебеҙ үҙенә күрә символик әһәмиәткә лә эйә, сөнки быйыл ата-бабаларыбыҙ ҡатнашҡан 1812 йылғы Ватан һуғышына 210 йыл тула, тап ошо һуғышта уларҙы "Төньяҡ амурҙары" тип йөрөтә башлайҙар. Был беҙгә оло яуаплылыҡ өҫтәй. Шуға күрә проект өҫтөндә бик күп эшләргә, күп нәмәләрҙе өйрәнергә, тарихҡа, тәрбиә мәсьәләләренә иғтибар йүнәлтергә тура килде.

Проектта ҡаралғанса, ошо арала мәктәптә тир бүлмәһе булдырыу, уны йыһазландырыу кеүек эштәрҙе атҡарып сығырға кәрәк. Бының өсөн уҡ, ян, лазерлы автомат, пистолет, экран, проектор һатып алырға кәрәк буласаҡ. Традицион яндан уҡ атыу күңел асыу йәки милли спорт төрө генә түгел, ә милләтте рухи тәрбиәләү, үҫеп килгән быуында үҙ милләтенә, тыуған иленә, тарихына ҡарата һөйөү уятыу, милли йолаларҙы тергеҙеү сараһы ла.

Был тирҙа шөғөлләнеп, ГТО нормаларының һөҙөмтәһен яҡшыртырға, "хәүеф төркөмөнә" ингән балаларҙы, ата-әсәләрҙе һәм яҡын-тирәләге ауыл халҡын да ылыҡтырыу, төрлө спорт ярыштары, фестивалдәр, һабантуйҙар үткәреү, хәрби-патриотик тәрбиә эше алып барырға мөмкин. Шулай уҡ 8-се, 10-11-се синыф уҡыусылары (150 кеше) өсөн йәшәү хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре дәрестәренең практик өлөштәрен ошо тирҙа үткәрергә мөмкин. Кластан тыш саралар ярҙамында йәш быуынды бынамын тигән итеп илһөйәрлек рухында тәрбиәләргә, төрлө сараларға ата-әсәләрҙе лә йәлеп итеп, быуындар бәйләнешен нығытырға була.

Йыл да район күләмендә үткәрелгән хәрби сараларҙа беҙҙең мәктәптән 20 егет ҡатнаша. Әгәр ҙә беҙҙең мәктәптә тир булһа, улар атыу буйынса үҙҙәренең күрһәткестәрен тағы ла нығыраҡ яҡшыртыр ине. Бынан тыш, ун бала традицион яндан уҡ атыу буйынса Өфө районы өсөн республика һәм төбәк-ара, Бөтә Рәсәй ярыштарында ҡатнашырға йыйына. Шулай уҡ уҡытыусылар командаһы ла "Зарница" уйындарында үҙ көсөн һынап ҡарай, "Мәргән уҡсы" этабында ҙур һөҙөмтәләр күрһәтә ала. "23 февраль - Тыуған илебеҙҙе һаҡлаусылар", " Атайҙар көнө" һәм башҡа сараларҙа ла уҡ атыу бәйгеләрен индерергә мөмкин.

Традицион яндан атыу йолаһын тергеҙеү, үҙаллы шөғөлләнгән уҡсыларҙың оҫталыҡтарын камиллаштырыу, милли спорт төрҙәрен, милли йолаларыбыҙҙы өйрәнеү йәш быуынға рухи, патриотик тәрбиә бирә тип уйлайым. Шуның өсөн дә был проект мәктәбебеҙҙә яҡлау тапты. Артабан район күләмендә лә хупланыр тип өмөтләнәм.

**Дания ҒӘЗИЗОВА,**
**Өфө районы Шамонин мәктәбенең 10-сы класс уҡыусыһы.**

✓ *Тормошта йәшәүҙең ике ысулы бар: барыһына ла ышаныу йәки бер нәмәгә лә ышанмау - икеһе лә һине баш ватыуҙан ҡотҡара. (Альфред Корзбски).*



ӘЙТЕШ

# АС БУЛҺАҠ ТА АСЫҠМАНЫҠ,

## Өшөмәнек туңһаҡ та...

(Башы 11-се биттә).

*Мансур Рәхимғолов:*
"Заман башҡа - заң башҡа",
- ти,
Йән ҡайғыны көнүҙәк.
Бөгөнгө көн тыуған йөндән,
Киткән әрүах күберәк.
"Тел дә тел! " тип көрәшәбеҙ,
Башыбыҙҙы кем һаҡлар?
Йән эйәһеҙ ҡалмаҫтармы
Урал, Йылайыр, Һаҡмар?

*Рәйсә Исәнбаева:*
Төшөнкөлөккә бирелмәй,
Уфтанмай ҙа, зарланмай,
Бөгөнгө мәсьәләнән
Йөҙөбөҙҙө бормайыҡ,
Дөйөгөш без тимәгән,
Ҡомға башты тыҡмайыҡ.
Йылдың көнө бер булырмы,
Артын туфан баҫырмы,
Уйланайыҡ, атыр таңды
Ҡаршы алыр булырмы?
Бөгөнгөнө уйлай-уйлай
Иртәгәне алдан һайлап,
Уңайлы яҡты алып
Һайлап йәшәр булайыҡ.
Ҡуй нарыҡы булмайыҡ,
Ҡыуғанға ыҡ булмайыҡ,
Әйтер һүҙҙе алға ҡуйып,
Хәҡиҡәтте юллайыҡ.
Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй,
Яңғыҙ тауыш - юҡ тауыш,
Һеҙгә юҡ артта ҡалыш,
Мансур баҫ төймәләрен,
Ас һуң һүҙ көймәләрен,
Башҡаларға бир һүҙең,
Әйтһендәр ап-аҡ һүҙен.

*Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:*
Иң ҡәҙерле хазинабыҙ
Телебеҙ шул, телебеҙ!
Шул телебеҙ йәшәгәнгә
Теребеҙ бит теребеҙ.
Мәрйәм апай әйткәйне,
Һүҙе йәнде өткәйне:
Рухы һүнгән ауылдың
Янындағы туғайҙы
Баҫа һары сәскәләр...
Тәбиғәт тә моңайҙы...
Ә бит беҙгә ошо ерҙе
Хоҙай үҙе биргәйне.
"Үҙемә тип ҡалдырғайным,
Башҡорт алһын!" - тигәйне.
Ожмахҡа тиң еребеҙҙең
Китә бары ҡәҙере.
Киләсәкте уйлауҙар юҡ,
Ҡәҙерләрәк хәҙере.
Уйлай китһән, киләсәк бит
Башлана һинән-минән.
Сабыйҙарҙың "Әсәй!" тиеп
Асылған да теленән.
Хоҙай биргән ерҙе һаҡлап
Булыр өсөн сауаплы...
Бының өсөн Андрей түгел,
Әкрәм, Рәмил яуаплы,
Әхмәр, Мансур яуаплы.

*Рәйсә Исәнбаева:*
Тура атып, бәрә әйттең,
Йәндәрҙе өтөп әйттең.
Мин әйтмәһәм,
Һин әйтмәһәң,
Башҡа кем әйтер тинең.
Ергә хужа булыр өсөн,
Ошо ерҙе һаҡлар өсөн,
Милләт телен яҡлар өсөн,
Барыбыҙ һалһын көсөн.
Үҙ телдә уҡытыр өсөн
Ғаризалар кәрәкме?
Әллә ошо мөғәмәлә
Беҙҙең телгә кәртәме?
Беҙ башҡорт тип иҫәпләнһәк,
Туған тел тип әр һуҡмаһаҡ,
Беҙҙең өсөн көрһәнәр кем,
Түгерме йөшен нарманҡ?
Уйланайыҡ, сәсәндәр,
Йәштәргә бирер кәңәш,
Уйланырлыҡ тәү сәбәп
Башлана ул тик беҙҙән.
Беҙҙең һүҙ аҡыл булһын,
Аҡһаҡал һүҙе булһын,
Сәсәндәрсә бик тапҡыр,
Егеттәрсә бик батыр
Аҡыллы алтын булһын.
Йоҙаҡланмаһын мәктәп,
Ябылмаһын клубтары.
Был сара булыр михнәт,
Булыр ауылдың зары.

*Мансур Рәхимғолов:*
Әй, Үтәбай, Үтәбай,
Әйткәнең үтә ябай,
Әммә ләкин, ултырам әле
Фекеремде һүтәлмәй.
Рәйсә менән икегеҙ ҙә
Ҡәйеф юҡты һиҙгәҙ.
Көтөүҙән артҡа ҡалма, тип,
Ян башыма тибгәҙ.
Беҙҙең бында яҙғандан,
Энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙғандан
Ней көтәһең аҙғандан,
Ниндәй файҙа ҡалғандан?
Балаһы тыуһа урыҫса
Тәүге хәбәр һалғаны,
Шуға эйәреп бар туғаны
Үҙе телен боҙғаны
Бер кемгә ғәжәп түгел,
Шуға бик төшә күңел.
Белемгә юл ябылғас,
Арҡыры бик һалынғас,
Башҡортта маңҡорт бөтмәҫ,
Телең һине үҙ итмәҫ.

*Әкрәм Ҡәйепҡолов:*
Балам башҡортса белмәй,
тип
Бер киленем әйткәйне.
Рус класына етәкләп
Үҙе улын илткәйне.
Бергә түгел, башҡа йәшәй
Өйрәтер өләсәйҙәр.
Тәрбиәне интернетҡа
Тапшырҙылар әсәйҙәр.

*Рәйсә Исәнбаева:*
Быуна шулай баҙнат һаҡлап,
Күңел төшөрөп торғас,
Улым, һинә әйтәмен, тип
Киленеңдә тыймағас,
Нинә урыҫ булмаһын,
Баҫалҡылыҡ һаҡлағас?
Башҡортса белеү фарыҙ, тип
Әсә ҡанында һалын тип,
Баштан тылҡып тормағас,
Булғанына йомоп күҙ
Үҙенде тыйып торғас.
Ағай-эне, ғәйеп беҙҙә,
Торғонлоҡта килештек.
Рәми ағайҙың әләмен,
Башҡорт теле әләмен,
Урында күтәрһе,
Әле ергә төшөрҙәк.
Эште башлап, сәсәндәр
Күргән берен әйткәндәр..
Һеҙ бит әле, сәсәндәр
Ҡыйыуырак егеттәр,
Һүҙҙән күсегеҙ эшкә,
Һеҙгә ҡушылыр күптәр.

ҮӘТ ШӘПТӘР!

# ҮҘ КӨСӨҢӘ ЫШАН!



**Өфөнөң "Арт-квадрат" киңлегендә үсмерҙәр өсөн "Ышан" мистик сериалының исем туйы үтте. Уның ҡышҡы каникулда Башҡортостан юлдаш телевидениеһында күрһәтелгән ете серияһын тамашасылар бик ҡыҙыҡһынып ҡараған.**

Сериал хәҙерге үсмерҙәрҙең проблемаларын күтәрә. Ете серия - башҡорт халыҡ легендаһындағы ете ҡыҙҙың бәләгә тарыған үсмерҙәргә нисек ярҙам итеүе тураһында ете тарих. "Ышан" сериалының социаль әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Проект балаларҙың һәм үсмерҙәрҙең туған телгә, мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, үҫеп килгән быуындың проблемаларына ата-әсәләр һәм йәмғәтселек иғтибарын йәлеп итеү маҡсаттарын алған. "Ышан" сериалы балаларҙы һәм үсмерҙәрҙе үҙ көсөнә, яҡындарына ышанырға саҡырыуы менән ҡиммәтле, - ти мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. - Был иһә "Тамыр" телеканалының бындай форматтағы икенсе әһәмиәтле проекты. Тәүге "Бирешмә!" сериалында каналдың ижади командаһы йәш тамашасыларҙы бирешмәскә саҡырҙы. Яңы фильмдың төп идеяһы ла ошо. Ижади төркөмгә, актерҙарға, балаларға рәхмәт! Артабан да "Тамыр" ошондай кәрәкле сериалдар төшөрһөн тип теләйем".

Шулай уҡ РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов, Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды директоры Люция Юлыева, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директоры Рөстәм Зәрәфетдинов та "Тамыр" командаһына ошондай мөһим һәм көнүҙәк проект өсөн рәхмәттәрен белдерҙе. "Тамыр" телеканалында эшләгән коллегаларымдың уңыштарына ныҡ һөйөнәм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге заманда балалар өсөн сифатлы кино контенты аҙ. Әле беҙҙә телевизион кинематограф та үҫешә. Республикала милли Голливуд булдырырлыҡ ҡеүәт бар. Күберәк төшөрөргә, күберәк ижад итергә кәрәк", - тине яңы сериалды юғары баһалап билдәле кинорежиссер Булат Йосопов.

Ошо көндәрҙә "Ышан"дың ете серияһы ла социаль селтәргә һалынасаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР ТАМСЫ ҺЫУҘА ЛА,

## туҙан бөртөгөндә лә ул Хоҙай

Өйләнеү - үҙеңдең ахмаҡлығыңды белеү өсөн иң яҡшы ысул.
**(Оскар Уайльд).**

Хоҙай бер тамсы һыуҙа ла, бәләкәй генә туҙан бөртөгөндә лә ул.
**(Махатма Ганди).**

Хәүеф һәм һоҡланыу бер ботаҡта үҫә.
**(Немец халыҡ мәҡәле).**

Күп әйберҙәр яҡшыра бара, тик кеше асылы ғына үҙгәрмәй.
**(Уильям Моэм).**

Беҙҙең һәр беребеҙ - үҙ ҡылыҡтарыбыҙҙың улы.
**(Мигель Сааведра).**

Тормошта йәшәүҙең ике ысулы бар: барыһына ла ышаныу йәки бер нәмәгә лә ышанмау - икеһе лә һине баш ватыуҙан ҡотҡара.
**(Альфред Корзбски).**

Яуаплылыҡтан ҡасыуҙың иң яҡшы юлы: "Мин бының өсөн яуап бирәм", - тип әйтеү.
**(Ричард Бах).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше ҡорбанға килтерәсәк кәзәне елкәһенә һалып, өйөнә ҡайтып бара икән. Юлда уны "Их, бөгөн ошо кәзәне ашарға ине бит әле..." тип ҡыҙыҡҡан өс мут егет күҙәтеп тора. Шунан улар кәзәне ҡулға төшөрөү өсөн хәйлә уйлап таба. Тәүҙә был кәзә хужаһының ҡаршыһына егеттәрҙең береһе осраған була һәм: "Һин елкәңә йөкмәп барғас, был эт, һис һүҙһеҙ, бик ҡәҙерлелер. Ул, моғайын, хайуандарҙы шәп ҡыуалыр..." - ти ҙә, шәп-шәп атлап, уҙып китә. Кәзә хужаһы уның артынан:"Ҡара, нимә һөйләй бынау йүнһеҙ, мин ниңә этте елкәмә йөкмәп барайым инде? Был һис булмай торған хәл!" - тип уйлап ала ла, ары китә.**

**Бына мут егеттәрҙең икенсеһе уның ҡаршыһына сыға һәм: "Һин ни уйлап сығарҙың, ә? Үҙең арыу ғына кешегә оҡшағанһың, ә үҙең эт йөкмәп алғанһың. Бәлки, ул ҡуяңды шәп ҡыуалыр?" - ти. "Бына иҫәрҙәр! - тип уйлай кәзә хужаһы уның артынан. - Кәзәне эттән айыра белмәйҙәр..."**

**Кәзә йөкмәп килгән ирҙең ҡаршыһына баяғы муттарҙың өсөнсөһө килеп сыға һәм: "Уй, миңә ҡағыла күрмә. Эт күтәреп йөрөгәс, һинең кейемдәрең дә, күңелең дә таҙа түгелдер..." - ти. "Был нимә була инде? - тип ҡыҙып китә кәзә хужаһы. - Нисәмә кеше әйткәс, был дөрөҫ була түгелме? Бәлки, мин, ысынлап та, кәзә һынындағы шайтанды йөкмәп китеп барамдыр?" Шулай уйлап та өлгөрә, кәзәһен ергә атып бәреп, йүгереп тә китә. Ә муттарға шул ғына кәрәк була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22003

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 73